ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 сентябрь (нарысай)

2021

№36 (974)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иркен

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Янғындар юҡтан ғына сыҡмай...**



2-3

**Халҡыма асыҡ хат**



6

**Ул музыка белгесе.**

Яҙғандары башҡорт музыкаһы тураһында



8-9

**Ҡартатай һабаҡтары онотолмай!**



12-13

**Һайлауҙар** 14-15

*Иғтибар! Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының иң ҡыҙыу мәле башланды. Шулай итеп, 2022 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 1 сентябрҙән 731 һум 66 тин тәшкил итә. Был миҙгелдә лә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер матур ғына китаптарға лайыҡ буласаҡ. Почтальондар ҙа бүләкһеҙ ҡалмаясаҡ. Гәзит уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһына ҡушылып, баҫмабыҙҙы атай-әсәйҙәренә, мәктәптәргә, дуҫтарына яҙҙырып бүләк итә ала.*

*Мөхәрририәт.*

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

**Хәбәр ителеуенсә, ошо көндәрҙә Өфөлә IX "Йәш һөнәрмәндәр (WorldSkills Russia)" милли чемпионаты булып үтте. Унда ҡатнашыусы уҡыу йорттары етәкселәре үҙ тәрбиәләнеуселәренең ҡаҙаныштары һәм тәьҫораттары менән бүлешә.**




***Әлфир ҒАЙСИН, Өфө художество-гуманитар колледжы директоры:*** Беҙҙең уҡыу йорто был чемпионатта ювелир эше майҙаны өсөн яуаплы булды. Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән 19 кеше, шуларҙың туғыҙы мәктәп уҡыусыһы, ювелир эше буйынса үҙ оҫталығын күрһәтте. Бик көслө, аҡыллы, оҫта балалар ҡатнашты, улар араһында студентыбыҙ Илүзә Латипова ла бар ине һәм Өфө ҡалаһынан тағы мәктәп йәшендәге ике конкурсант булды. Ярышта һәр ҡатнашыусы эргәһендә бер эксперт һәм тағы ла ике баш эксперт эшләне. Майҙансыҡта кешеләр күп булды, балалар эргәһенә яҡын килергә рөхсәт ителмәне һәм улар өс көн дауамында шундай көсөргәнештә даими күҙәтеү аҫтында эшләне. Ҡыҙғанысҡа күрә, беҙҙең студентыбыҙ призлы урын алманы, әммә ул унау араһында алтынсы урынға сыҡты. Был юғары һынауҙан беҙ иң мөһиме тәжрибә туплап сыҡтыҡ. Әҙерләнгәндә тәү сиратта нимәгә иғтибар итергә кәрәклекте аңланыҡ. Баҡтиһәң, бында оҫталыҡтан тыш, ныҡышмаллыҡ, тәртип, көс, рух, республика һәм халыҡ өсөн көйөргә, намыҫҡа тап төшөрмәү өсөн тырышлыҡ һалырға кәрәк икән. Шунһыҙ, йәштәр албырғап, тойғоларға бирелеп, күңеле һүрелеп төшә лә ҡала. Әлбиттә, ювелир эшен баһалағанда һәр эксперттың субъектив ҡарашы булыуын да иҫәпкә алмай булмай, сөнки көмөштән яһалған бер биҙәк берәүгә оҡшай, икенсегә оҡшамауы ла бар.

Колледж етәкселәре Башҡортостандан ситкә сығып йөрөмәй бигүк, үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ҡайнап тик йөрөйбөҙ кеүек ине. "Йәш һөнәрмәндәр" конкурсы был йәһәттән дә бик файҙалы булды: илдең төрлө төбәктәренән килгән коллегаларыбыҙ менән яҡындан таныша, аралаша һәм кәңәшләшә алдыҡ. Бына, мәҫәлән, Татарстандың шундай уҡ художестволы-гуманитар колледжы директоры менән бик файҙалы һөйләшеү булды, тәжрибә уртаҡлаштыҡ. Ул да бынан бер нисә йыл элек Ҡаҙанда уҙғарылған "Йәш һөнәрмәндәр" чемпионатының ыңғай һөҙөмтәләре күп булыуын, колледждар яңыртылыуын, донъя кимәлендә талаптарға яуап биргән заманса ҡоралдар алыныуын әйтте. Беҙҙә лә йәштәргә һөнәри белем биреүгә, йәш оҫталарҙы тәрбиәләүгә иғтибар бынан һуң кәмемәҫ, тип ышанабыҙ. Әйтергә кәрәк, Татарстан бик күп компетенциялар буйынса яҡшы үҫешкән, еңеүселәрҙе бүләкләгәндә лә уларҙың Мәскәү менән көнәркәшлек итә алыуы асыҡ күренде. Беҙҙә лә көслө колледждар, алтын миҙалдар яулар оҫта йәштәребеҙ барлыҡҡа бар һәм киләсәктә уларҙың һанын тағы ла арттырыу мөһим. Быны бөтә коллегаларым да яҡшы аңлай. Шуны әйтергә кәрәк: республика колледждары етәкселәре араһында ниндәй генә милләт кешеһе булмаһын, Башҡортостан намыҫына тап төшөрмәҫ өсөн көйөп эшләнеләр. Чемпионаттың иң фәһемле, әһәмиәтле күренеше минең өсөн ошонда сағылды ла инде: бер маҡсатта берҙәм, кәңәшләшеп һәм ярышып эшләнек.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫ МЕНӘН!

**Башҡортостанда 498 441 уҡыусы өсөн яңы уҡыу йылы башланды. 60 239 бала тәүге тапҡыр парта артына ултырҙы.**

Өфөлә 130 меңдән ашыу уҡыусы мәктәпкә барҙы. Быйыл баш ҡалала беренсе класс уҡыусылары - 15 меңдән ашыу.

Донъялар тыныс булып, балаларҙың - мәктәптә, йәштәрҙең - уҡыу йорттарында һабаҡ алыуын дауам итеүе үҙе шатлыҡ, бәхетле мәл, тип иҫәпләй атай-әсәйҙәр. Әммә... Башҡортостан Башлығы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең республика кәңәшмәһендә: "Уҡыу процесын дистанцион уҡытыу форматына күсереү өсөн нигеҙ юҡ, ләкин коронавирус инфекцияһының таралыуын иҫәпкә алып, барыһына ла әҙер булырға кәрәк", - тип белдергәйне. Эйе, әҙер булырға кәрәк, ләкин яҡшыға өмөт менән йәшәйек, балаларыбыҙҙы сирҙәрҙән, бәлә-ҡазаларҙан һаҡлайыҡ. Яңы уҡыу йылы менән!



12+

✓ *Мәҫәлән, уҙған йыл ғына алкоголле эсемлектән 400 миллиард һум акциз һалымы йыйылған, ә эскелеккә ҡаршы сараларға ни бары 400 миллион һум тотонолған.*



*ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...*

# ӨҪТӘМӘ ТҮЛӘҮ БИРЕЛӘ ИКӘН,

## тимәк, хаҡтар артасаҡ...

**Беҙҙең халыҡта шундай һәйбәт йола бар: баҡса-тирә яғыңды кәртәләп ҡуйыу. Мин дә атай йорто урынын кәртәләп алырға булдым. Былтыр торбаларҙан бағана ултырттым да, штакетник беркетә торған квадрат торбалар алырға металл базаһына юл тоттом. Уның хаҡы тешләшә кеүек тойолдо. Тейешле сумма йыйылғас, магазинға тағы килдем. Хаҡы ошо арала ике тапҡырға артҡан. Быйыл яҙ башы менән юл төшкәндә тағы инеп сыҡтым унда. Былтыр көҙөн метры 68 һум торған торбаның хаҡы өс тапҡырға күтәрелгәйне. Мин аптырап ҡалдым...**

Сәбәбен яңыраҡ төҙөлөш материалдары келәтенә таҡта алырға барғанда аңлаттылар. Квадрат торба менән килеп сыҡмағас, кәртәне таҡтанан эшләргә ҡарар иттем. Бер йәш ханым ни өсөн төҙөлөш материалдарына хаҡ сүпрә ҡабарған кеүек артыуы менән ҡыҙыҡһынды. Һатыусы, күҙен дә йоммай: "Һеҙгә йорт төҙөргә ярҙамға Әсәлек капиталы бирелә", - тип әйтеп һалмаһынмы! Туғыҙ ай буйы яфаланып ҡорһағында бала йөрөтөп, уны кәмендә ике тиҫтә йыл үҫтереүгә бирелгән аҡса кемдәлер көнсөллөк тыуҙырыуы ҡыҙғаныс. Дәүләт тарафынан эшҡыуарҙарға ярҙам күрһәтелеүе бер әсәйҙә лә көнләшеү тойғоһо тыуҙырмай бит!

Һөйләшеүгә сиратта торған тағы бер ханым ҡушылды. Баҙарҙа балаларына йәшелсә алырға ҡарар иткән икән. Урыҫса этептөртөп һөйләшкән көньяҡ кешеһе: "Ана һинең һәр балаңа унар мең һум бирҙеләр бит, шунан бер аҙ бүлеш", - тип йылмайып ҡарап тора, ти. Эйе, ил Президенты ҡарары менән һәр уҡыусы балаға ошондай өҫтәмә түләү бирҙеләр, ләкин замана сауҙагәрҙәре уны үҙенсә аңлаған икән. Дөрөҫ, мәктәп кәрәк-яраҡтары менән сауҙа иткәндәрҙең тауары әйләнештә йөрөһөн өсөн был ныҡ ярҙам. Ә уның ҙур өлөшө ике-өсәр бала үҫтергән атай-әсәйгә тейә. Бына шуны иҫәпкә алып күрһәтелде лә инде ярҙам, тик, ғәҙәттәгесә, уны алыпһатарҙар ҙа үҙ файҙаһына борорға иҫәп тота.

Билдәле булыуынса, күп йәштәр ял көндәрен ҙур-ҙур шешәләргә тултырған һыра эсеп уҙғара. Улар араһында дәүләттән ошондай ярҙам алған йәш атай-әсәйҙәр ҙә юҡ түгел. Совет замаһында эскелеккә ҡаршы агитация көслө ине. Хәҙер телевидениенан күрһәтелгән бер нисә минутлыҡ роликты агитация материалына иҫәпләмәһәң, эскелеккә ҡаршы бер ниндәй ҙә эш алып барылмай тип уйларға була. Ә был дәүләт тарафынан ебәрелгән ҙур хаталарҙың береһе. Мәҫәлән, уҙған йыл ғына алкоголле эсемлектән 400 миллиард һум акциз һалымы йыйылған, ә эскелеккә ҡаршы сараларға ни бары 400 миллион һум тотонолған.

Дәүләт тарафынан күрһәтелгән финанс ярҙамына, аҡса елгә осмаһын өсөн, уны яҡларлыҡ механизм да булырға тейештер бит. Бына үрҙә атап үтелгән металл изделиеларға хаҡ артыуҙы рәсми органдар, йәнәһе, сит илдә улар ҡиммәтләнә барыу менән аңлата. Ә кем сит тарафтарҙа металл менән сауҙа итеүҙе көсләп тағы һуң? Унда һатыуҙа ҡатнашаһың икән, ҡатнаш, тик үҙ илең эсендә уларҙың законын ҡулланма. Берәү ҙә Америка Ҡушма Штаттарында, Европа илдәрендә эш хаҡы Рәсәйҙәгенә ҡарағанда ун тапҡыр артыҡ, тип, беҙҙә лә ун тапҡырға күтәрмәй бит!

Бына был яҙмала телгә алынмай ҡалған тағы бер тема бар: "ҡыҙыл зона"ла эшләгән медиктарға өҫтәмә түләү. Август айында ғына уның өсөн 46 миллиард һумдан ашыу өҫтәмә финанс бүленде. Былай барһа, тиҙҙән оятһыҙ алыпһатарҙар ошо, үҙенең, яҡындарының ғүмерен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып эшләп алған аҡсаға ла ҡул һуҙмаҫмы?

**Әмир ҺАҘЫЕВ.**

*ЯҢЫ РУБРИКА: "АБВ"*

# ЯНҒЫНДАР ЮҠТАН ҒЫНА СЫҠМАЙ...




**Һуңғы йылдарҙа, бигерәк тә быйыл, янғындарҙың уғата ҡотороуы тормошобоҙҙоң үтә лә хәүефле проблемаһына әүерелде. "Бурҙан ҡала, уттан ҡалмай" ти халыҡ мәҡәле. Беҙ күберәк осраҡта сабыуыбыҙға ут ҡапҡас ҡына йүгермәләргә тотонабыҙ ҙа, күп йәһәттән һуңлайбыҙ. Ҡоролоҡло йылдарҙа ут ялҡынын тиҙ генә ауыҙлыҡлап алам тимә, сөнки монгол сиреүе кеүек, юлындағы һәр ҡаршылыҡты ялмай килгән "ҡыҙыл әтәс" үҙенекен алмайынса, йотмайынса туҡтамай. Уттың тамағы туймай.**

Хәйбулла районының "Аҡсарлаҡ" балалар ял лагерын ялҡын теленә бирмәҫ өсөн район хакимиәте башлығы Рөстәм Шәрипов етәкселегендәге командала миңә лә ҡатнашырға тура килде, аҙаҡ Йәнтеш ауылы янында сыҡҡан янғындарҙы ауыҙлыҡлауҙа ла ҡатнаштым. Әйтергә кәрәк, әгәр ҙә хәйбуллалар бер төптән, берәгәй булып күтәрелеп сығып, ут ялмауырына ҡаршы тормаһа, янғындарҙың һөҙөмтәһе тағы ла аяныслыраҡ булыр ине.

Янғындар сығыу сәбәптәренә, ғөмүмән, ошо афәткә бәйле башҡа проблемалар хаҡында бер нисә фараз-дәлилдәремде килтереп китергә лә йөрьәт иттем. Янғындар нилектән сыға һуң?

А Уларҙың климат шарттарына бәйле башланғандары, һис һүҙһеҙ, күберәк. Якутияла 8

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

***Хәбәр ителеүенсә, ошо көндәрҙә Өфөлә IX "Йәш һөнәрмәндәр (WorldSkills Russia)" милли чемпионаты булып үтте. Унда ҡатнашыусы уҡыу йорттары етәкселәре үҙ тәрбиәләнеүселәренең ҡаҙаныштары һәм тәьҫораттары менән бүлешә.***

***Сынтимер БАЯЗИТОВ, Өфө күп профилле һөнәри колледж директоры:*** IX "Йәш һөнәрмәндәр" (WorldSkills Russia)" милли чемпионат финалы Башҡортостан өсөн бик әһәмиәтле, масштаблы сара булды. Уға бик ҙур әҙерлек эше алып барылды, ҡиммәтле йыһаздар алынды. Беҙҙең колледж студенттарҙы һәм мәктәп уҡыусыларын "Визаж һәм стилистика", "Визуаль мерчендайзинг", "Эстетик косметология", "Башланғыс кластарҙа уҡытыу" компетенциялары буйынса әҙерләне. "Визаж һәм стилистика" йүнәлешендә студентыбыҙ Арина Миролюбова бронза миҙал яуланы, ә башланғыс кластарҙа уҡытыуҙа беҙ әҙерләгән уҡыусы Светлана Милютина көмөш миҙалға лайыҡ булды. Әҙерлегебеҙ бушҡа китмәне, ваҡыт тар булһа ла, эшебеҙҙең һөҙөмтәһен күреп ҡыуандыҡ. Мәскәү, Санкт-Петербург, Новосибирск һәм башҡа ҡалаларҙан килгән менеджерҙар, эксперттар ҙа маҡтаны беҙҙең уҡытыусыларҙың эшен, майҙансыҡтарҙы, оҫтаханаларҙы. Улар колледжыбыҙҙы ла килеп күрҙе, тағы ла ниндәй компетенциялар буйынса чемпионатта ҡатнашырға мөмкин булыуын әйттеләр. Мәҫәлән, киләсәктә тырнаҡ сервисы тигән компетенция буласаҡ һәм беҙҙең әҙер оҫтахана бар.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров пленар ултырыш барышында милли чемпионат финалын Башҡортостанда йыл да үткәрергә тәҡдим иткәйне. Әлбиттә, был беҙҙең республика өсөн бик әһәмиәтле буласаҡ. Әммә уның ойоштороусыларҙан физик көс, сығымдар талап итеүен дә иҫәпкә алһаҡ, ике йылға бер беҙҙең ерлектә үткәреү отошлораҡ булыр һымаҡ. Бынан тыш, пленар ултырыш барышында күтәрелгән мәсьәләләрҙә Рәсәй иҡтисадын күтәреү өсөн йәш оҫталарҙы әҙерләү эшен йәнләндереү, үҫеп килгән йәш быуынды эшсе һөнәрҙәргә ылыҡтырыу буйынса кәңәшләштек. Был йүнәлештә атҡарылаһы эштәр тураһында һүҙ барғанда Башҡортостанда компетенцияларҙы арттырырға кәрәклеге телгә алынды. Мәҫәлән, был юлы беҙҙә 105 компетенция булды, ә төрлө һөнәр эйәләрен ылыҡтырыу өсөн һәр кемдең үҙ компетенцияһы буйынса ярышыу мөмкинлеге бирелергә тейеш. Балалар менән мәктәптән үк профориентация эшен дөрөҫ алып барыу ҙа эшсе һөнәрҙәрен популярлаштырыуға, һөнәри белем биреү өлкәһен үҫтереүгә һәм йәш оҫталар һанын арттырыуға булышлыҡ итәсәк. Тота килеп һин шунда уҡырға бар, тип түгел, ә һөнәр баланың күңеленә ятырға тейеш һәм бына шул һөйөүҙән сығып эшләргә кәрәк. Ә ғөмүмән, "Йәш һөнәрмәндәр" чемпионатының әһәмиәте тураһында фекер йөрөткәндә, бында тәжрибә менән уртаҡлаша алыуыбыҙ иң мөһиме: бүтәндәрҙе күрҙек һәм яҡшыһын алдыҡ. Был сара бик матур башланғыс һәм республика һөнәри уҡыу йорттары өсөн ынтылыш биреп, йәш быуынға этәргес көс булып тора. Башҡортостан үҙенең юғары кимәлдә эшләй алыуын иҫбатланы, ниндәйҙер етешһеҙлектәр булһа - бөтәһе лә еңеп сығырлыҡ.

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Оператив штабтың 3 сентябргә мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда коронавирустан 14 үлем осрағы теркәлгән. Йәмғеһе 1159 сирлене ғүмере өҙөлгән. Бер тәүлектә коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 304 осрағы асыҡланған. Бөтә осорҙа уларҙың һаны 57 958-гә еткән. Әлеге ваҡытта 717 пациент стационарҙа дауалана. Уларҙың 64-енең хәле ауыр, 12-һе үпкәне яһалма елләтеү аппаратына тоташтырылған. Бер тәүлектә 130 дауахананан тыш пневмония осрағы теркәлгән.

✓Өфөлә Рәсәйҙәге һөнәри белем биреү учреждениелары студенттары һәм уҡыусылары араһында WorldSkills стандарттары буйынса иң күләмле һөнәри оҫталыҡ ярыштарына - IX "Йәш һөнәрмәндәр " (WorldSkills Russia) милли чемпионаты финалына йомғаҡ яһалды. Дөйөм команда иҫәбе һөҙөмтәләре буйынса Мәскәүҙең йыйылма командаһы беренселектең абсолют чемпионы тип танылды. Миҙал иҫәбе буйынса беренсе урынды Татарстан Республикаһы яуланы. Икенсе урынды Башҡортостан Республикаһы һәм Санкт-Петербург командалары бүлеште. Өсөнсө урынды Мәскәү өлкәһе алды.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров бөгөн IX "Йәш һөнәрмәндәр" милли чемпионаты финалының эшлекле программаһы сиктәрендәге пленар ултырыш ваҡытында Өфөнө WorldSkills Russia финалын уҙғарыу өсөн даими майҙансыҡ итеп ҡалдырырға тигән тәҡдим индерҙе. "Чемпионат - ҡатмарлы күренеш ул, асылда, ҡыҫҡа ваҡытта 100 завод төҙөгән кеүек. Башҡортостандан һәм федераль үҙәктән коллегаларыбыҙ менән быны тикшерербеҙ. Бик мөһим һәм ҡыҙыҡлы тәҡдим", - тине һөнәри оҫталыҡты үҫтереү агентлығының генераль директоры Роберт Уразов, журналистарҙың һорауҙарына яуап биреп.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров 29 августа Өфөлә тамамланған WorldSkills милли чемпионаты йомғаҡтары буйынса барлыҡ колледждарҙың директорҙары менән осрашырға ниәтләй. "Беҙ 100 оҫтахананы ярыштар үткәреү өсөн һатып алынған заманса станоктар һәм техника менән тәьмин итергә уйлайбыҙ", - тине Хәбиров. Республика етәксеһе төбәк йыйылма командаһынан чемпионат еңеүселәре менән дә осрашырға йыйына.



миллион гектар майҙанды яулап алған янғындарҙың сәбәбен мәңгелек туңлыҡ ирееүе менән дә бәйләйҙәр. БМО мәғлүмәттәренә ярашлы, 2050 йылда Антарктиданың тулыһынса ирееп бөтөүе бар. Был дөрөҫкә сыҡһа, Хоҙайым һаҡлаһын, Ер шарында эсәр һыу ҡытлығы тыуасаҡ, геосәйәси донъяла глобаль үҙгәрештәр көтөлөүе ихтимал, тарихтағы халыҡтарҙың Бөйөк күсенеүен хәтерләткән "климатик ҡасаҡтар" хәрәкәте барлыҡҡа килмәҫ тимә.

Йәдкәр Бәширов үҙенең "Бөйөк Башҡорт иле" китабында атай-олатайҙарыбыҙҙың үткән меңйыллыҡтар башында ике тапҡыр Уралға быуатлыҡ ҡоролоҡ килгәс, тәүгеһендә Себер яҡтарына, икенсеһендә Иран яҡтарына барып йәшәп, һуңынан тыуған еренә кире әйләнеп ҡайтыуын тарихи сығанаҡтар менән дәлилләп яҙа. Әйткәндәй, хәҙер Иран яғында йәшәүсе ҡурайҙа уйнаусы бәшкәрттәр шул замандан тороп ҡалған бауырҙаштарыбыҙ.

Янғындар сығыуының икенсе шарты: биологик сәбәп, йәғни тоҡанған уттың артабан янғынға әүерелеүе өсөн яныу материалының әҙер булыуы. Далала сыҡҡан янғынды һүндереүгә ҡарағанда, урман-таулы урындағыһын ауыҙлыҡлауы күпкә ауыр икәнлегенә үҙем дә инандым.

Б Кеше факторы. Һис һүҙһеҙ, кеше үҙенең ут йә ут тоҡандыра алырлыҡ техника менән һаҡһыҙ эш итеүе арҡаһында янғынға сәбәпсе. Тәбиғәткә ял итергә сыҡҡан кешенең быяла, пластик һауыттарҙы ташлап китеүе лә янғынға нигеҙ. Яуыз ниәт менән үрт һалыусылар ҙа осрап тора. Шул уҡ ваҡытта ут ялҡыны бар донъяны ялмап алған саҡта янғын сәбәбен тик кешенән генә күреү бигүк дөрөҫ тә түгелдер. Бөгөн ут АҠШ, Канада, Перу, Боливия, Бразилия, Төркиә, Греция, Тунис, Алжир, Көньяҡ Америка урмандарын йота. Индонезияла 1982 йылда Калимантан утрауы бер йыл буйы янып, 800 мең гектар урман, бер нисә төр хайуандар, йәнлектәр, үҫемлектәр юҡҡа сыҡҡан. 2009 йылда Австралияла булған янғында 181 кеше утта һәләк була, 750 бина юҡҡа сыға. 2019-2020 йылдарҙа был илдәге янғында 6,3 миллион гектар урман янып бөтөп, 25 кеше үлә. Үткән быуаттарға ҡараш ташлаһаҡ, иң ҙур юғалтыу килтергән урман янғынында АҠШ-тың Пештиго ҡалаһы тулыһынса янып бөтә, 2 мең самаһы кеше һәләк була. Рәсәйҙә 2019 йылдан алып урмандар яна.

Үҙенә комфортлы йәшәү шарттарын барлыҡҡа килтереү өсөн рухи үҫеш юлын инҡар итеп, технократик юлды һайлаған кешенең, ысынлап та, был афәттәрҙә сәбәпсе булыуын бер нисек тә инҡар итә алмайбыҙ. Атланттар тап шул сәбәпле юҡҡа сыҡҡан. Әммә Ер шарының бер урынында янғын сығыуын, икенсе ерҙе һыу баҫыуын кешегә бәйләп нисек аңлатырға һуң? Шул уҡ Якутиялағы янғындарҙы Германияла һәм Краснодар крайындағы һыу баҫыуҙары менән бәйләйҙәр, мәҫәлән. Урынлы һорау тыуа: нисек бәйле һуң ошо ике күренеш? Уларҙың техник асылы аңлашыла: боҙлоҡтар ирегәс, ҡайһылыр урынды һыу баҫа, һыуһыҙ ҡалған урында янғын сыға. Икенсе һорау: боҙлоҡтар ниңә ирей?

Кеше ниндәйҙер һорауға яуап таба алмаған осраҡта мифологик заттарҙы, әкиәт батырҙарын иҫенә төшөрә. Ғалим Закирйән Әминев "Урал батыр" эпосында барған ваҡиғаларҙы ғәләмдең, күк есемдәренең бер-береһенә бәйле мөнәсәбәтенә, хәрәкәтенә нигеҙләнгән сенсацияға тороорлоҡ хеҙмәтен яҙғандан һуң, һис икеләнеүһеҙ, шул уҡ теорияға бәйле рәүештә аңлата алабыҙ. Икенсе мәсьәлә: янғындарға һәм һыу баҫыуҙарына килтергән боҙлоҡтарҙың иреүен бер нисек тә туҡтата алмайбыҙ. Бының өсөн беҙгә күк есемдәрен ерҙән трос ярҙамында тракторҙар ярҙамында һөйрәп урындарына кире күсереп йөрөү һымаҡ мәғәнәһеҙ һәм көлкөлө алйотлоҡтар ҡылып йөрөргә тура килер ине. Янғындарҙа һәм һыу баҫыуҙарында кеше факторы был осраҡта нулгә тигеҙ.

В *Көсөң етһен, йәнем, үҙ иҫкеңде*
*Әрней-әрней утҡа һалырға. Һәр*
*иҫкергән тейеш ваҡытында Юғалырға, утта янырға,*

тип яҙған күренекле башҡорт шағиры Рафаэль Сафин. Янғындар сығыр алдынан ғына урмандарҙы баҫҡан ҡарышлауыҡтарға ҡаршы самолеттар менән химик утау үткәргәйнеләр. Утау үткән урманға инеп, ундағы үле тынлыҡты тыңлап, йөрәкһеп сыҡҡайным. Урманда һәр төрлө йән эйәһе, күбәләктәр, бөжәктәр, ҡуңыҙҙар, бал ҡорттары, иңкештәр, ҡоштар һәләк булған. Күп тә үтмәне, шул "үле урмандар"ға ут тоҡанды. Рафаэль Сафиндың шиғыры шул саҡ иҫкә төштө. Энергияһы булған һәр предметта, матдәлә ут йәшеренә лә, ут шул материяны энергияға әйләндерә, тиҙәр. Уттың шундай төрҙәре билдәле:

- Унын тәүгеһе иң юғарыһы йондоҙҙарҙа, вулкандарҙа, гейзерҙарҙа һаҡлана. Был ут бары тик ризыҡта мохтажлыҡ кисерә;

- Икенсе төр ут кешеләрҙең һәм хайуандарҙың тәнендә йәшәй ҙә, улар үлгәндән һуң ташлап китә. Уға ризыҡ һәм һыу талап ителә;

- Өсөнсөләре үҫемлектәрҙә тереклек итә, үҫемлектәр ҙә тап улар ярҙамында йәшәй. Был утҡа ризыҡ кәрәкмәй, һыу ҙа етә;

- Электр энергияһын асҡан Майкл Фарадей уттың болоттарҙа һәм йәшендәрҙә йәшәгәнен билдәләгән. Ул атмосфераны таҙарта, кислородты озонға әйләндерә. Йәшен шулай уҡ башҡа газдарҙы иретеп, уларҙы зарарһыҙландыра. Был утҡа ризыҡ та, һыу ҙа кәрәкмәй;

- Йәндең, интуицияның рухи уты. Был ут төрө изге кешеләрҙә, әүлиәләрҙә көслө булыусан.

Янғындар ҙа юҡҡа ғына сыҡмайҙыр. Ерҙән, йылғаларҙан, диңгеҙҙәрҙән, океандарҙан күтәрелгән һыу парҙары тамсыға әүерелһен өсөн һалҡын һауа ла етә, тигән дәлил дә иҫкерҙе. Бәлки, был дәлил аппараты менән сәмәй ҡыуған кеше өсөн генә үҙгәрмәйҙер, аҡмаһа ла тамып тора бит. Әммә, алда әйтелгәнсә, уттың "материяны энергияға әйләндереүе"нә бәйле сифаты янғындарҙың да юҡҡа ғына сыҡмауына ишара яһата. Климат шарттары үҙгәреү сәбәпле, ямғыр яуһын өсөн кәрәк булған микроэлементтарҙы, ферменттарҙы, молекулаларҙы тәбиғәт янғындар ярҙамында барлыҡҡа килтереп, үҙен-үҙе һаҡларға тырышмаймы икән? Ер шары барлыҡҡа килгәндә лә оло шартлауҙан һуң сыҡҡан оло янғын шуға ишара түгелме? Кәрәгең тирәгеңде йыҡтырып ҡына ҡалмай, уны яндыра ла. Үҫемлектәрҙәге утҡа һыу ҙа етә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

?

***Хәбәр ителеүенсә, ошо көндәрҙә Өфөлә IX "Йәш һөнәрмәндәр (WorldSkills Russia)" милли чемпионаты булып үтте. Унда ҡатнашыусы уҡыу йорттары етәкселәре үҙ тәрбиәләнеүселәренең ҡаҙаныштары һәм тәьҫораттары менән бүлешә.***

***Ришат САБИТОВ, Өфө сауҙа-иҡтисад колледжы директоры:*** Колледжыбыҙ бындай ҙур ярышта тәүге тапҡыр ҡатнашты. Быға тиклем республика һәм төбәк кимәлендәге һөнәри ярыштарҙа "Ресторан сервисы" компетенцияһы буйынса беренселекте алып килһәк, "Кондитер эше" йүнәлешенә башлап тотондоҡ һәм Рәсәй кимәленә тура үттек. Иңебеҙгә һалынған яуаплылыҡты тойоп, балаларҙы әҙерләүгә күп көс һалдыҡ. Улар хатта эксперттары менән бергә Мәскәүҙә 10 көнлөк курстар үтеп тә ҡайтты. Кондитер эше буйынса ҡатнашыусылар Елена Сучкова исемендәге шоколад мәктәбендә, ә ресторан сервисы нигеҙҙәрен төшөнөүселәр компетенциялар федераль үҙәгендә белем эстәне. Бында ла беҙ төрлө конкурстар үткәреп торабыҙ, әммә Мәскәүҙән беҙҙең ҡатнашыусылар бөтөнләй икенсе төрлө кеше булып ҡайттылар. Шунан июндән алып чемпионат уҙғарылғансы колледжда махсус йыһазландырылған бүлмәлә, ҡәһүәханала һәм "Премьер" ресторанында тәжрибә тупланылар.

Бына шундай етди әҙерлек булһа ла, ҡыҙғанысҡа күрә, призлы урынға күтәрелә алманыҡ. Бының сәбәбе лә аңлашыла: Мәскәүҙән килгән ҡатнашыусыларҙың кимәленә етеүе еңел түгел, улар күптән Европа конкурстарында ла ҡатнаша. Эксперттар менән аралаштыҡ һәм улар беҙҙең өҫтөнлөклө яҡтарҙы ла, етешһеҙлектәрҙе лә әйтеп, кәңәштәрен бирҙе. Беҙҙең быға тиклем бөтә заманса талаптарға яуап биргән оҫтахана ла юҡ ине, әле бына чемпионатҡа алынған йыһаздарҙы беҙгә лә ҡалдырһалар - эш бөтөнләй башҡаса барасаҡ. Коллегалар менән шулай уҡ киләсәктә үҫеш аласаҡ йүнәлештәр хаҡында ла кәңәшләштек, беҙҙә иҡтисадҡа ҡағылышлы бөтә йүнәлештәр буйынса ла эшләргә мөмкин, туристик эшмәкәрлеккә лә иғтибар итергә кәрәк. "Йәш һөнәрмәндәр" милли чемпионатының финалы Өфөлә уҙғарылыуы кимәлде самаларға, яңы маҡсаттар ҡуйырға, ең һыҙғанып эшләргә дәрт бирҙе. Уны уҡытыусылар ҙа, етәкселәр ҙә, балалар ҙа күрҙе һәм беҙ киләсәктә сәмсел йәштәрҙе ошо йүнәлешкә йәлеп итеүҙе маҡсат иттек.

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Башҡортостанда йәшәүселәргә Белем көнөндә республикала спиртлы эсемлектәр һатыуҙың тыйылыуын иҫкәрткәйне. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, "Башҡортостан Республикаһында этил спирты, алкоголле һәм спиртлы продукция етештереү, уларҙың әйләнеше өлкәһендәге эшмәкәрлекте көйләү һәм алкоголле продукцияны ҡулланыуҙы сикләү тураһында" законға индерелгән үҙгәрештәргә ярашлы, Һуңғы ҡыңғырау байрамында, Йәштәр көнөндә (27 июндә), Белем көнөндә (1 сентябрҙә) һәм һабантуйҙар уҙғарылған көндәрҙә, шулай уҡ яңы йыл каникулдарында алкоголь һатыу тыйыла.

✓Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякин Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Республиканың төрлө ойошма хеҙмәткәрҙәренең һөнәри ҡаҙаныштары ордендар, маҡтаулы исемдәр һәм почёт грамоталары менән баһаланды. Бүләкләнеүселәр араһында мәҙәниәт өлкәһе вәкилдәре күп ине. Рәсәй Президенты указы менән Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Иҙрис Ғәзиев һәм Рәсәйҙең халыҡ артисы Хөрмәтулла Үтәшев Дуҫлыҡ ордены менән бүләкләнде. Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова Халыҡтар дуҫлығы ордены кавалеры булды.

✓Башҡортостанда иген йыйыу тамамлана. Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, 1,36 миллион гектарҙа сабылған, 1,35 миллион гектарҙа һуғылған. Бөгөнгә 1,83 миллион тонна иген йыйылған. Уңыш буйынса Ҡырмыҫҡалы районы алда бара - гектарынан 24,9 центнер. Урып-йыйыу кампанияһы йомғаҡтары буйынса 2 миллион тоннанан ашыу ашлыҡ йыйыу планлаштырыла (2020 йылда рекордлы күләмдә - 4 миллион тонна йыйылған). Май бирә торған үҫемлектәрҙе йыйыуҙың ҡыҙыу мәле. 39 районда рапс, гәрсис, соя, көнбағыш һәм башҡа культуралар сәселгән баҫыуҙарында эш гөрләй. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, әлегә уңыш буйынса һандар түбән - гектарынан 8,5 центнер.

✓Токиолағы Паралимпия уйындары - 2020 триумфаторҙары Өфөгә ҡайтты. Башҡортостандан 20 йәшлек спортсы Андрей Николаев Токиола икенсе паралимпия миҙалын яуланы. Шулай уҡ Анна Крившина һәм Илнур Ғарипов, спорт мастеры Богдан Мозговой алтын миҙал яуланы. Елена Прокофьева өҫтәл теннисы дисциплинаһында алтын миҙалға лайыҡ булды, Никита Нагаев А категорияһында фехтование буйынса бронза миҙал менән бүләкләнде.

✓ *3-7 йәшлек балаларға айлыҡ түләүҙәр 2020 йылда Президент указы менән индерелде. Улар түбән килемле ғаиләләргә бирелә ине, хәҙер дәүләт башлығы бындай ярҙамды киңәйтергә ҡушты.*



ҠЫҪҠАСА

# ГАЗ ҮТКӘРЕҮ ЕҢЕЛЛӘШӘМЕ?

✓ **Ер участкаһына тиклем газ үткәргес һуҙыу (әлбиттә, газ үткән ауыл-ҡасабаларҙа) эштәре өсөн республика ҡаҙнаһы түләй.** Хеҙмәттең хаҡы юғары булғанлыҡтан, был күп ғаиләләрҙең хәленән килмәй ине. Офисҡа бер нисә белешмә тапшырырға кәрәк, тип хәбәр итте күп функциялы үҙәк етәкселеге. Ғариза, ИНН, СНИЛС, ер участкаһына милек (ҡуртымға алыу) хоҡуғы, йортҡа милек хоҡуғы, ситуация планы талап ителә. Әгәр ғаризаны заказсының вәкиле бирһә, ышаныс ҡағыҙы булырға тейеш. 2021 йылдың июль аҙағына республикала газ үткәреү кимәле 83,5% тәшкил итте. Газ үткән 2 471 тораҡ пунктта 186 мең йорт газһыҙ ҡала. Был эш ил Президенты ҡушыуы буйынса башҡарыла. Быға тиклем Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыларына һәм инвалидтарына, хәрби хәрәкәт инвалидтарына 100 мең һумлыҡ сертификаттар тапшырылды. Аҙ тәьмин ителгән инвалидтар, инвалид бала тәрбиәләгән ғаиләләр, ишле ғаиләләр иһә 60 мең һумлыҡ сертификатҡа эйә булды. Июль аҙағына ошондай 4 542 сертификат бирелде.

✓ **Рәсәй төбәктәренә өс йәштән ете йәшкә тиклемге балалары булған ғаиләләргә айлыҡ түләүҙәр өсөн 21,5 миллиард һум йүнәлтелә.** Башҡортостан программаға 1,66 миллиард һум алырға тейеш. Тейешле бойороҡҡа Рәсәй премьер-министры Михаил Мишустин ҡул ҡуйҙы. 3-7 йәшлек балаларға айлыҡ түләүҙәр 2020 йылда Президент указы менән индерелде. Улар түбән килемле ғаиләләргә бирелә ине, хәҙер дәүләт башлығы бындай ярҙамды киңәйтергә ҡушты. Хәҙер, ғаиләләге хәлгә ҡарамаҫтан, уларҙың күләме балаға төбәк йәшәү минимумынан 75 процентҡа ла, 100 процентҡа ла етеүе ихтимал.

✓ **Рәсәй вице-премьеры Татьяна Голикова хаҡлы ялдағыларға 10 мең һум күләмендәге бер тапҡыр бирелә торған түләү тәғәйенләү тәртибен аңлатты.** Уның һүҙҙәренсә, тәүге пособиелар 2 сентябрҙә түләнә башлай. Бөтәһе 43 миллионға яҡын пенсионер аҡса алырға тейеш. Түләүҙәр ҡартлыҡ буйынса пенсионерҙар менән бергә, ҡараусыһын юғалтыу һәм инвалидлыҡ буйынса пенсия алыусыларға ла ҡағыла. Тәүгеләрҙән булып, 2 сентябрҙә, 10 мең һум пенсияһын картаға алыусыларға күсерелә. Вице-премьер әйтеүенсә, ундайҙар 30,7 миллионға яҡын иҫәпләнә. Ҡалған 12,7 миллион пенсионерға пособие пенсия менән бер үк ваҡытта өйҙә, "Рәсәй почтаһы" аша бирелә. Әлеге пособие льготалар һәм субсидиялар билдәләгәндә ғаилә килемендә иҫәпкә алынмай.

✓ **Президент Владимир Путин хәрбиҙәргә һәм тәртип һаҡсыларына бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһында указға ҡул ҡуйҙы.** Сентябрҙә уларға 15-әр мең һум аҡса күсерелә. Указға ярашлы, 2021 йылдың 31 авгусына хәрби хеҙмәткәр тип һаналғандарға сентябрҙә аҡса түләнергә тейеш. Аҡса контракт буйынса хеҙмәт итеүселәргә; хәрби белем биреү ойошмалары курсанттарына; прокурорҙарға; Тәфтиш комитеты хеҙмәткәрҙәренә; эске эштәр органдары хеҙмәткәрҙәренә; енәйәт-яза башҡарыу системаһы органдары хеҙмәткәрҙәренә; янғынға ҡаршы федераль хеҙмәт хеҙмәткәрҙәренә; таможня органдары хеҙмәткәрҙәренә; Милли гвардия ғәскәрҙәрендә хеҙмәт итеүселәргә; Федераль фельдъегер хеҙмәтенең етәкселек итеүсе составына бирелә. Әгәр сентябрҙә аҡса түләнмәһә, уны һуңыраҡ күсереүҙәре мөмкин.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА...

**Белем көнөндә ҡайһы бер кластар өсөн тантаналы линейка асыҡ һауала үтте һәм ата-әсәләр ҙә битлек кейеп, унда ҡатнаша алды.**

Яңы талаптар буйынса, артабан һәр класс үҙенең кабинетында уҡый. Уҡыусылар ағымын бүлеү өсөн төрлө төҫтәге маркировка файҙаланыла. Кластарҙа һауа таҙартыусы ҡорамалдар ҡуйыласаҡ. Тәнәфес ваҡытында кабинеттар елләтелә. Мәктәптәрҙең санитария торошон 1 сентябрҙән медицина инспекторҙары, йәғни Башҡорт дәүләт медицина университеты һәм медицина колледждары ординаторҙары һәм студенттары контролдә тотасаҡ.

Коронавирусҡа ҡаршы прививканы республика педагогтарының 76 проценты яһатҡан. Уҡытыусылар һәм бөтә хеҙмәткәрҙәр битлек режимын һаҡларға тейеш. Әммә дәрес ваҡытында уҡыусылар менән ара 1,5 метрҙан кәм булмаһа, уны сисергә мөмкин. Һаулығы менән бәйле проблема булған педагогтар һәм балалар тәүге ике-өс аҙнала онлайн-режимда уҡый ала. Бының өсөн ата-әсәләргә директор исеменә ғариза яҙыу мөһим. Дистанцияла уҡыу мәктәпкә йөрөп уҡыу расписаниеһы менән бер төрлө. Кәрәк булһа, мәктәп уҡыусыларҙы һәм уҡытыусыларҙы тейешле гаджет менән тәьмин итә. Башҡортостан Мәғариф һәм фән министрлығы вирус йоҡҡан осраҡта өҙлөгөүгә килтереү ҡурҡынысы булған хроник сирле балаларҙы ваҡытлыса онлайн-режимда уҡытыу мөмкинлеген ҡараны. Дистанциянан уҡыу мөмкинлеген биргән ауырыуҙар исемлеге республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы менән бергә билдәләнде.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров муниципалитет башлыҡтарына мәктәп директорҙары, мәғариф идаралыҡтары вәкилдәре менән кәңәшмә үткәрергә, министрлыҡ ҡарарҙарын еткерергә һәм мәғариф системаһын яңы уҡыу йылына юғары кимәлдә әҙерлеген тәьмин итергә ҡушты.

## БАЛАЛАР ТУҠЛАНЫУЫ...

**БР Хөкүмәте башланғыс класта уҡығандарҙың һәм льготалы категорияға ҡараған балаларҙың туҡланыуын финанслауҙы арттырыу тураһында ҡарар ҡабул итте.**

Шуға бәйле, 1 сентябрҙән мәктәп туҡланыуын ойоштороуға республика бюджеты иҫәбенә финанслау күләмен арттырыу көтөлә. Был ғәмәл РФ Президенты ҡушыуы буйынса бойомға ашырыла. Унан Башҡортостан да ситтә ҡалманы, федераль субсидия алды. Шул иҫәптән республиканан да аҡса бүленәсәк.

31 августа санитария законына ярашлы, уҡыусыларҙың рационын тәртипкә килтереү маҡсатында туҡланыу хаҡын яңынан ҡарау тураһында ҡарар ҡабул ителгәйне. Мәктәп уҡыусыларының рационы аҙыҡ ҡиммәтен бүлеү йәһәтенән санитария законына тура килергә тейеш. Санитария нормаларына һәм ҡағиҙәләренә ярашлы, беренсе сменала уҡыған балалар иртәнге һәм төшкө аш, ә икенсе сменала уҡығандар төшкө аш һәм икенсе төшкө аш менән тәьмин ителә. Ата-әсәләр түләүе күләме шул көйө ҡала. Был йүнәлешкә өҫтәмә бүленгән республика бюджет саралары күләме быйыл 13 миллиондан ашыу һум тәшкил итә. Алдағы йылда 35 миллиондан ашыу һум бүленәсәк.

2021 йылда капиталь ремонт барышында 280 мәктәп үҙенең аҙыҡ-түлек блогын модернизацияланы. Әлеге ваҡытта бөтә белем биреү учреждениелары ла балаларҙы эҫе аш менән тәьмин итеүгә әҙер. Радий Хәбиров ҡушыуы буйынса, Контроль һәм социаль коммуникациялар буйынса идаралыҡтар мәктәп туҡланыуы темаһын айырым контролгә аласаҡ.

## СИФАТ БИЛДӘҺЕ

**Республика етештереүселәренең 20 меңләп тауары "Башҡортостан продукты" билдәһе менән сығарыла. "Башҡортостан продукты" проекты дипломанттары үҙ тауарҙарын Рәсәйҙең бөтөн төбәктәрендә лә һата. Был хаҡта республика Башлығы Радий Хәбиров үткәргән оператив кәңәшмәлә БР сауҙа һәм хеҙмәттәр күрһәтеү министры Алексей Гусев хәбәр итте.**

Республика етештереүселәре проектында ҡатнашыу - түләүһеҙ. 2021 йылдың август баштарына ул бөтәһе 560 ҡатнашыусыны берләштерә, шуларҙың 494-е - аҙыҡ-түлек һәм 66-һы дөйөм ҡулланыу тауарҙары етештерә."Башҡортостан продукты" билдәһе менән 19 248 төр продукция етештерелә. Йыл аҙағына проектта ҡатнашыусы эшҡыуарҙар һаны 600-гә барып етәсәк тип күҙаллана. "Федераль даирәләр менән эшләү, логистиканы грамоталы итеп ҡороу проектҡа республика тауарҙарын үҙебеҙҙең ваҡлап һатыусылар кәштәһенә генә түгел, республиканан ситкә сығарыуға ла мөмкинлек бирә,- тине Алексей Гусев.- 2021 йылға 106 етештереүсебеҙҙең продукцияһы федераль сауҙа селтәре супермаркеттарында һатыла. Бынан тыш, 16 дипломант үҙ продукцияһын экспортҡа сығара".

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала сауҙаны үҫтереү буйынса эш йомғаҡтарын ыңғай баһаланы. "Проект йылдам үҫешә, ауыл хужалығы продукцияһын эшкәртеү күләмен тиҙләтә, - тине Радий Хәбиров. - Республика хәҙер эшкәртеү буйынса Волга буйы федераль округында алтынсы урында килә, артабан үҫешергә, алғы урындарға сығыу өсөн тырышырға кәрәк. "Башҡортостан продукты" быға булышлыҡ итәсәк..."

## ШИФАХАНАЛА...

**Күптән түгел Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Яҡтыкүл" шифаханаһында булып, учреждение етәкселеге менән артабанғы үҫеш мөмкинлектәрен тикшергәйне.**

"Яҡтыкүл" шифаханаһы Мауыҙҙы күле буйында 1958 йылда уҡ асылған. Шифахананың төп дауалау ресурсы - ләм. Ул быуын һәм һөйәк-мускул аппараты һыҙлауын баҫа. Шифалы батҡаҡ ошонда уҡ сығарыла, был иһә "Яҡтыкүл"дең төп өҫтөнлөктәренең береһе булып тора. Шифахана директоры Олег Писарев һүҙҙәренсә, 2020 йылдың 1 июленән учреждение илебеҙҙең башҡа төбәктәрендә вахта ысулы менән эшләгән яҡташтарыбыҙ өсөн обсерватор итеп үҙгәртелде. 2020 йылдың 21 июленән, Роспотребнадзор тәҡдимдәренә ярашлы, шифахана шифахана-курорт хеҙмәттәрен күрһәтә башланы. Бынан тыш, шифаханала республика ярҙамы менән биләмәнең күпмелер өлөшө төҙөкләндерелде, был эште артабан да дауам итеү күҙаллана.

"Яҡтыкүл" шифаханаһы коронавирустың ҡатмарлы осорон уңышлы үткәреп ебәрҙе, халыҡты реабилитациялау дауам ителә. Ләкин Урал аръяғында һауыҡтырыу кластерын үҫтереү стратегияһын эшләргә йыйыныуыбыҙҙы оноторға ярамай. Был "Яҡтыкүл" генә түгел, "Ҡайындар" ял йорто ла, башҡа учреждениелар ҙа. Республиканың рекреацион ҡеүәтен тормошҡа ашырыу, Башҡортостан халҡы һәм ҡунаҡтарының ялы өсөн уңайлы шарттар булдырыу мөһим", - тип билдәләне Радий Хәбиров. "Яҡтыкүл" шифаханаһында газ концентрацияһын 15 тапҡыр арттырыу мөмкинлеге менән радон алыу өсөн республикала берҙән-бер лаборатория бар. Ындай үҙенсәлек радонды бик күп ауырыуҙарҙы дауалағанда ҡулланырға мөмкинлек бирә. Шифахана белгестәре радон ваннаһын ҡабул иткәндә тәндең өҫкө йөҙө альфа-өлөшсәләрҙән энергетик душ алыуы хаҡында һөйләне. Улар организмға ыңғай йоғонто яһай: мускул һәм һөйәк туҡымаһында уңалыуҙы тиҙләтә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡан баҫымын һәм әйләнешен көйләй.

## Б А Ш  Ҡ А Л А  Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө районы Зубов ауылында "Белем" мәғариф үҙәген асыу тантанаһы уҙҙы. Уҡыусыларҙы һәм уҡытыусыларҙы Белем көнө менән ҡотларға Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров килде. Мәғариф үҙәге 640 уҡыусыға иҫәпләнгән мәктәпте һәм 160 бала өсөн тәғәйенләнгән балалар баҡсаһын берләштергән.

✓Башҡортостанда 1 сентябрҙән уҡыусыларға электричкала йөрөү өсөн 50 процент ташлама бирелә. Льготанан 7 йәше тулған уҡыусылар һәм юғары уҡыу йорттары, урта махсус уҡыу йорттары, башланғыс һөнәри белем биреү училищеларының көндөҙгө бүлегендә белем алған студенттар файҙаланырға мөмкин. Силәбе өлкәһенән үткәндә ошондай уҡ ташлама бирелә, ә Ырымбур биләмәһендә дисконт 25 процент тәшкил итә, тип хәбәр иттеләр Башҡортостан Республикаһының Транспорт һәм юл хужалығы министрлығынан.

✓8 Март урамы буйлап - Әй урамынан Һ. Дәүләтшина бульварына тиклем, Галле ҡалаһы урамы буйлап - Октябрь проспектынан Комсомол урамына тиклемге техник юлбәйләнештәр асылды. Әммә бында эштәр дауам итә: подрядсылар техник һыҙаттарҙы, йәйәүлеләр зонаһын, газондарҙы, тышҡы яҡтыртыу ҡорамалдарын тәртипкә килтерә. Ә Комсомол урамы буйлап СССР-ҙың 50 йыллығынан Шәфиев урамына тиклемге ара ике аҙнанан һуң файҙаланыуға тапшырыласаҡ.

✓Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы, ике Грэмми премияһы эйәһе, Башҡортостандың халыҡ артисы, Рәсәйҙең популяр опера йырсыларының береһе Илдар Абдразаҡов "Итальян телендәге йырҙарҙы һоҡланғыс итеп башҡарыусы" номинацияһында премияға лайыҡ булды. "Ла Скала театрында тәүге тапҡыр сығыш яһауыма егерме йыл тулған йылда Италияла премия алыу - минең өсөн ҙур хөрмәт! VLLABERTELLI фонды президенты Эрминдо Туччиға донъяла "Итальян телендәге йырҙарҙы һоҡланғыс итеп башҡарыусы" номинацияһындағы премия өсөн рәхмәт", - тип яҙҙы ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓19 августа "Ҡунаҡһарай" биләмәһендә урынлашҡан "Обнимашки" зоопаркында ғәҙәттән тыш хәл булған: янут бер йәшлек балаға һәм уның ата-әсәһенә ташланған. Табиптарға баланың битендәге яраны тегергә тура килгән. Өлкәндәрҙең ҡулдары йәрәхәтләнгән. Әлегә зоопарк штат режимында эшләй. Әйткәндәй, 2020 йылдың июненән контакт зоопарктарында йыртҡыс хайуандарға яҡын барыу тыйылған. Янут та ошо исемлектә бар.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҠЫШ БАУЫРЫ ОҘОН ДА УЛ...



**Баш ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмә 18-се ҡала клиник дауаханаһының ковид госпиталендәге "ҡыҙыл зона"нан төшөрөлгән видеосюжетты ҡараужан башланды һәм теманы дауам итеп, Өфө ҡалаһының Хужалыҡ иҫәбендәге поликлиникаһы баш табибы Руслан Солтановтың "Торатау" конгресс-холындағы вакцинация пунктының билдәле ваҡыт арауығындағы эш һөҙөмтәһе тураһында сығышы тыңланды.**

Мәғлүм булыуынса, WorldSkills Russia финалы үтеү сәбәпле, пункт икенсе бинаға күсерелгәйне, хәҙер ул ҡабат үҙ урынына әйләнеп ҡайтасаҡ. Әле вакцинация пунктына БДУ яғынан инергә мөмкин, эш графигы элеккесә - иртәнге 8-ҙән кисе 8-гәсә. Эш ике сменала ойошторолған, уға 12 табип-шәфҡәт туташтары бригадаһы, 6 ирекмән, 20 теркәүсе йәлеп ителгән. Улар 600 вакцина эшләүгә иҫәпләнгән. Ихтыяж тыуғанда составы арттырырға ла мөмкин. Был пунктта ике компонентлы Гам-КОВИД-Вак (Спутник V) һәм бер компонентлы Спутник Лайт вакцинаһы ҡулланыла. Ай ярым осоронда 11110, шул иҫәптән 60 йәштән өлкән 1406 кеше вакцинацияланған. Эре предприятиелар хеҙмәткәрҙәрен төркөмләп прививкалау ойошторолған, уҡыу йылы башланғас, баш ҡаланың уҡыу йорттары уҡытыусылары һәм студенттарын вакцинациялауҙы ойоштороу буйынса эш алып барыла.

Әйткәндәй, Башҡортостан Башлығы ҡушыуы буйынса быйыл да белем биреү учреждениеларында "ковидҡа ҡаршы инспекторҙар" эшләйәсәк. Белем биреү процесы санитар-эпидемиологик талаптарға ярашлы алып барыласаҡ. Был хаҡта Өфө ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Гөлләриә Ялсыкаева бәйән итте. Хроник сирҙәре булған балалар, ата-әсәләрҙең ғаризаһы буйынса, дистанцион форматта уҡытылыуы мөмкин, йәғни кластарҙа барған дәрестәр трансляцияланасаҡ.

Ҡала тормошон тәьмин итеү буйынса идаралыҡ начальнигы Асҡар Батталов белдереүенсә, баш ҡалала йорттарға йылы биреүгә әҙерлек эштәре 15 сентябргә тамамлана. Әлеге ваҡытта үҙәк йылытыу системаһына тоташтырылған йорттарҙың 94 проценты, магистраль торбаларҙың - 90, кварталдар араһындағы торбаларҙың 75 проценты ла шундай һынау үткән.

Быйыл, муниципалитет талабы буйынса, йылылыҡ менән тәьмин итеү предприятиеларында йылылыҡ инспекторҙары хеҙмәте булдырылған. Улар торлаҡ йорттарҙы көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерләүҙә ҡатнаша, идара итеү ойошмаларына тәҡдимдәр һәм күрһәтмәләр бирә.

Теманы дауам итеп, рәйеслек итеүсе ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Марат Ғәйфуллин идара итеү компаниялары яғынан эшләп еткерелмәгән эштәр булыуын белдерҙе. Әле ваҡыт бар, тимәк, оҙон-оҙаҡҡа һуҙмай, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк. Юҡҡа ғына ҡыш бауыры оҙон, тимәйҙәр. Быйылғы йәй үҙенең холҡон күрһәткән кеүек, ҡыш та селләләре менән һынауы мөмкин. Шуға күрә йылытыу миҙгеленә етешһеҙлектәрҙе бөтөрөп һәм һәр төрлө ваҡиғалар булыу ихтималлығына әҙер булып инергә кәрәк.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИҪКӘРТӘБЕҘ!

## МАРШРУТТАР ЯБЫЛДЫ



Муниципалитет пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү өлкәһендә системалы эш алып бара. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһында 2019-2023 йылдарға муниципаль маршруттар буйынса пассажирҙарҙы даими ташыуҙы планлаштырған документ эшләнгән. Ул ғәмәлдәге транспорт хеҙмәтләндереүе моделен оптималләштереүҙе, шул иҫәптән кәрәкмәгән йәки башҡаларҙы ҡабатлаған маршруттарҙы алыуҙы күҙаллай. Был йәһәттән 29 августан баш ҡалала 201-се "Дағстан - Төньяҡ автовокзалы"; 239-сы "Төньяҡ автовокзалы - Тимер юл вокзалы - Нижегородка"; 25-се "Телеүҙәк - 2-се троллейбус депоһы"; 52-се С "Сипайлово" һауыҡтырыу комплексы - Рәми Ғарипов исемендәге 1-се республика Башҡорт гимназия-интернаты"; 260-сы "Белореченский" биҫтәһе - Ҡурсаҡ театры"; 269-сы "Белореченский" биҫтәһе - Асфальт-бетон заводы" маршруттары ябыла. Был маршруттар буйынса йөрөгән башҡа транспорт ғәмәлә ҡала.

## ЯЛҒАН ХӘБӘР БУЛДЫ БЫЛ



Социаль селтәрҙә билдәһеҙҙәр, сйәнәһе лә, Өфөлә техноген һәләкәт булған, һыу алыу ҡоролмаһына фенол аҡҡан, шуға һыуҙы эсергә ярамай тигән ялған хәбәрҙәр тарата. "Иҫкәртеү" ялған булып сыҡты, ҡала хакимиәтендә лә, "Өфө һыу каналы" предприятиеһында ла мәғлүмәтте кире ҡаҡтылар. "Ҡаланың эсәр һыуы өфөләр өсөн хәүефһеҙ", - тип белдерҙеләр предприятиела. Асыҡланыуынса, бер нисә йыл элек тә социаль селтәрҙә ошондай уҡ йөкмәткеле хәбәр таратылған. "Социаль селтәрҙә 1989 йылда баш ҡалабыҙҙа булған фенол һәләкәте тураһында хәтирә менән бәйле төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Һуңғы тапҡыр ялған хәбәрҙәр 2017 йылдың сентябрендә, ә уға тиклем - 2015 йылда ШОС һәм БРИКС саммиттары алдынан ебәрелгәйне. Ул саҡтағы кеүек, хәҙер ҙә бындай хәбәрҙәр дөрөҫлөккә тап килмәй. Ҡала халҡы һыуҙың сифаты хаҡында борсолмаҫҡа мөмкин", - тип белдерҙеләр баш ҡала хакимиәтендә.

Өфө хакимиәтендә ялған мәғлүмәт таратҡан өсөн ғәйепләләрҙе енәйәт яуаплылығына тарттырыу тураһында ғариза менән хоҡуҡ һаҡлау органдарына мөрәжәғәт итергә йыйыналар. Закон буйынса, ялған хәбәрҙе дөрөҫ тип таратҡан өсөн 500 мең һумға тиклем штраф янай.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ



# ПАРКТАР ҺӘМ СКВЕРҘАР...

## икенсе һулыш ала

**Баш ҡалала ял зоналарын булдырыуға һәм реконструкциялауға, яңыларын асыуға, төрлө объекттарҙы төҙөкләндереүгә ҙур иғтибар бирелә, федераль һәм республика программаларына ярашлы, парктар һәм скверҙар яңыртыла.**

Былтыр Өфөлә "Дубки" һәм Ҡала мәҙәниәт йорто алдындағы майҙандың дөйөм архитектура ансамбле яңыртылып, унда төп урынды "Бейеүсе торналар" төҫлө һәм музыкалы фонтан алып тора. Шул уҡ ваҡытта төбәк етәксеһе ҡушыуы буйынса "Беренсе Май" мәҙәниәт һәм ял паркында ла реконструкция эштәре башланды. Бында күл территорияһы төҙөкләндерелде, периметр буйынса терраса таҡтаһы һалынып юлдар эшләнде, фонтан реконструкцияланды, балалар майҙансығы киңәйтелде, уға хәүефһеҙ ҡатлам менән көпләнгән уйын һәм спорт зонаһы өҫтәлде. Парк былтыр октябрҙә тантаналы асылды.

2018 йылда Затондағы "Тулҡын" паркында ла эштәр башланғайны. Бөгөн ул тулыһынса үҙгәреш кисерҙе: йәйәүләләр һәм велосипедсылар өсөн юлдар яңыртылды, спорт майҙансығы, workout-зона, скейтпарк һ.б. барлыҡҡа килде. Әлеге ваҡытта күлде төҙөкләндереү һәм амфитеатр төҙөлөшөн үҙ эсенә алған тамамлау этабы бара.

"Көньяҡ" биҫтәһендә ташландыҡ баҡсалар һәм бушлыҡ урынында ла 2019 йылда парк төҙөлөшө эштәре башланғайны. Бында ял майҙансыҡтарынан тыш, бер нисә спорт һәм уйын зонаһы барлыҡҡа киләсәк, шулай уҡ воркаут өсөн тренажерҙар ҡуйыласаҡ. Периметр буйынса параллель рәүештә йүгереүселәр һәм йәйәүлеләр өсөн юлдар урынлашасаҡ. Скверҙың үҙәк элементы фонтан буласаҡ.

Октябрь районында иһә 130-сы мәктәп эргәһендә сквер төҙөлөшө дауам итә. Ул Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең "Йөрәгемдән ҡоштар осорам..." шиғыры мотивтары буйынса эшләнә. Дөйөм майҙаны 15 мең квадрат метр булған скверҙа памп-трек, хоккей ҡумтаһы, йүгереү юлдары менән футбол майҙаны, теннис һәм баскетбол майҙансыҡтары урынлашасаҡ.

Рихард Зорге урамы, 44 адресы буйынса урынлашҡан скверҙа ла тиҙҙән эштәр тамамланасаҡ. Урындағы халыҡ бындағы плитка һалынған юлдарҙы, Өфө символикаһы төшөрөлгән эскәмйәләрҙе, яҡтылыҡ сығанаҡтарын баһалап өлгөрҙө лә инде. Скверҙа төп урын уҡытыусыға арналған скульптура композицияһына биреләсәк.

"Кашҡаҙан" ял һәм мәҙәниәт паркы ла киң күләмле үҙгәреш кисерә. Ул Башҡортостандың баш ҡалаһы өсөн әһәмиәтле булып тора һәм төҙөкләндереү эштәре бер нисә этапта башҡарыла. Ял зонаһынан тыш, бында төрлө спорт ҡорамалдары, шулай уҡ мәҙәни-күңел асыу объекттары буласаҡ.

Баш ҡаланың башҡа сквер һәм парктары әлегә үҙенең сиратын көтә. Улар ҙа үҙгәрештәр кисерәсәк һәм бында мотлаҡ халыҡтың фекере иҫәпкә алынасаҡ, сөнки муниципалитеттың бар тырышлыҡы, тормошҡа ашырылған программалар тәү сиратта өфөләрҙең хәүефһеҙлеген, уларҙың уңайлы йәшәүен, эшләүен һәм ялын тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

# Х А Л Ы Ҡ   Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Туберкулез

**Сирҙән арыныу өсөн түбәндәге кәңәштәрҙе бер юлы үтәргә кәрәк. Төнәтмәләрҙе әҙерләп дауаланыу яҡшы һөҙөмтә бирә.**

❖ Был сирҙән төнәтмә әҙерләү өсөн 1-әр стакан баҫыу ҡырҡбыуыны, үгәй инә үләне, күгүлән алып ҡушырға һәм 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Бер сәғәт төнәтеп һөҙөргә. Көнөнә 3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

❖ Витаминлы сара сифатында кесерткән төнәтмәһе эсергә кәрәк. 2 ҡалаҡ ваҡланған кесерткәнгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15-20 минут төнәтеп һөҙөргә. Көн дауамында аҙлап ҡына эсеп бөтөргә. Шулай уҡ гөлйемеште термоста төнәтеп эсергә кәрәк.

❖ Дөйөм организмға яҡшы тәьсир иткән дауаны былай әҙерләйҙәр: 1-әр стакан таҙартылған әстерхан сәтләүеге, күрәгә, йөҙөмдә ит турағыс аша үткәреп, 1 стакан бал ҡушырға. Көнөнә ике тапҡыр 1-әр ҡалаҡ ашарға. Был ҡатышманы быяла һауытҡа һалып, һыуыҡтыста һаҡларға. Туберкулездан дауаланғанда балыҡ майы, һарымһаҡ һәм һуған ашау ҙа файҙалы. Әлбиттә, табип ҡушҡанды ла үтәү мотлаҡ.

### Йүтәл

❖ Кипкән татлы тамырҙы (солодка) ҡәһүә тарткыс ярҙамында онтаҡларға. 1 балғалаҡ онтаҡты ауыҙға һалып, тәме бөткәнсе имеп йөрөргә. Һуңынан төкөрөктө йоторға, ә тамыр онтағын төкөрөргә. Был рәүешле тулыһынса һауыҡҡансы көнөнә 2 тапҡыр дауаланырға. Татлы тамыр йөрәк тибешен йышайта, һаҡ булырға кәрәк.

❖ Май айында яңы ҡарағай тубырсыҡтары сыҡҡанда әҙерләргә кәрәкле тағы бер дауа. Йәш тубырсыҡтарҙы тураҡлап банкаға һалырға. Шәкәр өҫтәп, ҡояш төшкән урынға ҡуйырға. Тубырсыҡтарҙың һуты бүленеп сыҡҡас, быяла һауыттарға ҡойоп алырға һәм һыуыҡтыҫҡа ҡуйырға кәрәк. Йүтәлде дауалау өсөн көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә. Бының менән балаларҙы ла дауаларға була, ләкин балғалаҡлап ҡына эсерергә кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ СЕМӘРЕ



*Боронғо эйәрҙең алғы ҡашы. Баймаҡ районы, 1971 й. В.М. Шутова һүрәте*

1971 йылда Баймаҡ районында һаҡланып ҡалған боронғо эйәрҙең бер өлөшөн музейға тапшырҙылар. Һынландырылған заттың (ҡош? ат?) күкрәге ҡайыш егеү кәрәк-ярағы менән тартылған, ул тигеҙ ҡашағаның өҫтөнән бер аҙ сығыңҡырап торған.

Ишембай районының төньяҡ-көнсығышында һәм Белорет районының көньяҡ-көнбайышында башы ҡалҡып торған һәм өҫтән бер аҙ яҫыланған эйәрҙәр таралған. Ҡабарынҡы төрткө-төрткө биҙәк эйәр башының төбөнән башлана һәм ҡаштың ике айыры буйлап дауам итә. Белорет районының Ноҡат ауылынан булған эйәрҙә лә төрткө-төрткө биҙәк ҙурайтып һәм һирәкләп эшләнгән. Артҡы ҡашын тыш яҡтан ҡабарып сығып торған һыҙаттар өҫтөндә берберенә индереп яһалған мөйөштәр теҙмәһе биҙәй. Был биҙәкте "шыршы" тип атайҙар.



*Йылан баш эйәр. Ишембай районы, 1976 й. М.Г. Муллағолов фотоһы.*

Алғы ҡашты өҫтө семәрләнгән сығып торған арҡыры диск рәүешендә биҙәү ҙә осраған. Түңәрәк уртаһында сығынты йәки киреһенсә, йомро тишек урынлашҡан. Бындай эйәрҙе С.И. Руденко 1912 йылда Усманғәле ауылынан һатып алған. Эйәр ҡашы өскә күтәрелгәндә алғараҡ сыға һәм түңәрәк булып бөрөлөп китә. Түңәрәктең ҡабарынҡы үҙәге тирәләй соҡоп нурҙар эшләнгән. Ошондай уҡ семәр ағас өҙәңгегә лә төшөрөлгән.



*Ағас өҙәңгеле боронғо эйәр. Белорет районының Усманғәле ауылы. РЭМ фондынан. XX быуат башы.*

Бөрйән районының Ғәҙелгәрәй ауылынан алынған эйәрҙең дә башы сама менән шулай биҙәлгән. Ике эйәр ҡашының да өҫтө ваҡ ҡына йондоҙҙар менән сыбарланған. Урта тирәһе тулҡынланып киткән "пәрҙәләр" менән уратылған. Артҡы ҡаштың аҫҡы ағы уйылған "бағаналар" дуғаһы менән тамамлана.

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

*ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ*

# ХАЛҠЫМА АСЫҠ ХАТ



**Мин, Фәйзрахман Усманов, Баймаҡ районы Сыңғыҙ ауылында йәшәйем. 72 йәштәмен. Барса Башҡортостан халҡына интернет һәм гәзиттәр аша өндәшергә булдым.**

Йылдан-йыл тәбиғәтебеҙ бөлөүгә табан бара. Йылғалар кибә, урмандар һирәгәйә, йәнлектәр ҡырыла. Әммә халыҡ уйланмай. Тәбиғәттә барған алама үҙгәрештәр - ул беҙҙең тәрбиәһеҙлеккә Юғары көстең яуабы икәне тураһында ла ике ятып бер уйҙарына инмәй.

Бына, оло булһам да, нисә йыл инде йылға буйҙарын, урман ситтәрен таҙалау менән мәшғүлмен. Минә дан да, шөһрәт тә кәрәкмәй. Саф һауа, таҙа йылға, таҙа урман кәрәк! 2017 йылда "Атайсал" гәзитенә яҙып, редакция ярҙамы менән "Таҙа Һаҡмар" акцияһы ойоштороуға өлгәштек. Әбйәлилдән, йәғни Һаҡмар башынан Ырымбурғаса Һаҡмар йылғаһы таҙартылды. Тик, үкенескә күрә, яҡшы башланғыс булыуға ҡарамаҫтан, мин хыялланғанса килеп сыҡманы. Кемдер был эште намыҫ менән башҡарҙы, кәмәләргә ултырып, Һаҡмар буйлап ҡый йыйҙы, кемдер арлы-бирле ауыл тирәһен таҙаланы ла, отчет өсөн фото төштө лә ҡайтып китте. Ә бит акцияның маҡсаты таҙа Һаҡмарҙы бер ауыл биләмәһенән икенсе ауыл биләмәһенә эстафета итеп тапшырыу ине. Әммә күптәр эште еренә еткереп үтәмәнеләр, ауыл эргәһендә генә йөрөнөләр, ҡый-һайҙы өйөп ҡуйҙылар ҙа, отчет бирелгәс, ул өйөм онотолдо, туҙып япты. Кемде алдайбыҙ һуң беҙ? Ошо ерҙә үҙебеҙ йәшәйбеҙ бит һуң! Балаларыбыҙ йәшәр, ейәндәребеҙ тәүтәйәгенә килер. Уларға ҡыйлыҡ ҡалдырабыҙмы ни?

Нисәмә йылдар Урал аръяғында ҡоролоҡ хөкөм һөрә. Быйыл бәләкәй йылғалар ҡороно, балыҡтары үлде. Һаҡмар ҙа бер нисә көндән юҡҡа сығыр хәлдә, бик һай, төбө күренеп ята. Уҙған йылдарҙа, тәрән тип, уның төбөн таҙалай ҙа алмағанбыҙҙыр. Хәҙер инә уны кисеп йөрөп таҙаларға була! Әйҙәгеҙ, ошо хәлдән ҡотҡарайыҡ йылғабыҙҙы. Ҡайҙа ауыл советы рәйестәре, ҡайҙа депутаттар, ҡайҙа старосталар? Берегеҙгә лә бер нәмә лә кәрәкмәйме ни? Йөрәгегеҙ һыҙламаймы? Был мөрәжәғәтем, ҡабатлап әйтәм, барса республика халҡына. Зинһар, урман-ҡырҙарҙы, йылға-күлдәрҙе ҡыйламайыҡ, таҙалайыҡ, балаларға, йәштәргә өлгө күрһәтәйек!

Йәнә, йыл да "Йәшел Башҡортостан" акцияһына ҡушылып, ағастар ултыртҡан булабыҙ. Күпме үҫенте әрәм булды! Был ҡоролокта һыу ҡойоуҙы ойоштормағас, уны ултыртыуҙан ни фәтүә? Тирә-яҡта урман яна. Тимәк, йәшел ҡалҡаныбыҙ күпкә кәмене. Ағас ултыртыуҙы арттырыу зарур. Үҙебеҙҙең баҡсаға, картуфлыҡҡа булһа ла ағас ултыртайыҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзаһы Морат Лоҡманов хәбәр итеүенсә, Учалы районы Ураҙ ауылы халҡы ошо көндәрҙә күмәкләп тотоноп, йәнә Яйыҡ йылғаһын сүпсәрҙән, ләмдән таҙартҡан.** "Был эште ауылдың хөрмәтле кешеһе Миңзәлә Нурмөхәмәт ҡыҙы Шөғәйепова ойоштороп ебәрҙе. Халыҡ шунда уҡ күтәреп алды. Беҙ, алыҫта йәшәүсе ауылдаштар, аҡсалата ярҙам менән ҡушылдыҡ. Эш бөткәс, балаларға, килгән кешегә байрам өҫтәле ҡоролһон, тинек. Элек Яйыҡта ат йөҙҙөрә инек, әле ҡаҙ йөҙҙөрөрлөк тә ҡалмаған, тотош ләм баҫҡан. Әле бер аҙ таҙарғас, һыуҙың сылтырап ағыуы ишетелә башланы, тиҙәр. Беҙ глобаль афәттәр тураһында һөйләргә яратабыҙ. Яйыҡ аръяғында алтын сығарыусыларҙың ер йыртыуҙарына зарланабыҙ. Әйе, был оло бәлә. Әммә үҙебеҙҙең ҡулыбыҙҙан килгәндә эшләмәһәк, шишмәләребеҙҙе тәрбиәләмәһәк, яһһип ҡысҡырышыуҙарыбыҙҙы Аллаһ яуапһыҙ ҡалдырыр. Минә ҡарай бер аҙым яһағыҙ, Мин һеҙгә йүгереп килермен, ти Ғаләмдәр Яралтыусыһы. Яҡшы үҙгәрештәрҙе үҙебеҙҙән башларға тейешбеҙ. Шишмәләребеҙҙе ҡәҙерләһәк, улар терәкһыуға әйләнер, тирә-яҡты терелтер, яңғындар ҙа баҫылыр, мәктәптәр ҙә асылыр. Бөтә нәмә шулай үҙ-ара бәйләнгән бит инде ул", - ти Морат Лоҡманов. Уның хәбәр итеүенсә, бер нисә йыл элек Учалы районы Ҡотой ауылында ҡойо төҙекләндерелгән. Күптән түгел Яңы Байрамғол ауылында ла төҙекләндерелгән Фәйез шишмәһен асыу байрамы үткән. Бындай өмәләр республиканың башҡа төбәктәрендә лә үтә. Мәҫәлән, Баймаҡ районы Ҡуянтау ауылында Әселе йылғаһын таҙалау буйынса өмә ойошторолған. Бик күп ҡый сығарылды, тип хәбәр итәләр Баймаҡтан. Был өмәне ҡуянтауҙар тағы дауам итергә ниәтләй.

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# СОҠОР ЯМАП...



**Бөйөк урыҫ яҙыусыһы Николай Гоголь бынан ике быуаттан ашыу элек үк үлемһеҙ фекер әйтеп ҡалдырған: "Рәсәйҙә ике бәлә бар - ахмаҡтар һәм юлдар".**

Беренсеһенән ҡотолоу юлдарын хатта замана медицинаһы ла әлегә тиклем уйлап тапмаған. Шуға күрә ул турала беҙ ҙә һүҙ ҡуйыртып тормайыҡ. Ә бына икенсеһенә килгәндә, көн һайын соҡор-саҡырҙан саң йота-йота йөрөгәндә ошо әҙиптең әйткәне гел генә иҫкә төшә.

Рәсәйҙәге юл проблемаһын сит илдәрҙә лә һәйбәт беләләр, күрәһең, хатта был хаҡта көләмәс тә уйлап сығарғандар бит. Мәҫәлән, япондар "урыҫтар юл төҙәмәҫ өсөн УАЗик машинаһын уйлап тапҡан", ти икән.

Хәҡиҡәт шул: беҙҙә яңы төҙәлгән юлдар ҡыш сығып бөтмәй емерелә башлай. Бына шунда башлана ла инде тик беҙҙең илдә генә була торған "соҡор ремонты" тигән эштәр. Әлбиттә, ул юлсыларҙы эшһеҙ ҡалдырмау мөмкинлеге бирә. Ошо алым менән күпме юл ремонтланғанын аныҡ ҡына бер кем дә иҫәпләй ҙә алмай. Ә сифат ике аяғына ла аҡһай. Бына шулай сифатҡа иғтибар итмәй, күләм артынан ҡыуып эшләнеләр элек тә, әле лә.

Совет осоронда Литва ССР-ында булырға тура килде. Юлдарҙың тигеҙлегенә, уларҙың ситенә сәселгән үләндең матурлығына һоҡланып ҡайттым ул тарафтан. Бер илдә йәшәһәк тә, Рәсәйҙә ул осорҙа ла юлдар әлеге кеүек соҡор ҙа саҡыр ине. Сифат үҙ бурысына ҡараштан тора ул инде.

Проблема ҡайҙан килеп сыға һуң? Норма буйынса асфальт составында бер аҙ ҡом, балсыҡ булырға тейеш. Таштың да фракцияһы 10-12 мм. Ә беҙҙә уны Ағиҙелдән нисек ҡаҙып алалар, шул көйө битум менән бутайҙар ҙа, юлға һалалар. Яҙ етеү менән ошо күп миҡдарҙағы балсыктан, ҡомдан торған "асфальт"тың араһына ҡар һыуы инеп тула, төндә боҙ туңа... һәм соҡор ремонтына урын әҙер була. Битум да ҡышҡы һәм йәйге була. Һәр береһе дүртешәр төркөмдән тора. Бына ошоларҙы иҫәпкә алып һалынған асфальт бер ҡышҡа ғына түгел, ә 25 йылға етеүе көн кеүек асыҡ. Әммә...

**Сәйфулла ӘМИРОВ.**
**Мәләүез ҡалаһы.**

✓ *Онғот этнонимы менән аталып йөрөтөлгән ырыуҙар, монголдарҙан башҡа, ҡаҙаҡтарҙа ла була. Ә башҡорттар составына инеп киткән онғоттар, төрки теле ҡанундарына ярашлы, унлар (уннар) тип үҙгәртелә.*



*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

# ЫРЫУЫБЫҘ УНЛАР - БАБАЛАРЫБЫҘ ҺУНДАР



V быуатта Ете һыу ара-уығындағы Азия һундары дәүләтен (уны Ҡытай хроникаларында "көсһеҙҙәр", тип нарыҡлайҙар, ул Ҡытайҙа Юэбань, тип атала) теле ҡәүеме яулап ала. Ә VII быуатта улар Төрки ҡағанаты составына инә. VII быуатта Ҡытай йылъяҙмаларында һундарҙың чуюе, чуми, чумугунь һәм чубань ҡәбиләләре булыуы теркәлә. Улар тарихсыларға Чуй үҙәне халыҡтары булараҡ билдәле. Ошо исем менән билдәле булған этник төркөмдәр ҡаҙаҡтарҙың найман берләшмәһендә һәм ҡарағалпаҡтарҙың чуит ырыуы исемендә сағыла. Башҡорттарҙың мең ырыуының бер төркөмө ҫыбы-мен, тип атала, был этноним шул уҡ чуби атамаһына тап килә. Күрәһең, Халыҡтарҙың бөйөк күсеше дәүеренән башланған һун миграцияһы һөҙөмтәһендә Чуй йылғаһы бассейнында көн иткән һундарҙың бер өлөшө Башҡорт иленә килеп етеп, урындағы башҡорт ырыуҙарына ҡушылып киткән. Кама (Чулман) йылғаһының бер ҡушылдығын ғәйнә башҡорттары Чу-сув тип атай, ул әлеге ваҡытта Чусовая гидронимы аша билдәле. Әйткәндәй, Юэбань һундарының Чуяб исемле ҡалаһы була, ул заманында Көнбайыш Төрки ҡағанатының баш ҡалаһы булып китә: бында "Чу" - гидроним, "яб" - фарсы теленән "һыу" тигәнде аңлата. Юэбань дәүләте исемен һундарҙың Чубан атамаһының ҡытайса варианты булараҡ аңлатып була.

II Көнсығыш Ҡағанатының юлбашсыһы Ильтериш ҡағанға һәм ҡаған улы Күл-тегин хөрмәтенә арналған ташъяҙмаларҙа "6 чуб халҡы" ла телгә алына. Ошо ҡәбиләләрҙең береһен ҡытайҙар "шато", тип атай. Хроникаларҙың береһендә шато хаҡында былай әйтелә: "Шато есть особливое поколение западных тукюесцев (т. е. тюрков. - **авт.**) из рода чуюе... Жили, перемешавшись с чуюе и чуми". Шато - ҡәүем исеме түгел, ҡытайҙар был топоним менән Тянь Шань һәм Алтай тауҙары араһындағы ҡомло даланы атай. Шато тип аталған ҡәүем кешеләре үҙҙәрен унн тип таныта. Тимәк, был этник берләшмә халҡы үҙҙәренең ҡеүәтле һун нәҫеленән булыуын онотмай, ошо атаманы күп быуаттар буйына һаҡлап килә.

XIII быуатта ҡытайҙар "шато" тип атаған халыҡ вариҫтарынан булған онғоттар монгол тарихында мөһим урын биләй. Онғоттар менән сәйәси союзға инеп, ҡытайҙарҙың Цзинь дәүләтенә ҡаршы походҡа йыйынған Сыңғыҙ хан 1211 йылдың май айында үҙенең ҡыҙын онғот кенәзе Алахус-дигит Хуриның кесе улына кейәүгә бирә. Ҡытайҙарҙың "Юань ши" хроникаһында онғот кенәзенең "шатоларҙың яньмэнь тоҡомонан булыуы", "Алахус-дигит Хуриның кесе улы Боёханың Алахай-беги исемле принцессаға өйләнеүе" хаҡында мәғлүмәт теркәлгән. Ошо ваҡиға фарсы тарихсыһы Рәшид ад-дин яҙмаларында икенсе төрлөрәк күрһәтелә. Онғот хакимы Алакуш-тегин Цзинь императорының вассалы була, уның яугирҙары Бөйөк Ҡытай стенаһының ҡапҡаларын һаҡлай. Әммә онғот юлбашсыһы Сыңғыҙ хан яғына сығыуҙы хуп күреп, уның Цзинь империяһына ҡаршы походҡа сыҡҡан ғәскәрен Ҡытай стенаһы аша уҙғарып ебәрә. Онғот хакимының ошо хеҙмәте өсөн рәхмәтле булған Сыңғыҙ хан үҙенең ҡыҙы Алахай-бегины Алакуш-тегингә кейәүгә бирергә теләй, әммә уныһы хан ҡыҙын Шенгуй исемле энеһенә димләй. Һуңынан уларҙың Ангудай исемле улы монгол Тулуй хан ҡыҙына өйләнә. Арғын хандың әсәһе Ҡаймыш хатун да онғот ҡәбиләһенән була.

Әле килтерелгән мәғлүмәт нигеҙендә Рәшид ад-дин ошондай һығымта яһай: "Был тарихтан Сыңғыҙ хан тоҡомдарының ҡыҙҙарын онғот ҡәбиләһенә биреүе һәм уларҙан алыуы күренә". Бында Алакуш-тегиндың, Тамерлан кеүек үк, гурген тигән хөрмәтле титул йөрөтөүен дә иҫәпкә алырға кәрәк: был титул тик Сыңғыҙ хан тоҡомдары кейәүҙәренә бирелә.

Әле бәйән ителгәндәрҙән монголдарҙа онғот этнонимы менән аталып йөрөтөлә башлаған, ҡытайҙарҙа шато исеме менән билдәле булған ҡәүемдең Урта Азия һундарынан булып, үҙҙәрен унн халҡы тип иҫәпләүе асыҡ күренә. Монгол яуҙары осоронда онғот яугирҙарынан 5 меңлек ғәскәри корпус төҙөлә, улар менән 5 онғот сардары етәкселек итә. Монгол яуҙары осоронда улар көнбайышҡа табан хәрәкәт итеп, Алтын Урҙа дәүләте осоронда яулап алынған ерҙәрҙә таралып йәшәй башлай. Онғот этнонимы менән аталып йөрөтөлгән ырыуҙар, монголдарҙан башҡа, ҡаҙаҡтарҙа ла була. Ә башҡорттар составына инеп киткән онғоттар, төрки теле ҡанундарына ярашлы, унлар (уннар) тип үҙгәртелә биргән исем аҫтында билдәлелек таба. Бында беҙ ике этнонимдың - унлар һәм онғот (унгут) атамалары тамырының бер үк булыуын күрәбеҙ: ун (он) тамырына монголса күплек суффиксы -ут ялғанһа, төрки телдәрендә күплекте белдергән -лар ялғауы ҡушыла. Шулай итеп, унгут-онғоттар һәм унлар этнонимдары бер үк ҡәүемдең монголса һәм төркисә атамалары икәненә ышанырға була. Был осраҡта байлар ырыуы атамаһының монголса "байат" йәиһә "байаут", ә мырҙаларҙың "тайджиут" рәүешендә әйтелеүен дә дәлил итеп ҡарарға була.

Рус тарихсыһы Н.А. Аристов боронғо онғот халҡының Монгол илендә тороп ҡалған өлөшө хаҡында шулай яҙа: "...ныне составляют, совершенно омонголившись, аймак ониют в Монголии". Ҡытай Халыҡ Республикаһының Эске Монголия автоном районында әле лә Оннюд-Ци (Оннюдтар байрағы) хошунында (өйәҙендә) боронғо онғот вариҫтары йәшәй.

Башҡорт унларына килгәндә, улар Тарихи Башҡортостан территорияһына XIII быуатта, бер өҙлөкһөҙ тиерлек барған монгол яуҙарынан һуң хәрби хеҙмәттәре өсөн аҫабалыҡ хоҡуғы алып, үҙҙәренә тәғәйен ерҙәргә килеп урынлаша. Бында башҡа башҡорт ырыуҙарының да, Сыңғыҙ хан дәүләтенең союздашы булараҡ, монгол походтарында ҡатнашып, үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуғын билдәле бер килешеүҙәр нигеҙендә нығыта алыуын иҫәпкә алыу фарыҙ.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ** **әҙерләне.**

**(Дауамы. Башы 35-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 76*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Сталинградтан - Ворошиловградҡа!

Ғөмүмән, ошо иҫ китмәле боевой операция, тейешле кимәлдә әҙерлек булмауына ҡарамаҫтан, армия командованиеһы тарафынан ашығыс рәүештә ғәмәлгә ашырыла. Быны, әлбиттә, һуғыш шарттарында бер туҡтауһыҙ үҙгәреп торған ситуацияға бәйле булған сәбәптәр менән дә аңлатырға була. Ҡыҙыл Армияның Юғары баш командование ставкаһы приказдарын һис шикһеҙ үтәү талап ителә. Юғарынан тороп план ҡорған хәрби чиновниктар йыш ҡына айырым корпустар кимәлендә генә түгел, ә бәлки армия һәм фронттарҙағы реаль ситуацияны тейешле кимәлдә белмәй эш итә, ә был йыш ҡына бик ҙур хәрби операцияларҙың уңышһыҙлыҡҡа осрауына килтерә. Был 8-се кавкорпустың Донбастағы иҫ китмәле рейды барышында ла асыҡ сағылыш таба. 112-се Башҡорт атлы дивизияһының рейд барышында һәм унан сыҡҡан саҡта ауыр юғалтыуҙарға дусар булыуы, башлыса, 3-сө гвардия армияһы командованиеһының беҙҙең дошман тылын ҡыйратып йөрөгән атлыларҙы күрәләтә ярҙамһыҙ ҡалдырыуы менән бермә-бер бәйле икәнлеге хәҙерге заманда үтә лә асыҡ күренә. Күрәһең, хәрби командование тарафынан Ворошиловградты азат итеү маҡсатында бер дивизияны ғына түгел, тотош корпусты ҡорбан итеү ҡәҙимгә бер һуғыш эпизоды ғына булып тойолғандыр. Ә башҡорт яугирҙары Ватан өсөн йән аямай һуғыша ғына бирә - был халҡыбыҙҙың яугирлыҡ асылын, ул ниндәй генә трагик эҙемтәләргә килтермәһен, бик асыҡ күрһәтә. Ҡаһарманлыҡ, батырлыҡ йөҙәрләгән, хатта меңәрләгән һалдат үлемдәре менән ҡуша килә. Ни ҡылаһың - башҡорт ҡаны Ватан хаҡына сарыф ителә, ябай башҡорт атлыһы ҡылыс-ҡоралы менән дә, үҙ үлеме менән дә дошманды еңеү хаҡына һуғыш механизмын хәрәкәткә килтерә: ирҙәр үлә, башын һала, бөтмәҫ дандары ҡала...

12 февралдә иртә менән 8-се кавкорпус частары алдан билдәләнгән рубеждан һөжүмгә күсә, кискә табан улар, дошмандың оборонаһын емереп, уның алғы һыҙығында киң булмаған өҙөклөк - немецтарҙың тылына үтеп инерлек "ҡапҡа" барлыҡҡа килтерә. Ошо өҙөклөк аша яугирҙар тиҙ арала дошман тылына үтеп китә. Әммә барыһы ла уңышлы килеп сыҡмай: алғы һыҙыҡтағы беҙҙең башҡа частар ошо "ҡапҡаны" яптырмай тотоп торор өсөн бер ни ҙә эшләмәй. Һөҙөмтәлә корпустың һуғыш кәрәк-ярактары, аҙыҡ-түлек, фураж тейәгән тыл подразделениелары дошмандың алғы һыҙығы аша үтеп өлгөрмәй ҡала, немецтар ошо арауыҡҡа яңы көстәрен килтереп, өҙөклөктө яба. Берәүҙәрҙең батырлығы, ә икенселәрҙең булдыҡһыҙлығы (бында иң элгәре командирҙарҙың яуаплылығы, башҡа частарға булышлыҡ итергә әҙер булыуы күҙ уңында тотола) ҡапма-ҡаршы килеп, һуғыш трагедияһын тағы ла әсенеүлерәк, тағы ла үкенеслерәк итә.

**Вәли ИҘРИСОВ** **әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

✓ *Һуңғы йылдарҙағы шөғөлөм - ул башҡорт милли операһы. Шундай уникаль материалды нисек бер кем дә тикшермәгәндер. Халыҡтың йыр-моң традициялары сағылышын төрлө йүнәлештә анализлау мөмкинлеге иң элек operala асыла.*



# УЛ МУЗЫКА Яҙғандары башҡорт

**Күренекле музыка белгесе, Заһир Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты доценты, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, БР һәм РФ-ның Композиторҙар берекмәһе ағзаһы Гөлназ Салауат ҡыҙы ГАЛИНА - башҡорт милли музыка сәнғәте тураһында тәүге монографиялар һәм уҡыу әсбаптары яҙған берҙән-бер махсус белемле музыка белгесе. Ул - билдәле фольклорсы, профессор, филология фәндәре докторы Салауат Галиндың һөйөклө ҡыҙы, бөгөн атаһының эшен дауам итеүсе һәм алға әйҙәүсе варисы. Эшләгән эштәре менән халыҡ ихтирамын яулаған был гүзәл ҡатын быйыл сираттағы матур юбилейын билдәләне. Осрашып бер һөйләшеүгә сәбәп булды был…**

- Мин үҙемде бик бәхетле һәм даланлы кешемендер, тим, - тип башлап китте Гөлназ Салауат ҡыҙы. - Әле мәктәп йылдарында уҡ уйлаған хыялдарым тормошҡа ашты, ҡорған пландарым үтәлде, хатта уйламағандары ла алдыма килде. Яҙмышҡа мин ныҡ ышанам. Ә музыка белгесе булыу - Аллаһ Тәғәлә миңә бойорған эштер ул, тип уйлайым. Тормошомдоң факттарын теҙеп сыҡһаң, ғаиләмдән алып бөтәһе лә мине музыкаға этәрҙе кеүек. Музыка мәктәбенә яҙҙыртыуҙы мин үҙем һораным. 4-се класта атайым үҙенең "Заман һәм фольклор" китабының гонорарына фортепиано һатып алып бирҙе, фонотека туплай башланы. Шунан бирле мин инструмент алдында сәғәттәр буйы ултырып, ноталарҙа соҡоноп, музыкаль әҫәрҙәр өйрәндем. Һөҙөмтәлә мине Стәрлетамаҡтан Өфө сәнғәт институты эргәһендәге махсус музыка мәктәбенә ебәрҙеләр. Ә унда инде музыка уҡытыусыларым бер тауыштан: "Галина, теория бүлегенә күсегеҙ, һеҙ һәйбәт яҙаһығыҙ, һәйбәт һөйләйһегеҙ, һеҙҙән бик шәп музыковед сығасаҡ", - тип өгөтләне.

**Шулай итеп, Гөлназ Салауат ҡыҙы, һеҙҙең музыкаға бәйле яҙмышығыҙҙы оло юлға бороусылар - атайығыҙ менән әсәйегеҙ, унан һуң музыка уҡытыусыларығыҙ булған…**

- Донъяла рус һәм Европа музыкаһынан тыш, башҡорт музыкаһы ла булғанын миңә атайым менән әсәйем аңлатты. Иҫемдә, 8-се класта уҡығанда ғаиләбеҙ менән Ф.Ғәскәровтың бейеү ансамбле концертына барҙыҡ. Был концерт бала саҡтағы иң ҙур тәьҫораттарҙың береһе булды, ул мине ғүмерлеккә башҡорт сәнғәтенә йәлеп итте. Әммә һүҙем башҡа нәмә тураһында. Шул концертта Әнүәр Ишбирҙин ҡурайҙа "Ғилмияза" көйөн уйнағайны. Ул көйҙө мин аңламаным... Шул тиклем ят бер көй булып тойолдо ул шул заманда. Табындарҙа Хөсәйен олатай Әхмәтовтың йырлауҙары ла ят ине (улар атайым менән ярышып йырлаша торғайны). Күп йылдар үткәс, сәнғәт институтында миңә "Башҡорт музыкаһы фольклоры" дәресен уҡытырға биргәстәр, мин был музыкаль материалды үҙләштерергә булдым, өйҙәге пластинкаларҙы тыңларға тотондом (ярай әле, улар булған!), уларҙың айышына төшөнөр өсөн үҙемде был йырҙарҙы сығарған кешеләр урынына ҡуйҙым... Ныҡыша торғас, шулай итеп мин милли гендарымды уяттым, үҫтерҙем.

**Уҡытыусыларығыҙҙан кемдәргә рәхмәт уҡыйһығыҙ, кемдәрҙе яратып иҫләйһегеҙ?**

- Махсус музыка мәктәбенең фортепиано класы уҡытыусыһы Алла Фёдоровна Зуева менән институтта теоретик дисциплиналарҙы уҡытҡан профессор, сәнғәт фәндәре докторы Людмила Николаевна Шәймөхәмәтоваға ғүмер буйы рәхмәтлемен. Улар миңә донъя музыка сәнғәте ҡанундарын өйрәтте. Икеһе лә минең өсөн өлкән дуҫ, тормош һабаҡтары биреүсе, оло сәнғәткә юл күрһәткән остаздар. Был урында тағы ла бер исемде телгә алырға кәрәк. Ул минең аспирантуралағы ғилми етәксем, Гнесиндар исемендәге Музыкаль-педагогия институты профессоры (хәҙер Рәсәй музыка академияһы), совет музыка белеме әһеле Иосиф Яковлевич Рыжкин. Ул заманында Прокофьев, Шостаковичтың һәм башҡа бөйөк ижадсыларҙың дуҫы булған. Уның менән һөйләшеп ултырыу ғына ла фекер йөрөтөү даирәнде икенсе кимәлгә күтәрә ине, уның һәр дәресенән һуң мин икенсе кешегә әйләнеп ҡайта торғайным.

Үҙемдең һайлаған профессиям, буласаҡ эшем тураһында мин әле мәктәптә үк бик күп һәм бик етди уйландым. Беренсенән, "Музыка белгесе ниндәй булырға тейеш? Нимә белергә тейеш?" тигән һорауҙарҙы алға һөрҙөм. Быға яуаптарҙы теҙеп, хатта ҡағыҙға яҙып сыҡтым да, эште туған телемде һәм оло музыканы өйрәнеүҙән башларға булдым. Барыһын да бик яҡшы өйрәнергә һәм аңға, күңелгә һеңдерергә тигән маҡсатты һалдым инемә. Өфөләге бөтә булған театр, концерт залдары минең өсөн иң яратҡан урынға әйләнде. Мин ҡарамаған бер генә концерт, бер генә спектакль дә ҡалмағандыр. Мәскәүгә аспирантураға барғас та ошо уҡ ниәт-маҡсат булды алдымда: иң атаҡлы музыканттарҙы һәм йырсыларҙы үҙ ҡолағым менән ишетеү, үҙ күҙем менән күреү. Бының өсөн ваҡытымды ла, аҡсамды ла йәлләмәнем. Мәскәү консерваторияһы сәхнәһендә генә түгел, Ҙур залында ла кемдәрҙе генә күрмәнем! Ундай саҡта Майя Плисецкая йәки Мөслим Магомаев менән һаулыҡ һорашыу ҙа рухи үҫештең бер баҫҡысына әйләнә ине. Улар - минең тормош һабаҡтарым, университеттарым.

**Гөлназ Салауат ҡыҙының музыка донъяһына ингән тәүге аҙымдары хаҡында төпсөрләп белге килә. Был донъяның ҡапҡалары кемгәлер ғүмерлеккә асыла, кемдер бик тиҙ кире борола…**

- Мин бит үҙемде телевидение өсөн әҙерләнем. Элек Үҙәк каналда "Музыкаль киоск" тигән тапшырыу була торғайны. Шуны алып барған Элеонора Беляева кеүек булырға, телетапшырыуҙар ойошторорға теләнем. Шуға ла башҡортса ныҡлап өйрәндем, музыкаль әҫәрҙәрҙе ятлап бөттөм. Ә Заһир Ғариф улы Исмәғилев мине институтта ҡалдырҙы ла ҡуйҙы. Уҡытырға тура килде. Ләкин педагогикала мин осраҡлы кеше түгел, мин - үҙ урынымда.

Бер ҡасан да мин бер ниндәй Европаға йә Америкаға китергә хыялланманым, 8-се кластан алып башҡорт музыка сәнғәтен үҫтерергә, тигән уй менән йәшәнем. 1-се курста әхирәтем Миләүшә Иҙрисова (ул саҡта Ғабдрахманова) менән бер-беребеҙгә шундай ант та биргәйнек. Һәм ғүмер буйы музыкаль тормош уртаһында ҡайнаныҡ, республикабыҙҙа уҙған бөтә эрелеваҡлы сараларҙа ҡатнаштыҡ, бер-беребеҙгә ярҙам итештек, кәңәш бирештек.

Мин, мәҫәлән, баштан уҡ башҡорт музыкаһы тураһында китаптар яҙыуға өҫтөнлөк бирҙем. Ул уй ҡайҙан килгәндер, үҙем дә әйтә алмайым. Бәлки, беҙҙең өйҙәге иң ҙур байлыҡ китап булғанғалыр. Иҫемдә, 9-сы класта китапханала Д.Россиниҙең "Севилья цирюльнигы" операһы хаҡында уҡып ултырам. Бер заман уҡыуҙан туҡтап, тотҡан брошюраны беренсегә күргәндәй ҡулымда әйләндерә башланым, уйға ҡалдым. "Үәт әй, бына бер ғиллә, - мин әйтәм, - Шундай йоп-йоҡаҡ нәмә, ә үҙендә күпме мәғлүмәт бирелә, күпме исем телгә алына, күпме миҫалдар килтерелә. Итальян операһының бөтә үҫеш юлы күрһәтелә. Ә ниңә һуң беҙҙә ундай китап юҡ? Беҙҙең дә бит операларыбыҙ бар!"

Әммә бындай китаптар яҙыу өсөн һин үтә ныҡ белемле булырға тейешһең икәнде мин һуңыраҡ аңланым. Институтта уҡый ғына башлаған заманда мин опера театрында ҡуйылған "Гөлнәзирә" балетына рецензия яҙып ҡарарға булдым. Репетицияларына йөрөнөм, уҡыштырҙым. Булдыра алманым. Белемем һай икәнен тойҙом. Етмәһә, шундай ҙур кешеләрҙе - композитор, балетмейстер, рәссам, башҡарыусыларҙы хөкөм итергә һин үҙең кем әле, тип уйланым. Был эште атҡарып сығыр өсөн улар менән бер рәткә баҫырға кәрәк икәнен аңланым. Һәм ныҡлап уҡырға тотондом.

**Беләме бар мендә йығыр, ти башҡорт мәкәле. Бары тик ғилем туплап ҡына алға китеш булыуы мөмкин. Ошоно аңлау бишектән үк нығына кешелә, быны мәктәп кенә эшләй алмай. Ә шулай ҙа музыка белемендә алға этәргес көс-ажарҙы ҡайҙан алдығыҙ?**

- Яҙышыу эшен башлағанда мин үҙемдең ни тиклем кәрәкле булырымды яҡынса ла күҙ алдына килтермәгәйнем. Ә иң актив ижади мәлем суверенитет йылдарына тап килде. Ижади ҡомарҙы яулау менән, ижад тәмен тойоу менән милли сәнғәт өлкәһендә бөтөнләй яңы мөмкинлектәр асылды. Телгә, әҙәбиәткә, тарихҡа ла иғтибар көсәйҙе. Хөсәйен Әхмәтов, Заһир Исмәғилев йәки Тамара Хоҙайбирҙина тураһындағы монографияларым Башҡортостан Министрҙар Кабинеты ҡарары буйынса нәшер ителде. Бер ҡасан да мин "өҫтәл өсөн" яҙманым. Яҙғандарым һуңғы нөктәне ҡуйыу менән ташҡа баҫылды һәм тиҙ арала таралып та бөттө. Быны мин үҙемдең әллә ниндәй иҫ киткес яҙыусы булыуым менән түгел, ә шундай әҙәбиәткә ҡырҡа ихтыяж артыуы менән аңлатам. Бирелгән был форсат-шанстарҙы башҡорт музыкаһын пропагандалау өсөн файҙаланырға ғына тырыштым.

**Мәҡәлә, монография, уҡыу әсбабы… Кешенән-кешегә белемеңде күсереү, өйрәтеү өсөн иң ышаныслы һәм аңды-аңға тоташтырыусы боронғо алым былар. Бөгөн музыка белгесенә китаптар яҙыу нимә бирә?**

- Китап яҙыу бик яуаплы, бик ҡыйын эш. Атайым әйтмешләй, "Китапты уҡыуы ғына еңел. Уны яҙыр өсөн көндәр, аҙналар түгел, айҙар, йылдар буйы ултырырға кәрәк". Ғөмүмән, һәр китап алдында ниндәйҙер ҡыйынлыҡ та, маҡсат та тора. Мәҫәлән, Хөсәйен Әхмәтов хаҡында яҙыр өсөн уның бик күп әҫәрҙәрен ҡулъяҙмалар буйынса анализлап сығырға тура килде, сөнки уның ижады ғилми яҡтан бик аҙ өйрәнелгәйне. Уға ҡарата яңыса баһалау критерийҙарын да булдырырға кәрәк ине, сөнки, иҫегеҙҙәлер, 90-сы йылдар башында совет иленең "партия, Ленин" кеүегерәк бөтә төшөнсәләре инҡар ителде, тәнҡитләнә башланы, ә был композиторҙың бөтә ижады совет илен данлауға ҡоролғайны. Заһир Исмәғилевтың ижады, киреһенсә, һәйбәт кенә өйрәнелгән ине, тимәк, булған ҡараштарҙы тәрәнәйтеп, уларға ҡарата яңы ғилми баһа булдырырға кәрәк ине. Тамара Шәһит ҡыҙы Хоҙайбирҙина хаҡында ла яҙыуы ифрат ҡыйын булды, сөнки мин уның сәхнәлә бейеүен күрмәнем. Ярҙам итерлек видеояҙмалар ҙа әллә ни һаҡланмаған ине, ике генә яҙма табылды, уныһы ла халыҡ бейеүҙәре, ә бит ул - балерина.

Бәйеттәр һәм мөнәжәттәр тураһындағы монографиям үҙемдең диссертация нигеҙендә эшләнде, уны мин "ҡаным менән яҙҙым", тиһәм дә була. Алты йәшлек улымды етәкләп, Баймаҡ ауылдары буйлап йөрөнөм, материал яҙҙырттым, нотаға һалдым, анализ яһаным... Йәнем сыға яҙҙы. Бөгөн мөнәжәтселәрҙең төрлө кимәлдәге бәйге-фестивалдәре үтә. Сибайҙа йыл һайын уҙа торған төбәк-ара бәйгелә йөҙәр мөнәжәтсе ҡатнаша, ә Стәрлебашта "Иман нуры" конкурсында миңә тотош биш йыл дауамында жюри рәйесе булырға тура килде. Тимәк, мөнәжәт жанры хәҙер китаптарҙан булһа ла кире терелә, ул халыҡ рухында һәм телендә йәшәй.

Һуңғы йылдарҙағы шөғөлөм - ул башҡорт милли операһы. Шундай уникаль материалды нисек бығаса бер кем дә тикшермәгәндер. Ә бит халыҡтың йыр-моң традициялары сағылышын төрлө йүнәлештә анализлау мөмкинлеге иң элек операла асыла. "Башҡорт милли операһы - дәүер документы" тигән китабым башҡорт операһы хаҡында егерме ғилми-популяр очерктан тора. "Башҡорт опера либреттоһы" тигән монография ла шул эштең дауамы. Ошо темаға тағы бер яңы китабым баҫмаға әҙер - башҡорт операһының тарихын һәм теорияһын яҡтыртҡан ғилми-тикшеренеү хеҙмәтем ул. Шуны ла донъяға сығара алһам, артабан тыныс ҡына йәшәр инем.

**Ай-һай, тынысланырға иртәрәк һеҙгә, Гөлназ туған, тиәйем әле. Уҡталған офоҡтарығыҙ бик киң бит! Төрлө энциклопедиялар әҙерләүгә лә күп көс һалдығыҙ. Энциклопедик фекер - ныҡ төйнәлгән, сәпкә тура тоҫҡалған, иләктән иләнгән һүҙҙәр шәлкеме бит инде ул…**

- Энциклопедик текстарҙың төп үҙенсәлеге - ул унификация, йәғни бер ҡалып буйынса ойошоу һәм һүҙҙәрҙең ҡыҫҡартылып бирелеүе. Шул уҡ ваҡытта уларҙың аналитик яғы бик көслө булырға тейеш, бының менән улар ябай белешмә йыйынтыҡтарынан айырыла. Совет заманында энциклопедияларҙы сығарыу хоҡуғы союздаш республикаларҙа ғына булған. Шуға ла 1993 йылда беҙҙә "Башкорт энциклопедияһы" нәшриәте ойошторолоу менән мин бындай стилде оҡшатып етмәһәм дә, шундай төр әҙәбиәттең дә кәрәклеген аңлағас, башҡалар менән бергә эшкә тотондом, республикала энциклопедистика

*✓ Һәйбәт сәнғәт белгесе булам тиһәң, иң элек башҡорт музыкаһын тотош йөрәгең аша үткәрергә кәрәк! Юҡһа, йыш ҡына беҙҙә был темаға йә диплом алыр өсөн, йәки фән кандидаты булыр өсөн генә мөрәжәғәт итәләр.*



# БЕЛГЕСЕ.

## музыкаһы тураһында

булдырыуҙа ҡатнаштым. Был өлкәләге иң йылы тәьҫораттар "Салауат Юлаев" энциклопедияһы өҫтөндә эшләүгә бәйле. Беренсенән, темаһы ниндәй бит! Был материалдарҙы мин мәктәптә үк йыя башлағайным. Икенсенән, был баҫманы ижад итеүҙә ҙур ғалимдар эшләне. Инга Гвоздикова, Һөйөндөк Сәйетов, Виктор Сидоров, Мираҫ Иҙелбаев, Валентина Сорокина, Фәнүзә Нәҙершина. Улар бөтәһе лә - атайымдың коллегалары, ә мин араларында иң йәше инем. Шундай компанияла эшләүем менән ғорурланам мин.

**Ете томлыҡ "Башҡорт энциклопедияһы"ның башҡорт телендә ғилми мөхәррирҙәр советы ағзаһы булараҡ, һеҙ сәнғәт буйынса мәҡәләләрҙең үҙ телебеҙгә нисек теүәл тәржемә ителеүен тикшереп, уңышлы варианттарын эҙләгәнһегеҙ. Ғилми текстарҙы тәржемә итеү - ул үҙе ҙур проблема…**

- Калька алымы менән туранан-тура тәржемә итеү йыш ҡына матур фекерҙе бөтөнләй юҡҡа сығара, мәғәнәһеҙ һүҙҙәр буталсыҡлығына килтерә. Ҡыҙғаныс, беҙҙә бик күп фәнни хеҙмәттәр, фильмдар, урам буйындағы төрлө яҙыуҙар шулай икенсе тел үлсәме, башҡа лөғәт ҡалыбы менән "еңел генә" башҡортсаға әйләндерелә лә ҡуя, һәм бындай "ағас телле" телмәрҙәр һис ҡолаҡҡа ятмай. Музыка буйынса мәҡәләләр менән мин бик күп ултырҙым, фекерҙең мәғәнәһенән еткерергә тырыштым, ғилми консультант булараҡ, бөтә томдарға ла рецензиялар яҙҙым.

**Һеҙ ижад иткән хеҙмәттәр араһында айырым урын биләп торған сағыу махсус йүнәлештәр бар: йәшерәк быуын башҡорт композиторҙары ижадына арналған мәҡәләләр серияһы, төрлө йырҙар йыйынтыҡтарына һәм пластинкаларға, З.Ғ. Исмәғилевтең "Әҫәрҙәр" томдарына махсус яҙылған инеш һүҙ күҙәтнамәләре, 7 - 10-сы кластар өсөн "Башҡортостан мәҙәниәте" дәреслектәрендә һеҙҙең авторлыҡта музыка буйынса бүлектәр бирелә. Ижади эшмәкәрлегегеҙ емешле булған һайын, һеҙҙең борсолоу ҙа арта бара. Был уй-хәстәрҙәр башҡорт музыка фәне торошона бәйле, шулай бит?**

- Беҙҙең республикала музыка белгестәре бик аҙ. Туғандаш Татарстан йәки Ҡаҙағстанда улар әллә күпме тапҡырға артығыраҡ. Шуға ла уларҙа нәшер ителгән хеҙмәттәр ҙә күберәк, яҡтыртылған темалар ҙа тәрәнерәк, офоҡтар киңерәк... Ун бер йыл элек, Башҡортостан юлдаш телевидениеһында бынамын тигән итеп эшләп килгән "Музыка" берекмәһен яптылар! Тотошлай тиерлек музыковедтарҙан торған әүҙем команданы тарҡаттылар. Заманалар болғанған мәлдәрҙә тап милли мәҙәниәт белгестәре аяҡ аҫтында ҡала. Бындай белгестәрҙе әҙерләү- ифрат оҙайлы ваҡыт талап итә, ә шәхси ынтылышы, таланты булғандарҙы табыу һәм өйрәтеү бик ҡыйын, нескә мәсьәлә.

**Гөлназ Салауат ҡыҙы, һеҙ егерме өс йыл дауамында Башҡортостан мәғарифын үҫтереү институтында ла эшләнегеҙ, музыка, Башҡортостан һәм донъя мәҙәниәте буйынса уҡытыусыларға лекциялар уҡынығыҙ. Ике институттағы уҡытыусылыҡ эше теоретик белем нигеҙҙәрен нығытырға ярҙам иттеме икән? Ғилми эш менән булыу туған халҡыңдың моңон нығыраҡ аңларға ла булышлыҡ итә торғандыр?**

- Үҙҙә әйтеүемсә, мин фольклорсы булырға йыйынманым. Ә шулай ҙа тура килде. Сөнки бығаса баҫылған фәнни әҙәбиәттә хаталар бик күп, ә иң ҡәнәғәтләндермәгәне шул: күптәр башҡорт музыкаһын йә экзотикаға ҡараған кеүек, йә художестволы күренеш тип түгел, ә берәй техник организм (машина, һыуыткыс) кеүек тасуирлай. Мәҫәлән, Л.Н. Лебединский "Ирәндек" йырының "Санҡсанҡ итә Ирәндек бөркөтө" тигән һүҙҙәренә һылтанып, уны "һунарсылар йыры", ти. Ул ниндәй һунарсы йыры булһын, ти! Бөркөт образы бында синтаксик йәнәшәлек планында ҡулланыла. Һәм был хата әйләнгән һайын, хатта "Башҡорт энциклопедияһы"нда ла ҡабатлана! Ул башҡорт телен генә түгел, халыҡтың рухи менталитетын, тәбиғәткә бик яҡын образлы күңелен, һығылмалы уйхис байлығын белеп-төшөнөп бөтмәүҙән килә... Шулайтып, үҙемдең күҙәтеүҙәрем, фекерҙәрем, һығымталарым байтаҡ булып йыйылғас, мин фольклор тураһында яҙырға ултырҙым. "Башҡорт халыҡ музыкаһы" тигән уҡыу әсбабы - ул минең халыҡ музыкаһына булған шәхси ҡарашым, туплаған белемем.

Ә иң мөһиме: һәйбәт сәнғәт белгесе булам тиһәң, иң элек башҡорт музыкаһын яратырға кәрәк! Уны тотош йөрәгең аша үткәрергә кәрәк! Юҡһа, йыш ҡына беҙҙә был темаға йә аттестация үтер өсөн, йә диплом алыр өсөн, йәки фән кандидаты булыр өсөн генә мөрәжәғәт итәләр. Башҡорт халыҡ музыка сәнғәтенә ҡарата ошондай прагматик мөнәсәбәткә йәнем көйә, шундай эгоистик ҡараштар менән ғүмерҙә лә килешә алмайым.

**Әлбиттә, яратҡан эшең өсөн сәм һәм гәм менән ажарланып, яңы темаларға тотоноу, ғилми һәм ғәмәли яҡтан төплө һәм файҙалы эш ҡалдырырға ынтылыу - үҙе бер бәхетле осош. Ҡәнәғәтһеҙлек тә илһам ҡошо була аламы?**

- Минең өсөн була алмай. Бары тик үҙ темаңды тәрән аңлау, йәнең-тәнең менән бирелеү генә илһам ҡошон тота ала. "Сәнғәт кешеһе бер ҡасан да ҡәнәғәт булырға тейеш түгел", тигән фекер менән һис тә килешмәйем. Ҡәнәғәт булмағас, ниңә эшләрғә? Ҡәнәғәтлек тойғоһо үҙеңә шундай ышаныс бирә бит, йәшәргә көс бирә, аңлата алмаҫлыҡ дәрт-дарман өҫтәй! Эшләгән эштәремә әйләнеп ҡарайым да, мин үҙем менән бик тә ҡәнәғәтмен, тип әйтә алам. Бер һүҙем өсөн дә миңә оят түгел. Бик күптәргә ярҙам иткәнемдә лә иҫәпкә алғанда, ғүмерем бушҡа үтмәгәндер, тим.



**Ҡолас ташлап эшләгән кешеләр бер ҡасан да был хаҡта ҡоро ғына буш ғәп һатмай, әлбиттә. Шулай ҙа Гөлназ Салауат ҡыҙын бөгөнгө көндә борсоған нәмәләр хаҡында ла белге килә. Борсолоуҙар бармы?**

- Әлбиттә, бар! Ҡыҫҡаса ғына әйткәндә, иң элек илебеҙ яҙмышы, шулай уҡ Башҡортостаныбыҙҙың хәле, һалҡын һуғыш ысулдарының мәкерләнеүе, интернеттың йәштәр башын томалауы, тәбиғәт торошо, институттағы оптимизация, ғөмүмән, төп рухи ҡиммәттәребеҙҙең күҙ алдында юҡҡа сығыуы, профессиональ өлкәлә музыкаль тәнҡиттең, фекер алышыуҙың бөтөүе борсой...

Ә шулай ҙа тормошҡа ашыра торған бер хыялым да бар әле: Өфөлә Актёрҙар йортонда үҙемдең ижад кисәмде үткәргем килә. 1991 йылда арҙаҡлы Л.П. Атанованың шунда үткән 70 йәшлек юбилей тантанаһын иҫләйем. "Музыка белгестәренең дә ижад кисәләре була икән дә", тип уйлағайным шунда. 50 йәшемде үткәрәм, тигәндә, унан алда ғына атайым вафат булып, күңелем ҡырылды. 55 йәштә - аяғыма операция эшләткәйнем, әле - пандемия. Хәҙер инде юбилей-фәләнде көтөп тормай, ижад кисәмде үткәрәсәкмен, тим. Әйткәндәй, "пандемия ҡамауы" күп эштәрҙе атҡарыу мөмкинлеге лә тыуҙырҙы ул. Байтаҡ онлайн конференцияларҙа ҡатнаштым, докладтарым баҫылып сыҡты, бығаса уҡырға ваҡыт булмаған әллә күпме китапҡа сират етте. Башҡорт опера һәм балет театрында ойошторолған "Заманса башҡорт операһы лабораторияһы" эшендә ҡатнаштым, лекциялар уҡыным, оҫтаханаларҙа сығыш яһаным. Мәскәүҙән, Питерҙан, элекке совет республикаларынан беҙҙең лаборатория менән бәйләнешкә ингән белгестәр алдында башҡорт операһын лайыҡлы күрһәтә алғаныма ҡыуандым.

**Гөлназ туғанға йәнә бер һорауҙы бирмәй булмай: шул тиклем эшкә бирелеп тә, йәшәргә ваҡыт ҡаламы һуң?**

- Ысынлап та, беренсе планға мин гел эшемде ҡуйҙым, минең яҙмышым шулай. Беҙҙең музыка сәнғәтебеҙ шул тиклем бай, ул материал әллә күпме кешегә лә етерлек! Әммә хәҙер мин пландарымды үҙгәрттем. Башҡаса тау аҡтарырға йыйынмайым. Ҡасандыр Зәһир Ғариф улы билдәләгән үрҙе мин 25 йыл элек яуланым. Ижади пландарым бар, әлбиттә, тик уларҙы мин 5-се урынға күсерҙем. Инде тормоштоң башҡа яҡтарын барламаҡсымын.

**"Тормоштоң башҡа яғы" тигән һүҙҙе эләктереп алып, мин әңгәмәне бер сетерекле һорауым менән ослап ҡуймаҡсымын: һеҙ бик зауыҡлы кейенә белгән ханымдарыбыҙҙың береһе. Һеҙҙең ҡупшылыҡтың серен белмәйенсә, хушлашырға ашыҡмайым, тим…**

- Мин 3-сө кластан алып музыканттарҙың башҡа кешеләрҙән ныҡ айырылғанына инандым. Эске донъяларын әйтмәйем, уларҙың "болоттарҙан йөрөгәне" билдәле. Тышҡы ҡиәфәттәрен әйтәм. Әле Стәрлетамаҡта уҡығанда уҡ музыка мәктәбенең ҡәҙимге мәктәптән ер менән күк кеүек айырылғанын күрмәү мөмкин түгел ине. Көн дә йөрөй торған урта мәктәптә күҙгә салынырлыҡ итеп кейенгән бер генә уҡытыусыны ла иҫләмәйем. Ә төштән һуң музыка мәктәбенә барһаң, унда инде әкиәти донъя! Сағыу төҫтәр, ҡупшы кейемдәр! Иң мөһиме - асыҡ йөҙҙәр, илһамлы кәйеф... Махсус музыка мәктәбенә килгәс, был тәьҫир көсәйҙе генә. 70-се йылдарҙа мәктәптең үҙ бинаһы булмағанға күрә, беҙ институттың үҙендә уҡыныҡ. Музыка дәрестәрен беҙҙә институт уҡытыусылары уҡытты. Уларҙа "дөйөм мәҙәнилек" тигән сифат бик юғары ине, беҙгә, 10, 12 йәшлек балаларға улар "һеҙ" тип кенә өндәште. Дәрестәрҙән һуң уҡытыусыларҙың да, студенттарҙың да кейеменә күҙ һалып, холлда уларҙы оҙаҡ ҡына күҙәтеп ултырырға ярата торғайным, уларға бөтә яҡтан да оҡшарға тырыштым. Уҡыған саҡта уҡ беҙгә дәрес һайын тиерлек "Сәнғәт кешеләре башҡа кешеләрҙән айырыла. Һеҙҙең атлауығыҙ ҙа, кейенеүегеҙ ҙә, һөйләшеүегеҙ ҙә, хатта тик кенә баҫып тороуығыҙ ҙа матур булырға тейеш. Сәнғәт - ул матурлыҡ донъяһы", - тип ҡабатлап килделәр. Бәлки, шуға ла мин музыканттарға ынтылғанмындыр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Гөлназ Салауат ҡыҙының күңел донъяһы тәрән һәм ҡыҙыҡлы, ә ғүмер юлы мауыҡтырғыс ваҡиғаларға, талантлы кешеләр менән осрашыуҙарға бай. Шуғалыр ҙа Гөлназ Галинаның фәнни хеҙмәттәренә теүәллек һәм тәүәкәллек хас, байтаҡ мәҙәни күренешкә һәм яңылыҡҡа ғилми объектив ҡараш, хөрмәт һәм өмөт, мөхәббәт һәм талапсан күрһәтмәләре менән улар айырылып тора. Ошо бәйәндә ҡағыҙға төшөргән саҡта ла ул һүҙ толпарының йүгәнен һис ысҡындырманы - һәр һөйләмде һәм фекерҙе үҙ йөрәге, ҡәләме аша үткәрҙе. Китаптар ижад иткән зыялы һәм белемле зат менән осрашыу - минең үҙем өсөн дә оло һабаҡ булды.**

Сәрүәр СУРИНА
әңгәмә ҡорҙо.

✓ ***"Бөгөнгө һунарҙың иҫтәлеге итеп ошоно алһағыҙ ине", - тип Наполеон билендәге ҡылысын ысҡындырып, Буранғолға тотторҙо һәм ҡулын ҡыҫты. Был юлы Буранғол Наполеондың йомшаҡ ҡулын һаҡ ҡына ҡыҫты.***



### Тильзит дуҫлығы

Пруссияның бәләкәй генә Тильзит тип аталған ҡалаһы янында Неман йылғаһы уртаһындағы һал өҫтөндә башланған ике император һөйләшеүе тәүҙә Франция менән Рәсәй араһындағы солох, шунан дуҫлыҡ килешеүе булып тамамланды. Наполеон менән Александр Беренсе һал өҫтөндә ҡулдарҙы бирешеү генә түгел, беренсе күрешеүҙә үк ҡосаҡлашыу рәүешендә башланған мөнәсәбәт көн һайын оҙон-оҙаҡ күрешеп һөйләшеү, бергә тамаҡ ялғау, урман-болонда һыбай йөрөү аша дуҫлашыу хистәренә күсте. Ике император шул тиклем бер-береһенә яҡынайҙы, хатта бер туған ағай-эне лә шулай була алмайҙыр. Көн һайын тиерлек улар бер-береһенә иҫтәлеккә бүләктәр биреште, һәр саҡ яндарында йөрөгән тәхет шағирҙары улар тураһында шиғырҙар сығарҙы, ярамһаҡ йырсылар шунда уҡ уларҙы музыкаға һалып, йыр итеп йырланы.

Бер көндө Наполеон Александрға:

- Хөрмәтле император, Неман һыуы буйында юлбарыҫтар бар икән. Әйҙә шул януарға һунар итеп ҡарайбыҙ. Үҙең беләһең, кешенең иң көслөһө - батша, йыртҡыстыҡы - арыҫлан, унан ҡала - юлбарыҫ. Ике император бер юлбарыҫты алһа, мәңге онотолмаҫлыҡ бер хәтирә булыр ине,- тине.

- Мин януарға, бигерәк тә йыртҡысҡа һунар иткәнем юҡ. Ә Европаны тулыһынса тиерлек аяҡ аҫтына һалған Бонапартҡа арыҫланға йә юлбарыҫҡа һунар итеү бер ни ҙә түгелдер. Мин иһә уға малайлыҡҡа ярармындыр, тимен.

- Бигерәк түбәнһетеп ебәрәһең үҙеңде, иң ҙур дәүләт хужаһы. Һунарға ҡарарлағанһың, бер нәмә тураһында иҫкәртеп ҡуйыйым, тейем. Дөрөҫөрәге, мине иҫкәрттеләр. Шуны әйтеп ҡуйыу кәрәктер, тием.

- Нимә тураһында?

- Юлбарыҫ бит - бесәй батшалығынан. Икенсе төрлө әйтһәң, арыҫландан ҡала иң ҙур бесәй. Шуға ул бик һаҡ, шым януар. Уны алам тиһәң, бесәйҙән дә шымыраҡ булыу кәрәк. Беҙҙең шарт та шорт атҡан мылтыҡ һәм пистолет менән уға һунар итеп булмай тиерлек, ти. Һәр хәлдә дары шартлата башлағандан бирле, юлбарыҫты һунар итеп алған кеше булмаған икән Неман буйында.

- Тимәк, бик һаҡ булырға кәрәк һунарҙа.

- Эйе.

### Һунар

- Наполеон әфәнде, һин үҙең юлбарыҫ һунарына йөрөгәнең бармы? - Александр Беренсе шулай тип ҡыҙыҡһынды.

- Юҡ. Минең һунарсылыҡ та бик самалы ғына инде. Йәшерәк саҡта бер-ике мәртәбә бүре алышҡайным.

- Алдыңмы һуң?

- Эйе, миңә тигән бер сатан бүре ҡалғайны.

- Бүре алғас, таҫыл бар инде.

- Әллә тағы...

- Ә ни менән үткәрәһең һуң ғүмереңде?

- Үҙең белмәгән ни эш бар. Көнөн-төнөн тигәндәй ер, ил эштәре сығып ҡына тора.

Ирҙәр ҡыҙарып барып һүнгән шәфәҡҡә ҡарап һөйләшеп ултырҙы ла икеһе лә берҙе үк уйланы: иртәгә яумаһа ярар ине.

- Әфәнде, таралышайыҡ, йоҡлайыҡ. Иртәгә таңдан да элек торорға тура киләсәк, - тине Наполеон.

Александр тағы ла бер фекер әйтмәксе булғайны ла, Наполеон боролоп китә башлағас, өндәшмәне. Үҙе йәшәгән ергә еткәс, Александр генералына өндәште:

- Бар әле "төнъяҡ амурын" алып кил.

- Кемде?

- Теге көндө Наполеонға килтерҙәң бит әле уҡ-һаҙаҡлы башҡортто, шуны.

Оҙаҡламай Буранғол Ҡыуатовты табып та килтерҙеләр.

- Һин һунарға йөрөгәнең бармы? - тип һораны император.

- Һунарға йөрөмәгәс, башҡорт булмай инде ул.

- Юлбарыҫҡа ла барғаның бармы?

- Тура килде.

- Иртәгә иртүк Наполеон менән юлбарыҫҡа сығабыҙ. Һин дә барырһың.

- Кем сифатында?

- Һунарҙың сифаты ла буламы ни?

- Һунарҙа һунарсы, ҡоралөпсөндә ташып, атты ҡарап йөрөүсе малай була.

- Һин һунарларның, мин был эштең бер нәмәһен дә белмәйем, шуға малай булырмын.

- Император малай булмай инде ул.

- Ярар, кем булһаҡ та булырбыҙ. Уның күҙ күрер. Иң мөһиме, юлбарыҫ алырға кәрәк. Ошо тирәлә генә йоҡла, иртәнсәк һине эҙләп йөрөрлөк булмаһын.

- Уныһына хафаланмағыҙ.

Ысынлап та иртүк торҙо улар. Еңелсә генә рызыкландылар ҙа атҡа менделәр. Оҙаҡламай Наполеон да быларға ҡушылды.

- Мин тағы ла берәүҙе эйәрттем, - тине Александр. - Ул юлбарыҫҡа һунар иткән кеше. Өҫтәүенә тауышһыҙ ата торған ҡоралы ла бар.

- Бик яҡшы, - тип ризалашты Наполеон.

Тауыш-тынһыҙ ғына барҙылар, хәлдәренән килһә, ат тояҡтарын да туҡылдаттырмаҫтар ине. Шуны талап итә ине һунар. Юлбарыҫ бесәйҙең бөтөн килеш - килбәтен дә алған. Йомшаҡ ҡына баҫып, шым ғына йөрөй, йән-фарман бейеккә һәм алыҫҡа ырғый. Шылт иткән тауышты ла ишетә, еҫте әллә ҡайҙан һиҙә. Күҙе лә үткер, тик ыласындыҡы кеүек үк түгел инде. Эт, бүре һымаҡ ҡомһоҙ түгел. Әләкһә, яйлап ҡына һеңдерә-һеңдерә ашай. Бесәй кеүек көнсығыш ағара башлау менән һунарға сыға. Кисен, төнөн йоҡлай. Көндөҙ ҙә һунарлап ҡуйғылай. Быныһы күбеһенсә ас сағында. Туҡ булһа, берәр йылы ерҙә йоҡлай.

Оҙаҡламай кәрәк ергә барып еттеләр. Аттарҙан төшкәс, Буранғол кейеҙ ҡалпағына ҡыҫтырылған мамыҡты ике бармаҡлап тотоп өҫкә күтәрҙе. Ел юҡ һымаҡ ине, әммә саҡ ҡына булһа ла иҫә икән, мамыҡ елберҙәне. Буранғол елден аҙ ағына ымланы ла янын һул ҡулына, уныңа уҡ алып алдан атланы. Наполеон шуны уҡ ҡабатлап артынан эйәрҙе. Күп тә үтмәй ағас араһына инделәр. Мөмкин тиклем шым булырға тырышып, икеһе ике ағас артына баҫты. Александр өсөнсө ағас артына боҫто, Буранғол шундағы ағасҡа бәйле бауҙы тартты. Тынлыҡты һарыҡ баҡырған тауыш боҙҙо. Буранғол быныһын кисә император янынан сыҡҡас, һунар итә торған ерҙе барып күргәйне һәм кәрәкле эштәрҙе эшләп киткәйне инде. Һарыҡты алдатҡыс итеп бәйләткәне. Юлбарыҫ шуны һунарлай була килергә тейеш, ине.

Буранғол уктың ярыһын керешкә ҡыҫып, саҡ ҡына төшкән яҡтыла сырамып күренгән ҡара һарыҡҡа текәлде. Бауҙы тартҡанға уянған мал үлән кертләтергә тотондо. Һыуға яҡын булғанға күрә һарыҡ тешенә генә эләгерлек үлән бар ине.

Байтаҡ ваҡыт уҙып киткәндәй булды. Наполеондың пистолетты ҡыҫыуҙан бармаҡтары зәңкеп китте, күҙҙәре лә талды һәм ҡарашын уңға алды. Ни күҙе менән күрһен, ағарып ҡына килгән яҡтыла сатыр-сотор аша Наполеонға дүрт күҙ ҡарай. Дүртәү түгел, икәү икән. Өҫтәгеләре түңәрәк ҡаш. Наполеондың өйөндә эленгән юлбарыҫ башы һымаҡ. Уның да күҙҙәре тәү ҡарашҡа дүртәү кеүек ине. Была күҙҙәр ҡыҫыла төштө. Бәй күҙҙәр йөрөй, тере лә баһа улар! Наполеонға текәлгән күҙҙәр әкрын ғына башы менән ҡуша өҫкә күтәрелде һәм ут сәсә башланы. Наполеон да быға текәлгән, күҙҙәрен тегенекенән айыра алмай. Пистолетты быға тоҫҡап, керешке ысҡындырырға ла бит... Шул саҡ нимәләр шып итеп ҡалды һәм теге күҙҙәр юҡ булды, урман ауыҙын яңғыратып сай-й тигән тауыш сыҡты.

- Ҡабаттан был яҡҡа килеп йөрөмәйәсәк был йыртҡыс, - Наполеон Буранғолдоң шулай тигәненә һиҫкәнде. Тағы ла күҙ асып йомған ваҡыт үтһә, бая уға текләшкән күҙҙәр хужаһы Наполеондың битенә тырнаҡтарын батыра ине... - Мин уның ҡолағына аттым, - тине Буранғол. - Бесәйҙең дә иң ауырткан ере ҡолаҡ бит. Ҡолағына сиртһәң, ҡабаттан тәртип боҙмай. Был да Неман буйында малға тейеп йөрөмәҫ.

Буранғолдың һөйләнгәнен тыңлап торған Александр Наполеонға тәржемәләне.

Кешенең тауышына һарыҡтың ҡушылды. Уны хәтерләгәс, Буранғол:

- Был януар юлбарыҫҡа тәтемәне. Ҡорбанға инселәнгәс, үҙебеҙ булһа ла салып ашарбыҙ инде. Бөгөн юлбарыҫ ите урынына һарыҡтан шешлек ҡурырбыҙ, - тип көлдө. Наполеондың үлемдән саҡ ҡотолоуын иҫләтеп торманы. Был турала Наполеон да һүҙ ҡуйыртманы. Буранғол үҙ полкы ягына китә башлағас:

- Бөгөнгө һунарҙың иҫтәлеге итеп ошоно алһағыҙ ине,- тип Наполеон билендәге ҡылысын ысҡындырып, Буранғолға тотторҙо һәм ҡулын ҡыҫты. Был юлы Буранғол Наполеондың йомшаҡ ҡулын һаҡ ҡына ҡыҫты.




* * *

Ике император ҙа был дуҫлыҡтың мәңгелек һәм ҡаҡшамаҫ буласағы тураһында тостар әйтте, анттар бирешеүгә барып етмәһә лә, саҡ ҡына ҡалды. Күңел күтәренкелегенең иң юғары нөктәһенә еткән саҡта, ирҙәр ҡапыл тыуған һәм туктауһыҙ ҡайнап торған хистәр бер ваҡытта ла шиңмәҫ һәм бөтмәҫ тип уйланы. Әммә Тильзиттан һуң үҙ илдәренә ҡайтҡас, Пруссия ҡалаһындағы хәлдәргә ситтән ҡарағас, хистәрҙең саманан ашып барғанын самалап, үҙҙәре лә бер аҙ һыуынды. Һалҡындың төшөүенә, бигерәк тә Рәсәйҙә, императорҙы уратып алған кешеләрҙең был дуҫлыҡҡа бик үк ҡайнар булмаған мөнәсәбәте сәбәпсе булды. Александр Беренсе үҙ яранларын йыйып, дуҫлыҡ килешеүенә нисек өлгәшкәндәрен, Наполеондың ниндәйерәк кеше икәнлеген маҡтай-маҡтай һөйләгәнен тыңланылар ҙа... өндәшмәнеләр ҙә ҡуйҙылар. Кешене кәмһетәм, уның эш һөҙөмтәләрен юҡҡа сығарам тиһәң, иң һәйбәт ысул, өндәшмәү. Хурлап та, ыңғай итеп тә бер һүҙ ҙә әйтмәһәң, теге кеше үҙен-үҙе хурлап, үҙ эшен юҡҡа сығарасаҡ. Александр уға уҡ барып етмәне етеүен, әммә бөтәнсә Тильзит дуҫлығын күккә күтәреп тә йөрөмәне.

Императорҙың Тильзиттан ҡайтыуына айҙан ашыу ваҡыт үткәйне, ул үткәргән иҡтисад кәңәшмәһендә бер дворян һикереп торҙо.

- Ғәли йәнәптәре, - тип башланы был тауышын күтәрә биреп. - Быңа һеҙ ил ҡаҙнаһына ингән аҡсаның кәмеүе тураһында әйтәһегеҙ. Әлбиттә, кәмей. Үҙебеҙҙең диңгеҙ порты Англияға оҙатырға килтерелгән ағасты ҡабул итмәй. Элек бер ниндәй ҙә кәртә булмай торғайны, хәҙер, имеш, ярамай. Тильзит килешеүе буйынса Англияның караптарын беҙҙең порт индермәй һәм Англияға бер ярыҡ утын да сығартмай икән. Әгәр беҙҙең хәлдә хөртәйтә икән, ул дуҫлыҡ килешеүенең беҙгә ни бысағыма кәрәге бар һуң?

- Килешеү буйынса беҙ ҙә, Франция ла Англияға ҡаршы сәйәсәт алып барабыҙ. Шуға сығарылмай һеҙҙең ағас. Ә тауарыңды Францияға оҙата алаһың. Улар беҙҙең нәмәләргә яҡшы шарттар тыуҙырасаҡ,- тине император.

- Ғәли йәнәптәре, французларҙың кем икән беләбеҙ инде. Улар менән берәр нәмә эшләгәнсе ярты ҡартайырға кәрәк...

- Тильзит килешеүенә беҙ үҙ теләгебеҙ менән ҡул ҡуйҙыҡ һәм уны үҙебеҙ үтәйәсәкбеҙ,- тине император. - Ул турала хәбәр ҡуйыртып йөрөмәгеҙ.

Императорға ҡабат ошо рәүешле ҡаршы сығып, Тильзит килешеүен хурлаусы булманы. Әммә маҡтаусы ла табылманы. Быға французлар менән йөнле-башлы килешеү ҙә, хатта, ышаныслы ғына һөйләшеү ҙә булмаған. Бәлки, баяғы кеше әйткән ышаныһыҙлыҡ сәбәп булғандыр.

**(Дауамы. Башы 31-35-се һандарҙа).**

✓ *Атты әйтәм, йылы һүҙгә ireп китә (бындай яғымлы һүҙҙәрҙән һуң үҙем сак аттан һикереп төшөп, уның эргәһенә йүгереп китмәнем). Ҡолаҡтарын ҡайсылатып күңелле генә кешнәп ҡуя. Шул арала ҡатын уның башына йүгән кейҙерә.*



*Аһ, ҠЫҘ-ҠАТЫН!*

# АТ ЕНЕ ҠАҒЫЛҒАНДЫР

Бер мәл бер таныш менән (исемен Мөнир тип атайыҡ әле) урманға барырға килештек. Һөйләштек, ҡул бирештек, һүҙ бирештек. Әммә ул һөйләшкән мәлгә һөйләшкән урынға килмәне. Берәй сәғәт ваҡыт үтеп китте. Ә ул һаман юҡ та юҡ. Ярай, мәйтәм, артыҡ ҡайғырмайым әле. Бәлки, берәй эше килеп сыҡҡандыр. Донъя хәлен белеп булмай бит. Шулай тип үҙемде тынысландырған булам. Әммә ваҡыт үтә. Ул үткән һайын минең борсолоуҙар арта. Хатта асыу ҡабара биреп ҡуя. Юҡ, тип тынысландырам үҙемде, Мөнир ундай-бындай кеше түгел. Моғайын, берәй етди сәбәп килеп сыҡҡандыр. Аптырап, һыбай килеш уларҙың өйө яғына юл алам. Барып еткәс, аптырап, көлөмһөрәй биреп ҡуям. Баҡтиһәң, Мөнир атын тота алмай бер була, имеш. Ялан кәртәлә йөрөгән малҡай башын бирмәй ҙә ҡуя. Мөнир нисек етте шулай иркәләп, уның ялынан тотоп ала былай. Әммә эш шунан ары үтмәй. Ат тәрән итеп бышҡырып ала һәм башын ҡырын һалып, икенсе яҡҡа атлап китә лә бара. Мөнир атты ялынан тағы тотоп ала. Әммә йәтешләп йүгәнен яҡынлата башлау менән ат тағы башын бора һәм атлап китә. Бына сәғәттән ашыу самаһы ошолай ыҙалата икән ат үҙ хужаһын. Ә аты һәйбәт уның. Әммә бик үсексән. Бына ошо мәлдә уға сыбыртҡы менән һуғыу тураһында уйларға ла ярамай. Уға хатта бер аҙ ҡысҡырып асыуланыу ҙа етә. Иркә һүҙгә өйрәнгән малҡай ауыр һүҙҙе бик ауыр күтәрә. Аҙаҡ урмандан ҡасып ҡайтып китеүе лә бар.

Мине күргәс, Мөнир уңайһыҙлана биреп ҡатынына ҡысҡырҙы.

- Атты тотоп бир әле!

Ҡатыны был хәлгә күптән өйрәнеп бөткән, күрәһең. Ул ҡырҡ эшен ҡырҡ яҡҡа ташлап, ялан кәртә яғына табан юл ала. Килеп етер-етмәҫтән матур һүҙҙәрен теҙә башлай. Дөйөм алғанда, ҡатындарҙы аңламаҫһың инде. Әллә этлегенә барып, әллә ысын күңелдән атҡа Мунька тип өндәшә! Ире Мөнир, аты Мунька. Миңә ҡалһа, бында ниндәйҙер еңелсә генә мыҫҡыллау бар һымаҡ. Әллә үҙем боҙоҡ, әллә "Мунька" боҙоҡ, аңламаҫһың был донъяны. Ә ҡатын һайрай ғына.

- Мунька, аҡыллым, кил әле бында. Нишләп улайтып хужаңды тыңламайһың. Нисек оялмайһың, аҡыллым. Улай ярамай ҙа инде. Хужаны тыңлар кәрәк. Донъя көтәм тип янып йөрөй бит ул. Минең һымаҡ уйнап йөрөмәй ҙә ул. Бергә урманға барығыҙ, бергә матур итеп йөрөп ҡайтығыҙ... Фәлән дә фәсмәтән...

Атты әйтәм, йылы һүҙгә ireп китә (уңайһыҙ булһа ла әйтәйем әле - бындай яғымлы һүҙҙәрҙән һуң үҙем саҡ аттан һикереп төшөп, уның эргәһенә йүгереп китмәнем). Хатта ҡолаҡтарын ҡайсылатып күңелле генә кешнәп ҡуя. Шул арала ҡатын уның башына йүгән кейҙерә. Уның теҙгенен иренә тоттороп китеп тә бара. Уңайһыҙ хәлгә ҡалған ат хужаһы рәхмәт әйтәһе урынға ҡатыны артынан мығырҙап ҡала.

- Берегеҙҙе өйгә, икенсегеҙҙе һарайға бикләп, үс ҡанғансы ярһаң ине!

# ТЕХНИКА ЕНЕ ҠАҒЫЛҒАНДЫР

Машина һатып алдым әле. Әле шуға һоҡланып ҡарап торам. Урамдың йәме булып ялтырап ултыра. Әйтмәһәм дә һиҙәһегеҙҙер. Күптәр көнләшә! Ярай, сит кешеләр булһа, ней асыу. Туғандар ауыр һүҙ әйтә бит әле. Йәнәһе, минең ҡулдар дилбегә тоторға ғына эшкинә. Йәнәһе, минең техникаға барымым юҡ. Йәнәһе, минең ҡулдар машина рулен тоторға эшкинмәй. Аптырап, ҡулдарға ҡарайым һәм аптырап ҡуям. Нишләп эшкинмәһен ннде ошо ҡулдар! Хатта ғына эшкинә. Ҡулдарыма ҡарап, үҙем һоҡланып ҡуям. Бынамын тигән килешле ҡулдар. Бындай ҡулдар менән хатта Айға осорға була!

Машина алыуға аҙна-ун көн самаһы үткәс, ҡатын әйтә ҡуйҙы.

- Атайымдарға барып ҡайтайыҡ!

Ҡыуанып киттем. Бына бит, машинаның кәрәге тейҙе. Оло юлға сығып, ҡул күтәреп тораһы түгел. Ҡайным менән ҡәйнәм күрше районда ғына йәшәйҙәр. Оло юлдан барһаң, йөҙ саҡрымдан үтмәйҙәр. Ә бына урман аша тура юлдан барһаң... Әммә ҡатын ҡырҡа әйтә.

- Оло юлдан барабыҙ!

Минең аптыраған ҡараштты күреп, өҫтәп ҡуя.

- Донъя хәлен белеп булмай. Машина хәлен дә белеп булмай. Унан бигерәк һинең хәлде белеп булмай.

Донъя хәлен ысынлап та белеп булмайҙыр. Ә машина хәлен белеү кәрәкмәй. Уның хәле шәп. Сәғәт һымаҡ эшләй. Газға баҫып үкертеп ебәрһәң, шәләй-вәләй йөрөгән хайуан да улай үкерә алмайҙыр әле. Ә минең хәлде нишләп белергә кәрәк. Мин һәр ваҡыт әҙер. Ә шулай ҙа, ярай әле ҡатын сос. Минән машинаның майын, һыуын, тағы әллә ниməһен тикшертте. Бер тәгәрмәс насарыраҡ икән. Шуны алыштырырға тура килде. Әле бына ауыл урамы буйлап елдереп китеп барам. Ауылдаштарҙың аптыраған йөҙҙәрен күреп кинәнес алам. Шул арала ҡатын ҡулын алға табан һуҙып әйтә ҡуя.

- Алда таш!

Таш ятҡанын былай ҙа күрәм. Әйтмәһә лә була. Ул тамаҡҡа әҙерләгәндә мин өҫтәл эргәһенә тороп, алдында сәй, һөт, ҡалаҡ, тип төртөп күрһәтеп тормайым да инде. Уйҙарҙың осона сығып булманы. Шул арала теге таштың өҫтөнә менеп тә киттек. Уныһы машина аҫтында шатыр-шотор итеп ҡалды ла юл ситенә сығып та осто. Ай-һай, машина ныҡ икән. Ниндәй ташты онтап ташланы! Машина аҫтына эләгеп "зәғифләнгән" тағы бер нисә ташты иҫәпкә алмағанда, арыу ғына сығып киттек ауылдан. Хәҙер оло юлдан елдерәм. Нишләптер йырлағы килә. Күңелле! Шул саҡ ҡатын әйтә.

- Ниндәйҙер тауыш сыға!

Сыҡһа сығалыр. Тимер бит. Бушҡа машинаны тимер-ат тип атамайҙар ҙа инде. Минең битараф ҡалғанды күреп, ҡатын тағы ҡабатлай.

- Тыңла әле, ниндәйҙер тауыш сыға!

Яҡшылап тыңлаған кеше булам. Миңә ҡалһа, бер ниндәй ҙә тауыш сыҡмай. Бөтәһе лә ал да гөл. Ә ҡатын һаман үҙенекен тыҡый.

- Тауыш көсәйә төшкән һымаҡ. Яҡшылап тыңла әле!

Ысынлап яҡшылап тыңлайым. Юҡ, бер ниндәй ҙә тауыш юҡ. Бары тик ел генә геүләй. Шул арала беҙҙе гаишниктар туҡтата. Минән ниндәйҙер документ һорайҙар. Хатта таптыралар. Ярай әле, ҡатын сос. Ул барыһын да айырым сумкаға һалып алған икән. Аллаға шөкөр, имен-аман ҡотолоп ҡуҙғалып киттек уларҙан. Шулай күпмелер бара биргәс, ҡатын әйтә ҡуя.

- Анау юл ситендә торған машина беҙҙекенә оҡшаш. Туҡтап һорашайыҡ әле. Бәлки, ниндәй тауыш сыҡҡанын улар белер.

Улар эргәһенә барып туҡтаныҡ. Ярай әле минең һымаҡ яҡшы кешеләр булып сыҡты. Ниндәй тауыш сыҡҡанын ғына аңлата алманым уларға. Шуға күрә ситкәрәк китеп тороуҙы хуп күрҙем. Ситтән ҡарап торам. Ысынлап та, беҙҙең машиналар оҡшаш икән. Ә тегеләр ниндәй тауыш, нимәгә сыҡҡанын барыбер белмәнеләр. Машинаны ҡабыҙып та ҡаранылар, һүндереп тә ҡаранылар. Әллә нисәмә мәртәбә урап сыҡтылар. Ә сәбәбен барыбер тапманылар. Тапмайҙар инде бер тауыш та сыҡмағас! Ә шулай ҙа рәхмәттәр әйтеп, ҡуҙғалып киттек. Бер саҡрымдай ара барғас, ҡатын ҡырҡа әйтә.

- Туҡта!

Яйлап ҡына юл ситенә барып туҡтайым. Ҡатын миңә борола төшә.

- Һин бит тәгәрмәсте йүнләп нығытмағанһың!

Ай, әттәгенәһе, ысынлап та тәгәрмәсте ныҡлап бормағанмын икән. Ул бушаған һәм тегеләй-былай һуғылып, тауыш сығара башлаған икән. Ярай әле, ҡатын сос. Тегеләй булһа, ҡайнымдарға кеше көлдөрөп өс тәгәрмәстә барып инер инек!

**Шәрип БИРҘИН.**

*КҮРКӘМ ҒӘҘӘТТӘР*

# МАҠТАРҒА ӨЙРӘН ҺӘМ...

## маҡтағанды тыңлай бел



**Кешене маҡтау күңелле лә, файҙалы ла. Һин быны эшләй алаһыңмы? Юҡ? Улайһа өйрән! Кемдең генә үҙе тураһында йылы һүҙ ишеткеһе килмәй икән. Үкенескә күрә, беҙҙең барыбыҙ ҙа комплимент әйтә белмәйбеҙ шул. Ә күптәр уны бөтөнләй артыҡ тип һанай һәм ярамһаҡланыу менән бутай. Был дөрөҫ түгел...**

- Комплиментһыҙ аралашыу - һөйөүеңде белдермәйсә яратыуға тиң. Йылылыҡ һәм сағыулыҡ етмәй.
- Үҙенең ниндәйҙер ыңғай сифаттары йәки һәләте, йә булмаһа яңы сәс үреме йәки күлдәге тураһында маҡтау һүҙҙәре ишетеү һәр кемдең күңеленә май булып яғыла. Ошондай күркәм үҙгәрештәргә иғтибар итмәй ҡалыуҙан да ҡурҡынысырағы юҡ. Ә комплимент - һиңә иғтибар бүлгәндәренең, һинең улар араһында булыуың һәм лайыҡлы баһаланыуыңды белдергән билдә.
- Йылы һүҙҙәр - яҡшы мөнәсәбәт күрһәткесе. Был комплиментты ялағайланыуҙан айыра: уның нигеҙендә кешегә яҡшылыҡ эшләү теләге ята, ә хәйлә ҡорорға тырышыу түгел.
- Комплимент әйткән кешегә был әңгәмәне ялғап алып китеү йәки үҙенең яҡшы эмоциялары менән бүлешеү мөмкинлеге бирә.
- Үҙеңдең башҡалар менән һоҡланыуыңды белдерергә өйрәнеп, һин үҙ-үҙеңә ышанысты арттыраһың. Юҡҡа ғына комплимент эшләй белеүсе кеше уларҙы ҡабул итә лә белә бит.

### Кәйеф рецебы

Кемгәлер матур һүҙ әйтеп, һин әңмәсеңә лә яҡшылыҡ эшләйһең, шулай уҡ үҙеңдең күңелеңде күтәрәһең. Комплиментттар яһау сәнғәтенә нисек өйрәнергә?

**Комплимент яһауҙың беренсе шарты - ихласлыҡ!** Әгәр кешене маҡтарға теләһәң, был сәбәп һиңә ысынлап та оҡшарға тейеш. Ҡайһы бер арттырып ебәреүҙәр килешмәй, шулай уҡ алдашырға ла ярамай. Ярҙамсыл кешегә "Һин фәрештә!" тип әйтергә мөмкин, ләкин изгелегенә шикләнгән кешегә был һүҙҙәрҙе әйтмәүең яҡшыраҡ.

**Икенсе шарт - комплименттарҙы урынлы ҡулланыу.** Урынһыҙ ҡулланылған һоҡланыуҙың шатлыҡ алып килеүе икеле, ә, киреһенсә, кешене ярһытырға мөмкин. Күҙ алдына килтереп ҡара: һинең эшең күп, башыңды ла ҡалҡыта алмай, ҡағыҙ эштәре менән булышаһың. Шул ваҡыт яныңа әхирәтең килеп, һинең прическаңдың иҫ киткес матур булыуы тураһында әйтә. Был комплимент һине шул тиклем ҡыуандырыр инеме?

**Өсөнсө шарты - комплименттың үҙенсәлекле булыуы.** Тәжрибәле күңел әүрәтеүселәрҙең шундай ҡағиҙәһе бар: матур ҡыҙҙы аҡылы, ә аҡыллы ҡыҙҙы матурлығы өсөн маҡта. Бер төрлө комплиментттар туйҙыра. Тауышының иҫ киткес матур булыуы тураһында көн һайын ишетеп тороусы йырсыға үҙенең бешеренеү һәләттәре тураһында ишетеү нығыраҡ күңеленә ятыр ине. Ә кем дә булһа оҫта тегенселә шиғри һәләттәр барлығына иғтибар итһә, уға шул тиклем ҡыуаныс буласаҡ.

**Дүртенсе мөһим һыҙат - ҡыҫҡалыҡ.** Уҙған быуаттағы аристократтарҙың ҡабарынҡы маҡтау телмәрҙәрен ҡалдыр - улар был сәнғәткә бала саҡтан өйрәнгән. Бигерәк оҙон комплимент яһағанда һинең фекерҙәрең таралыуы, уйҙарың сыуалыуы ихтимал.

**Бишенсеһе - бер мәғәнәгә эйә булһын.** Ишеткәс тә бының маҡтау һүҙеме, әллә кәмһетеү һүҙе булдымы икәнлеген айырып булмаған ике мәғәнәгә эйә ләҡаптар бар. Һәм хатта бер ҡалыпҡа һалынған: "Ҡалай һин бөгөн матур күренәһең!" комплименты ла, "Бөгөн генә шулай күренәмме икән?" тигән һорауҙы тыуҙырырға сәбәп булыуы ихтимал. Шуға күрә, "Матурһың!" тигән кеүек һүҙҙәрҙе ҡулланыу күпкә уңайлыраҡ булыр. Бәйләнергә урын ҡалмай.

### Шаяртып һәм етди

Үҙенең һоҡланыуын кеше туранан-тура белдерергә мөмкин. Йәғни, һин үҙеңә оҡшағанды нисек бар, шулай әйтәһең. Шулай ҙа бындай комплименттар, әгәр һин әңгәмәсеңде насар беләһең икән, урынһыҙ булыр, ул һинең һүҙҙәреңде ялағайланыу тип ҡабул итеүе ихтимал. Ә һоҡланыуҙы ситләтеп әйтеү кешенең үҙе тураһында түгел, ә һинең уға ҡарата мөнәсәбәтеңде белдерә. Үҙеңдең етәксеңде иң яҡшы етәксе тип әйтергә уңайһыҙланаһыңмы? Улайһа, уның ҡулы аҫтында эшләүе нисек еңел икәнлеген әйт. Шаян комплименттарҙы хатта иң оялсан кешеләр ҙә еңел ҡабул итә. Йылмайып ҡына: "Ниндәй ҡош шулай матур һайрай? Ә был беҙҙең Гөлкәй моңлана икән!" - тип әйт, шунда уҡ әхирәтеңдең күңеле күтәрелер. Һөйләмеңә бер аҙ хупламау ҙа ҡушып ебәр, киҫкен ҡапма-ҡаршылыҡта һинең маҡтау һүҙҙәрең тағы ла сағыуыраҡ яңғыраясаҡ: "Бөгөн һин ғәҙәттәгесә түгел, ә күпкә яҡшыраҡ күренәһең!"

Комплимент эшләй белеү генә түгел, уларҙы ҡабул итә белеү ҙә мөһим. Һин кемделер маҡтағанда ул яуап итеп уңайһыҙлана йәки аҡлана башлаһа, һиңә рәхәт булыр инеме? Улай итергә ярамай. Рәхмәт белдер. Комплименттарҙы йылмайыу менән яуап биреүселәргә әйтеү күңеллерәк бит.

*✓ Урындыҡтың түр яғынан ҡартатай аяҡтарын йәтеш кенә бөкләп ултырҙы ла, нимәлер уҡып, битен һыйпап ҡуйҙы. Беҙ бар хәлебеҙсә ҡартатай һымаҡ ултырырға тырыштыҡ. Әммә булдырып булманы.*

ИНТЕРНЕТТАН



# НИНДӘЙ МИЛЛӘТ ЙЫУАН?

■ Халыҡ-ара табиптар коллективы Европаның "йыуан" һәм "һомғол" милләттәрен атаған. Тикшеренеү барышында яҡынса 250 мең кешенең мәғлүмәттәре тикшерелгән. Ниндәйҙер милләттең уртаса буйы ни тиклем оҙонораҡ, улар шул тиклем һомғолораҡ икән һәм уларҙың тән массаһы индексы ла аҙыраҡ. Иң оҙон һәм һомғол тип скандинавия илдәре - Норвегия, Швеция, Дания кешеләре табылған, испандар, итальяндар, португалдар, шулай уҡ гректар - иң тәпәше. Ғалимдар билдәләүенсә, был генетик үҙенсәлектәр генә түгел (генетика климат факторҙары һөҙөмтәһендә формалаша), ә милли кухня йолалары, шулай уҡ экология ла йоғонто яһаған. Тикшернеүҙәргә славян халыҡтары инмәгән.

■ Һауаның бысраныуы һөҙөмтәһендә донъя буйынса йылына 3,3 миллион кеше ваҡытынан алда үлә. Ғалимдар 35 йылдан һуң был һан 6,6 миллионға етеүе ихтимал, тиҙәр. Бигерәк тә сәләмәтлеккә озон һәм диаметры 0,0025 мм булған бәләкәй өлөшсәләр насар йоғонто яһай. Экологтар билдәләүенсә, төрлө илдәрҙә һауа бысраныуының сәбәптәре төрлөсә. Һиндостанда, Ҡытайҙа, мәҫәлән, йорт хужалығында ҡулланылған усаҡтарҙан сыҡҡан төтөн, АҠШ кеүек алдынғы илдәрҙә автотранспорт һәм электр станциялары, Европала ауыл хужалығы зыян килтерә. Көньяҡ-көнсығыш һәм көнбайыш Океания иҫәбенә был илдәрҙә ваҡытынан алда үлеү 2050 йылға йылына 6 миллионға тиклем етеүе бар. Ғалимдар ыңғай тенденцияларҙы ла билдәләгән, мәҫәлән, урман ҡырҡыу менән бәйле янғындарҙы иҫкәртеү үлем осраҡтарын кәметеүгә алып килгән. Урман ҡануниәте реформаһы һауала ваҡ өлөшсәләр концентрацияһын 30 процентҡа кәметергә мөмкинлек биргән.

■ Фруктозаны артыҡ ҡулланыу һимереү, Паркинсон ауырыуы, депрессия, биополяр тайпылыш менән бәйле 900-ҙән ашыу гендың әүҙемлеген үҙгәртә икән. Калифорния университеты ғалимдары ҡомаҡтарҙа һынауҙар үткәргән. Уларҙы башта лабиринттан сығыу юлын табырға өйрәткәндәр. Һуңынан алты аҙна һынауҙар үткән, ҡомаҡтарҙы өс төркөмгә бүлеп, төрлөсә ризыҡ менән туҡландырғандар. Фруктозала "ултырған" ҡомаҡтар кире лабиринтҡа төшкәс, сығыу юлын башҡаларға ҡарағанда оҙағыраҡ эҙләгән. Икенсе төркөм фруктоза менән бергә омега-3 ҡабул иткән. Өсөнсө төркөмгә уларҙың береһе лә бирелмәгән. Икенсе һәм өсөнсө төркөмдәге ҡомаҡтар араһында айырма табылмаған, йәғни, омега-3 глюкозаның зыянын юҡҡа сығарған.

■ Бүләк биреү - кешелек тарихындағы иң боронғо йолаларҙың береһе. Психологтар билдәләүенсә, был кешенең психик торошона ла яҡшы тәьҫир итә. Ябай ғына бүләктән дә ыңғай тойоғолар кисергән кешеләр була. Кемдер ҡиммәтле бүләктәр ҡабул итеп өйрәнгән, уларҙың иһә кәрәкле әйберен ала алмаһа, кәйефе төшә. Ғөмүмән, бындай кешеләрҙең кәйефе йыш үҙгәреп тора. Бүләк биреүсе лә, кешенең ҡыуаныуын күреп, шатлана. Балаға бүләк эшләп, уны ҡыуандыраһығыҙ икән, ул да һеҙҙе үҙен яҡшы тотоуы, дәрестә алған яҡшы билдәләре менән бәхетле итергә тырышасаҡ, тимәк, ул ала белеү генә түгел, бирә белеү мөһимлеген дә аңлаясаҡ, ти ғалимдар.

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ

# ҠАРТАТАЙ ҺАБАҠТАРЫ ОНОТОЛМАЙ!

**Өс ҡустым менән ауылға ҡунаҡҡа килдек. Ҡунаҡҡа тигәс тә, ҡунаҡҡа түгел инде. Атай менән әсәй ҡалдырып китте беҙҙе. Ә үҙҙәре ҡайҙалыр тайҙылар. Әллә Анталияға, әллә Ассыға. Тәүгеһе Төркиәлә, ә һуңғыһы Белорет районында урынлашҡан. Ә бына беҙҙе Баймаҡтағы Сыңғыҙ ауылында ҡалдырып киттеләр. Ҡустым әйтмешләй, бесәй балаларын ҡалдырған һымаҡ килеп сыҡты. Елкәнән тотоп, берәмһәрәм машинанан төшөрөп, сумка-фәләнде тотторҙолар ҙа, ҡартатай-ҡартәсәй (әсәйем яғында олатай-өләсәй тейҙәр) менән ашыҡ-бошоҡ һөйләштеләр ҙә, китеп тә барҙылар. Улар кире уйлап ҡына ҡуймаһын, тип ашыҡтылар, буғай. Тыңлағыҙ, шаярмағыҙ, эш боҙмағыҙ, фәлән дә фәсмәтән, тигән һүҙҙәре генә һауала эленеп тороп ҡалды. Беҙ дүрт малай бер урында тапанышып, аптырашып тороп ҡалдыҡ.**



Үҙебеҙ менән таныштырып үтәйем әле. Мин Хаммат булам. Миңә ун ике йәш. Ҡустымдың исеме Самат. Теге ике ҡусты минең бер туған түгел. Улар атайымдың бер туған ҡустыһының "бөркөттәре". Беҙгә ике туған була улар. Исемдәре Булат һәм Ибраһим. Шуныһы ҡыҙыҡ, ауыл малайҙары беҙгә үҙ исемебеҙ менән өндәшмәне. Беҙгә ҡушамат тағып бөттөләр. Икенсе көнөнә үк тигәндәй Самат ҡусты Самокатҡа әйләнде. Булат ҡустыға килешле генә Болт ҡушаматы тағылды. Ибраһим ҡустының исеме бер аҙ ҡыҫҡартылды. Ул хәҙер Ибрай. Ваҡыты менән Ибрашка тип тә ҡуялар. Ә бына миңә ҡушамат таба алмай бер булдылар... тип маҡтанып булмай. Ауыр булһа ла әйтергә тура килә инде. Мин Хамматтан Хоботҡа әйләндем. Тәүҙәрәк бер аҙ үпкәләп тә йөрөлдө. Әммә тиҙ өйрәндек. Баҡтиһәң, ауыл малайҙары ла мулла ҡушҡан исемдәр менән йөрөмәй икән. Һәр береһенең үҙ ҡушаматы булып сыҡты.

Былары, әлбиттә, аҙаҡ булды. Ә әле беҙ тапанышып урамда торабыҙ. Ярай әле ҡартәсәй ихлас. Ике ҡулдарын ике яҡҡа йәйеп, беҙҙең эргәгә йүгереп килеп тә етте. Һәр беребеҙҙең арҡаһынан яратып-һөйөп сыҡты. "Собханалла-собханалла, күҙ теймәһен, ҡалай үҫеп, ҡалай ҙурайып киткәнһегеҙ, арҡағыҙҙан һөйөргә буй ҙа етмәй", - тип ах та ух килде. Ситкәрәк китеп, бот сабып беҙгә һоҡланып торҙо. Унан тағы йүгереп килеп, арҡаларҙан һөйөп-яратып алды. Шунан саҡ иҫенә килде. "Бәй, нишләп былайтып урамда торабыҙ. Әйҙәгеҙ, балаҡайҙарым, әйҙәгеҙ өйгә", - тип өйгә ҡыҫтаны. Ә бына ҡартатай бер аҙ ҡырыҫыраҡ икән. Ҡул биреп кенә күрешеп сыҡты. Усы ҙур, ҡаты, ҡытыршы. Унан ниндәйҙер ҡатылыҡ, шул уҡ ваҡытта ниндәйҙер йылылыҡ килә. Ошо устары менән арҡанан бер яратып алһасы. Моғайын, ҡулы төшөп ҡалмаҫ ине. Юҡ, улайтманы ҡартатай. Ҙур-ҡаты ҡулдары менән беҙҙең бәләкәс-йомшаҡ ҡулдарҙы ҡыҫты ла - вәссәләм.

Беҙ бер-беребеҙҙе этә-төртә ҡыйыуһыҙ ғына өйгә инәбеҙ. Ҡартатай менән ҡартәсәй ике яҡлы өйҙә йәшәй икән. Өйҙәре, үҙҙәре әйтмешләй, алты мөйөшлө. Нишләп улай атайҙарҙыр инде. Миңә ҡалһа, өйҙөң мөйөшө һигеҙ. Ингән яҡта дүрт мөйөш, төп яҡта дүрт мөйөш. Һигеҙ мөйөш килеп сыға. Бер ҙә алты түгел. Был турала "һорашып-аңлатып" алырға уй бар ине. Ҡартатайҙың уйсан ҡараштарын күреп, тыйылып ҡалынды. Шуныһы күҙгә ташлана: өйҙә өҫтәл-ултырғыс юҡ кимәлендә. Төп яҡта ла, был яҡта ла ҡалын таҡтанан эшләнгән ҡаты урындыҡ.

Шул арала: "Юлда асығып-сарсап килгәнһегеҙҙер инде, ә мин һеҙҙе һүҙ менән әүрәтеп тик йөрөйөм", - тип ҡартәсәй алғы яҡтағы урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп ебәрҙе. Күп тә үтмәй, уға боҫрап самауыр ҙа килеп ултырҙы. Ашъяулыҡтың ҡап уртаһына тәмле еҫтәр сығарып, картуфлы түңәрәк таба урын алды. Урындыҡтың түр яғынан ҡартатай ултырҙы. Ул аяҡтарын йәтеш кенә бөкләп ултырҙы ла, нимәлер уҡып, битен һыйпап ҡуйҙы. Беҙ бар хәлебеҙсә ҡартатай һымаҡ ултырырға тырыштыҡ. Әммә булдырып булманы. Былай ултырһаң да уңайһыҙ, тегеләй ултырһаң да уңайһыҙ. Бөксәңлеге сығып, нисек етте шулай ултырып сәй эстек. Тамаҡ туйҙы, уның ыңғайына йоҡо ла баҫты. Быны күрепһиҙеп торған ҡартәсәй өтәләнеп төп яҡҡа сығып китте. Күп тә үтмәй, унан килеп сыҡты ла: "Балаҡайҙар, урын һалдым. Ятығыҙ, ял итегеҙ. Туйғансы йоҡлағыҙ. Иртәнге сәйгә үҙем уятырмын", - тине. Ҡартәсәйгә ҡарап, уға бер аҙ аптырап ҡуйылды - үтә тиҙ һалды түгелме ул урынды! Әллә алдан уҡ урын һалып ҡуйҙымы икән? Күмәкләшеп, төп яҡҡа сығабыҙ. Ҡустылар менән йылмайышып ҡуябыҙ. Баҡтиһәң, ҡартәсәйҙең урын һалыуы бик ябай икән. Урындыҡҡа түшәлгән кейеҙ башына оҙон толоп һалынған. Быныһы "оҙон" яҫтыҡ була инде. Һәм күмәгебеҙгә оҙон бер юрған. Шуның менән урын һалыу - вәссәләм. Былай бер ҙә йоҡлаған юҡ ине әле. Алдан уҡ әйтеп ҡуйыйым әле, былай йоҡлау уңайлы икән. Ҡартәсәй әйтмешләй, тәгәрәп йөрөп йоҡлайһың. Күп тә үтмәй, беҙ әүен баҙарына киттек. Тәүге көн ошолай тамамланды.

Икенсе көнөнә таң менән уяндым. Стеналағы ҙур түңәрәк сәғәткә күҙ һалам. Һигеҙ тулып килә. Торорға ваҡыт, ҡустыларҙы ла уятырға кәрәк. Кешелә көн буйына йоҡлап ятып булмай ҙа инде. Әллә нимә уйларҙар. Ҡустыларҙы төрткөсләй генә башлағайным, ҡартәсәсәй түрбаштан өтәләнеп килеп тә сыҡты. "Йоҡлаһындар, балам, йоҡлаһындар. Уятма. Үҙең дә йоҡла. Һеҙ бит йыл буйы уҡып арығанһығыҙ. Ял итегеҙ, йоҡлағыҙ", - тигәс, кире яттым. Тора-бара ойоп киткәнмен. Икенсе уянғанда ун бер тулып килә ине. Бына хәҙер ҡустыларҙы ла уятырға була. Беҙҙең тороуҙы ҡартәсәй тәмле сәй менән көтөп торған икән. Рәхәтләнеп сәй эсеп алдыҡ. Хәҙер ни эшләргә? Ҡартәсәй беҙҙе көсләп йылға буйына ебәрҙе: "Барығыҙ, барығыҙ һыу буйына. Һаҡмар буйын күреп килегеҙ, малайҙар менән танышығыҙ, ҡыҫҡаһы, ял итегеҙ". Аптырап, Һаҡмар буйына юл тоттоҡ. Ул ауыл эсенән ағып үтә, ә балалар ауылдан ситтәрәк урынында һыу инә икән. Унда бер килке малай-ҡыҙҙарҙың һыу ингәнен ҡарап торҙоҡ. Тора-бара беҙ ҙә һыуға төштөк. Йылы ғына икән былай. Һыу инеп алған булдыҡ, ҡомда бер килке уйнап ултырҙыҡ. Ауыл малайҙарының береһе, һеҙҙең телегеҙ бармы ул, тип һорағас, Булат ҡусты телен күрһәтеп, уларҙы көлдөрөп алды. Ҡыҫҡаһы, аҙна-ун көн үтеүгә, беҙ ауыл малайҙары менән тулыһынса танышыпдуҫлашып, улар менән бергә һыу инеп, ҡояшта ҡыҙынып, ҡап-ҡара малайҙарға әйләнеп бөттөк. Көндәр бер-береһенән әллә ни айырылмай тиерлек үтә торҙо. Бындай яллы рәхәт тормошҡа беҙ тиҙ өйрәндек. Сәғәт ун бергә хәтлем йоҡлайбыҙ, дүрткә хәтлем йылға буйындабыҙ, өйгә ҡайтып сәй эсеп, әҙерәк ял итеп алабыҙ ҙа тағы йылға буйына сабабыҙ. Ә бына ваҡыты менән малайҙар йылға буйында булмай ҙа ҡуя. Нимә эшләйҙәрҙер инде? Быны мин аҙаҡ ҡына аңланым...

Бына ошондай яллы тормош кинәт бер көн үҙгәрҙе. Ҡартәсәйҙең күрше ауылда йәшәгән ҡыҙы әллә бәпәй алырға киткән, әллә бәпәй алып ҡайтҡан. Ҡыҫҡаһы, ҡартәсәй шуларҙың донъяһын ҡарашырға китте. "Балаларҙы матур итеп ҡара, асыҡтырма, ваҡытында ашат, иртә уятма, туйғансы йоҡлаһындар, улар ял итергә килгән", - тип, ҡартәсәй

*✓ Һеҙ төүге аҙымды яһанығыҙ һәм тәнегеҙҙе лә, аңығыҙҙы ла көсһөҙләндерергә өйрәндегеҙ. Хәҙер инде беҙ Ижадсы, Булдырыусы тип атаған үҙегеҙҙәге илаһи көс менән аралашырға ярҙам итәсәк аҙымдар хаҡында белергә әҙерләнегеҙ.*

ҡартатайға тылҡып-тылҡып китте. Уныһы ауыҙ сите менән генә көләмһерәп, баш ҡағып ризалашып торҙо. Әммә тормош ҡартәсәй уйлағанса ғына барманы. Өс-дүрт көндән ҡайтырмын, тигән ҡартәсәй өс аҙна үтеүгә саҡ ҡайтып йығылды. Минең өсөн ҡартәсәйһеҙ үткән ошо өс аҙна тотош тормош һабағы булды, буғай...

Ә әлегә беҙ моңһоу ғына ҡартәсәйҙе оҙатып ҡалдыҡ. Ул күҙҙән юғалыу менән донъя етемһерәп ҡалғандай тойолдо. Күңелһеҙ генә киске сәй эсеп алдыҡ та йоҡларға яттыҡ. Ҡартатай ауыҙ сите менән көләмһерәп, беҙгә һынамсыл ҡарап торҙо ла, "Иртәнге сәй теүәл һигеҙҙә", тип алғы яҡҡа сығып китте. "Нисек инде һигеҙҙә?" тип, мин аптырап ҡуйҙым. Ҡустылар миңә, мин уларға һырына биреп йоҡлап киттек.

Иртәнсәк, әлбиттә, беҙ ун берҙәр тирәһендә торҙоҡ. Әммә наҙлы тауыш менән уятыусы, өгөтләп сәйгә саҡырыусы кеше юҡ. Нишләйһең, үҙебеҙ яйлап торҙоҡ. Сәй эсергә, тип алғы яҡҡа үттек. Әммә... ашъяулыҡ йәйелмәгән, самауыр юҡ, ҡыҫҡаһы, бер нәмә лә юҡ. Был ни ғәләмәт тағы? Аптырап, ишек алдына сығам. Ҡартатай баҡса яғында нимәлер эшләп йөрөй.

- Ҡартатай, беҙ торҙоҡ!

Ул ҡулындағы көрәген кәртәләү буйына һөйәй һәм һәлмәк аҙымдары менән миңә табан ыңғайлай.

- Һаумы, улым. Торғанһығыҙ икән. Асыҡҡанһығыҙҙыр инде. Иртәнге сәй юҡ бит әле. Мин һигеҙгә әҙерләгәйнем. Нишләптер һеҙ торманығыҙ...

Әй, әттәгенәһе, һаулыҡ һорашыр кәрәк тә инде. Һаулыҡ һорашыу ауылда ҡыҙыҡ былай. Көнөнә биш тапҡыр осрашһалар, биш тапҡыр, ун тапҡыр осрашһалар, ун тапҡыр һаулыҡ һорашалар. Етмәһә, ҡул биреп. Иртәгә һаулыҡ һорашырға онотмаҫ кәрәк. Ә иртәнге сәй ысынлап булмаҫ микән? Мин өмөтлө ҡараштарымды ҡартатайға төбәйем. Шунан төңөләп ҡуям. Иртәнге сәй булмай! Ярай, юҡ икән, юҡ. Ҡайғырырға кәрәкмәй. Төшкөһөн ныҡлап ашарбыҙ әле. Ә хәҙер Һаҡмар буйына! Беҙ күмәкләп йылға буйына ҡарай сабабыҙ. Ҡартатайҙың ҡыҫҡыра биреберәк әйткән һүҙҙәре бер ҡолаҡтан инде, икенсеһенән сыҡты, тигәндәй.

- Төшкө сәй теүәл икелә!

Ә беҙ, ғәҙәттәгесә, дүрт тулып үткәс ҡайттыҡ. Ғәләмәт асыҡтырҙы. Былай асыҡҡан-һыуһаған юҡ ине әле. Әммә ашъяулыҡ йәйелмәгән, самауыр боҫрап ултырмай. Ҡартатай баҡсала нимәлер эшләп йөрөй. Мин өмөтлө тауыш менән уға ҡысҡырам.

- Ҡартатай, беҙ ҡайттыҡ!

Ул көрәген ҡуйып, беҙгә табан ыңғайлай.

- Эй, балаҡайҙарым ҡайтҡан да инде (тауышы ихлас та һымаҡ, шул уҡ ваҡытта мыҫҡыллы ла һымаҡ). Асығып ҡына бөткәнһегеҙҙер инде (эскә йылы йүгерә). Мин һеҙҙе теүәл икелә ун минут буйына көтөп ултырҙым. Ҡайтманығыҙ шул (унын тауышында үкенес тойғолары сағылып ҡала). Хәҙер һеҙгә киске сәйҙе көтөргә тура килә инде, ә ул туғыҙҙа ғына. Хәл юҡ, түҙәһегеҙ инде... - Беҙ аптырап, ергә ултырабыҙ, дөрөҫөрәге, ултыра төшәбеҙ. Тәүге уй - ҡасан ғына ҡартәсәй ҡайта инде! Исмаһам, туйғансы ашап алыр инек. Икенсе уй - әлегә нисек булһа ла тамаҡҡа ҡапҡылап алырға кәрәк. Астан үлеп булмай ҙа инде. Минең уйҙарҙы һиҙгән һымаҡ, ҡустылар иплләп кенә өйгә инеп сыға. Әммә уларҙың тауыш бошонҡо.

- Өйҙә бер нәмә лә юҡ. Ҡартатай бар нәмәне йәшергән!

Булмаҫ, тип уйлап ҡуям мин. Үҙем инеп китәм. Үәт әй, ысынлап та өйҙә бер нәмә лә юҡ. Кейеҙ аҫтында буш кәнфит тышы ғына ята. Тимәк, ҡартатай икмәк-фәләнде йәшергән. Ә ҡайҙа? Моғайын, аласыҡҡалыр. Миңә ҡалһа, башҡа йәшерерлек урын юҡ. Өйҙән сығып, аласыҡҡа күҙ һалам. Әммә уның ишегендә эт башындай (юҡ, ат башындай) йоҙаҡ тора. Күҙҙәр йоҙаҡты күрә, ә мейе ҡартатайҙың ҡылығын аңламай - аҙыҡ йәшерә торған замана түгел дә инде! Етмәһә, ейәндәрҙән! Ҡартәсәй генә ҡайтһын әле! Шул арала Ибраһим ҡусты аласыҡтың бер аҙ бушай төшкән таҡтаһын шәйләп ала. Уны шаҡара биреп, ҡулын тығырға маташа. Күмәкләгән яу ҡайтарған, тигәндәй, хәҙер беҙ уны күмәкләп шаҡарһаҡ... Әммә беҙҙе, моғайын, ҡартатай ситтән күҙәтеп торғандыр. Шул арала ул сүкеш-сөйөн тотоп, беҙҙең эргәгә килеп тә етә.

- Эй, ошо донъяны... Әҙерәк кенә ҡарамаһаң, емерелергә генә тора. Ярай әле уландарым маладис. Бигерәк ярҙамсылдар...

Ул шулай һөйләнән-һөйләнә, беҙ аҡтара башлаған таҡтаны ҡатып ҡуя. Башҡаларын тарта биреп, уларҙың ныҡлығын самалай. Ышанысһыҙҙарын өҫтәмә нығытып ҡуя. Шунан ул ҡабаланмай ғына баҡса яғына йүнәлә. Беҙ аптырашып тороп ҡалабыҙ. Мин шул саҡ ныҡлы ҡарарға киләм.

- Кискеһен үс итеп ашамайбыҙ!

Әйтерһең дә, минең һүҙҙәр бушлыҡҡа оса. Асыҡтырған да, һыуһатҡан да. Нисек инде ашамайһың да, нисек инде сәй эсмәйһең! Ныҡлы ҡарар иртәнге томан һымаҡ таралып, үҙенән-үҙе юҡҡа сыға. Нисек етте шулай киске туғыҙҙы еткерҙек. Һыу инеү ҡайғыһы китте. Ә шулай ҙа ҡартатай маладис. Теүәл әйткән ваҡытына ашъяулыҡ йәйҙе. Беҙ шунда уҡ тыпырлашып уның тирәләй ултыра һалдыҡ. Уның нимәлер уҡып, бит һыйпағанын саҡ көтөп алдыҡ та, кемуҙарҙан ҡабаланып ашай башланыҡ. Картуф бер аҙ тоҙлораҡ икәнен туя төшкәс кенә аңланыҡ, буғай. Ҡаймаҡ һөртөлгән, уның өҫтөнә бер аҙ шәкәр һибелгән икмәк бигерәк тәмле булды. Әммә ҡартатай артығын бирмәне. Булғанын ныҡлап сәйнәп ашағыҙ, тине лә ҡуйҙы. Тамаҡ туйғас, йоҡо баҫты. Нисек етте шулай урындыҡҡа сығып тәгәрәнек. Ҡартатайҙың тауышы тоноҡ ҡына булып ишетелеп ҡалды.

- Иртәнге сәй һигеҙҙә!

Әммә беҙ иртәнге сәйҙән тағы ҡолаҡ ҡаҡтыҡ. Ни бары бер сәғәткә. Әммә беҙ иртәнге сәйгә өмөт итмәнек. Булмаҫы билдәле бит инде. Дүртәүләшеп тышҡа сығабыҙ. Ҡартатай баҡса яғында эшләп йөрөй ине.

- Һаумы, ҡартатай.

Беҙ ҡул биреп күрешәбеҙ. Ҡартатай картуф күмә икән. Ул беҙгә лә тәпкеләр әҙерләп ҡуйған, имеш. Икәүһен күршеләрҙән алып торған.

- Уландар, һәр берегеҙгә икешәр рәт. Күмеп бөткәс, миңә күрһәтәгеҙ.

Үҙебеҙгә ҡалһа, хатта матур итеп күмдек. Әммә ҡартатай һәр төптө ентекле ҡарап сыҡты. Насар күмелгәндәрен киренән күмдерҙе. Ҡара әле, эш мәлендә ваҡыт ҡалай тиҙ үтә икән. Шул арала ваҡыт ун бер ҙә булып киткән.

- Бына хәҙер һыу инеп килһәгеҙ ҙә була. Төшкө сәй икелә!

Баҡтиһәң, башҡа малайҙар ҙа ошо мәлгә һыу инергә килә икән. Тәмләп һыу индек тә өйгә табан саптыҡ - төш мәле етеп килә бит! Беҙ теүәл икелә шөрөлдәтеп сәй эсеп ултыра инек. Ҡартатай әтмәләгән бутҡа ла апаруҡ тәмле булды. Төштән кире ятып булманы. Ҡартатай беҙгә эш әҙерләп ҡуйған икән.

- Уландар, картуф күмергә! Хәҙер дүртешәр рәт!

Эштән һуң йүгереп кенә барып һыу инеп килдек. Хәҙер беҙҙең көндәр ошолай һәүетемсә генә үтә торҙо. Ә эштәр бигерәк күп булып сыҡты.

- Быҙауҙы эҙләп алып ҡайтырға!
- Ҡаҙҙарҙы һыуға ҡыуырға!
- Түтәлгә һыу ҡойорға!
- Ҡый үләндәрен йолҡорға!
- Тауыҡтарға ем һалырға!
- Йомортҡалар йыйып алырға!
- Ҡаҙҙарҙы кире ҡыуып алып ҡайтырға!
- Иҙәнде һеперергә!
- Һарайҙы таҙартырға!
- Һәм башҡаһы, һәм башҡаһы, һәм башҡаһы!

Ошо эштәрҙе эшләп йөрөгән мәлдә бая һыу инеп йөрөгән малайҙар осрай. Уларҙың ҡайһыһы быҙау ҡыуып алып ҡайтып бара, кемеһе ҡаҙҙарҙы йылғаға ҡыуа. Шул арала кис була. Көтөү ҡайта. Беҙ ҡартатай менән ҡапҡаны асып, һыйырҙы ҡаршы алабыҙ. Ярай әле уныһы, исмаһам, тура ҡайта. Ҡайтмай ыҙалатҡан һыйырҙар ҙа була икән. Шул арала күрше апай һыйырҙы һауып сыға. Хәҙер беҙ сәй мәлендә лә кемуҙарҙан йүгереп йөрөп ҡартатайға ярҙамлашабыҙ. Кемдер самауырға һыу алып килә, кемдер усаҡҡа ут яға. Аҙаҡ күмәкләшеп ултырып сәй эсәбеҙ. Әйтмәһәм дә булалыр инде, теүәл үҙ ваҡыттарында. Кис йоҡлап киткәнебеҙҙе һиҙмәй ҙә ҡалабыҙ. Ҡартатай беҙҙе кисен арҡанан яратып ала. Уның яратыуы бөтөнләй башҡа икән. Бер көн мин әйтә ҡуйҙым:

- Ҡартатай, мине иртәнсәк һыйыр ҡыуған мәлдә уятырһың әле...

Икенсе көн ул мине бик иртә, таңғы алтыла уятты. Көтөүҙе әйтәм, бигерәк иртә, томан таралмаған мәлдә үк китә икән. Былай иртә ғүмерҙә лә торған юҡ ине. Беҙ күрше апайҙың һыйыр һауғанын тынис ҡына көтөп торҙоҡ. Аҙаҡ һыйырҙы һәм тананы көтөүгә бергә ҡыуырға киттек. Ара-тирә таныш малайҙар осрай. Ҡулды бер аҙ өҫкә күтәрә биреп, уларҙың сәләмдәрен ала барам. Ошо көндән башлап миңә һыйырҙы көтөүгә ҡыуыу бурысы йөкмәтелеп ҡуйылды.

Ошолай һәүетемсә генә йәшәп ятҡан мәлдә ҡартәсәй ҡайтып төштө. Бер нисә көн үткәс, ул бер ҡартатайға, бер беҙгә ҡарап, бот сабып аптыраны - нишләттең һин балаларҙы? Әрләнеңме! Фәлән дә фәсмәтән! Аҙаҡ әйтеп ҡуйҙы:

- Ҡартатайығыҙға рәхмәт инде. Бынамын тигән ейәндәр тәрбиәләп ҡуйған. Ошолай егәрле генә булығыҙ инде.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ярлылыҡтан - байлыҡҡа

Гавайя аҡыл эйәләренә - кахундарға аңдың көсө мәғлүм була. Аңлау сиктәренән сыҡҡан аң кимәлен улар "унихипили" тип атаған. Улар уны үҙ-үҙеңдәге Булдырыусы, барлыҡ киңлекте тултырыусы ҙур көскә эйә Ижадсы тип атаған. Был белем яҙма сығанаҡтарҙа теркәлмәгәнлектән, бөгөнгө гавайялыларҙа киң таныныу тапҡан тикшеренеүҙәргә нигеҙләнергә ҡала. Унихипилиҙы "илаһи көс менән бәйләнеш өсөн үҙенсәлекле канал" тип атаусы мәрхүмә Мэри Фукуи шундай абруйлы кешеләрҙең береһе була.

Был канал тураһында друидтар ҙа белгәндер. Уларҙың "мөғжизәһе" ҡул етеҙлеге һәм оптик күҙ быуыуҙар сигенән сығып, иҫ киткес матди сағылыш таба.

Быйдай концепция "Нью Эйдж" йүнәлешендә тикшеренеүҙәр алып барған ғалимдарҙың эшендә раҫлау таба. Улар был рухи каналды кеше мәнфәғәте өсөн ҡулланырға саҡыра. Улар раҫлауынса, миллионлаған кеше рухи инаныстары менән ҡанатланып, махсус бойороҡ менән аңға тәьҫир итеүсе ябай көсһөҙләнеү ярҙамында үҙҙәрендәге илаһи көстө файҙаланыу мөмкинлеге ала ала.

Беренсе бүлекте уҡып, һеҙ төүге аҙымды яһанығыҙ һәм тәнегеҙҙе лә, аңығыҙҙы ла көсһөҙләндерергә өйрәндегеҙ. Хәҙер инде беҙ Ижадсы, Булдырыусы тип атаған үҙегеҙҙәге илаһи көс менән аралашырға ярҙам итәсәк артабанғы ябай аҙымдар хаҡында белергә әҙерләнегеҙ. Ҡасандыр был бушҡа ваҡыт уҙғарыу тип һаналған. Әммә ул - кеше аңына үтеп инеү мөмкинлеген биргән иң йоғонтоло ысул. Ул өндәге төш тип атала.

Энцефалограмма мейенең пульстарын теркәй. Улар - аңдың торошо тураһында мәғлүмәт илтеүсе электр тулҡындары. Әлеге ваҡытта мейегеҙ тулҡындарының йышлығы секундына 14-20 тирбәлеүгә тиң. Әгәр беренсе бүлектә яҙылғанса, күҙегеҙҙе йомоп, көсһөҙләнһәгеҙ, мейе тулҡындары йышлығын секундына 7-14-кә тиклем кәметә алаһығыҙ. Был дәүмәл мейенең альфа-тулҡындары йышлығы тип атала. Тап ул өндәге төштө күрһәтә. Тап ул йоҡлағандағы төшкә лә тап килә.

Һеҙҙең әлеге хәл-тороштағы әүҙем мейе тулҡындары йышлығы бета-йышлыҡ тип атала. Беҙ йоҡлап киткәндә мейе тулҡындары йышлығы альфа кимәленән дә түбән, секундына 4-7 тирбәлешкә тиклем төшә (был кимәл "тета" тип атала). Ул тағы ла түбәнерәк төшөп, дельта-кимәлгә еткәс, беҙ тәрән йоҡоға талабыҙ. Тета һәм дельта кимәлдә беҙ төш күрмәйбеҙ. Әммә төнөн һәр сәғәт ярымдан һуң мейебеҙ тулҡындарының йышлығы арта, һәм ул альфа-кимәлгә еткәс, беҙ төш күрәбеҙ. Төнөн даими төш күреү ниндәйҙер кимәлдә өндәге төш менән уртаҡ. Бик йыш улар беҙ Ижадсы тип атаған сикһеҙ аң сығанағы менән һуғарылған була.

Күп йылдар матдәнең тәбиғәтен өйрәнеүсе физик Нильс Бор атомдың яңы моделен эшләү өсөн кәрәкле мәғлүмәтте төшөндә ала. Был төш уға Нобель премияһын килтерә. Был - дан ғына түгел, аныҡ аҡса ла. Төшө уны бай яһай.

Төшөндә инсулинды лаборатор юл менән алыу ысулын күргән сэр Фредрик Грант Бантигҡа ла төшө байлыҡ килтерә.

"Трель дьявола" сонатаһын ижад иткән Джузеппе Тартини төшөндә шайтанға скрипкаһын бирә. "Мин уның нисек ҙур оҫталыҡ менән иҫ киткес матур соната уйнағанын ишеттем. Һоҡландым..." - ти ул аҙаҡ. Уянғас, композитор скрипкаһын алып, төшөндә ишеткән йырҙы ҡабатларға тырыша. Яңы тыуған әҫәр уның төшөндә ишеткән көй кеүек матур яңғырамай, шулай ҙа уның барлыҡ тормошоноң иң юғары ҡаҙанышы була.

Быйдай төштәр ниндәйҙер кимәлдә өндәге хыялдар менән оҡшаш. Икеһе лә ижади илһамдың сығанағы булыуы мөмкин. Төндәге төштәр ниндәйҙер дәрәжәлә үҙлекле. Өндәге төш менән идара итеп була һәм улар маҡсатҡа йүнәлтелгән. Әммә улар икеһе лә ысынбарлыҡты алдан белдерә.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

СР ДЕЛА ВАЖНЕЕ СЛОВ!
СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ ПАТРИОТЫ ЗА ПРАВДУ
№3 В избирательном бюллетене
Выборы депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№16 Мансурову Ренату Нуриахметовичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

СР ДЕЛА ВАЖНЕЕ СЛОВ!
СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ ПАТРИОТЫ ЗА ПРАВДУ
№3 В избирательном бюллетене
Выборы депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№14 Счастной Ирине Игоревне** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

№10 округ
Выборы депутатов Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва
СР СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ ПАТРИОТЫ ЗА ПРАВДУ
МОЙ ОКРУГ – МОЯ ОТВЕТСТВЕННОСТЬ
ГАЕТКУЛОВ Эмиль



Тел. 8 (347) 257 - 97 - 97
Адрес предвыборного штаба:
Ул. Лесотехникума 24/1
19 СЕНТЯБРЯ
СДЕЛАЙ ПРАВИЛЬНЫЙ ВЫБОР

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№10 Гаеткулову Эмилю Наилевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

УЛЬФАТ ХУЖАХМЕТОВ
Голосуй за себя
Голосуй за КПРФ!



Хужахметов Ульфат Минисламович, 28.06.1975 г. р. кандидат в депутаты в Совет городского округа город Уфа по одномандатному избирательному округу №15, выдвинут Коммунистической партией Российской Федерации.

Директор ООО "Инжиниринговo-строительная компания "Сартай". Окончил в 1998 году БашГУ, в 2009 - УГНТУ.

Профессиональный строитель, руководитель с 20-летним стажем в сфере строительства и ремонта объектов топливно-энергитического комплекса России.

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№15 Хужахметову Ульфату Минисламовичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"



ФАЙРУЗА ЛАТЫПОВА

**"Врач от бога" - так называют Файрузу Мунаваровну Латыпову мамы больных детей.**

На протяжении 18 лет она работала с самыми сложными детьми нашей республики в отделении хирургии новорожденных РДКБ. Тысячи новорожденных детей после тяжелых операций прошли через ее руки и сердце. В мае 2016 года она открыла первый в России центр абилитации для детей группы риска (недоношенные, дети с родовыми травмами, получившие лечение в отделении реанимации).

Благодаря ей созданы службы абилитации в Белорецке и Нефтекамске. Глобальная цель - внедрение служб абилитации и ранней помощи в учреждениях здравоохранения, образования и социальной защиты Уфы и всей республики.

Счастливая и здоровая жизнь каждого человека, его семьи должна стать целью и главным вопросом органов государственной власти. "Без здоровой нации у России нет будущего!" - говорит Файруза Мунаваровна.

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№12 Латыповой Файрузе Мунаваровне** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

ИЛЬДАР ХУСНУТДИНОВ



Хуснутдинов Ильдар Фанилевич родился 20 июля 1962 года в г. Уфа.

Образование высшее, окончил Уфимский филиал Московского технологического института.

Вся жизнь Ильдара Фанилевича связана со спортом, его поддержкой и развитием. Мастер спорта СССР по самбо, мастер спорта международного класса по дзюдо, обладатель 6 дана по дзюдо с 1983 года занимается тренерской работой. Основатель и руководитель "Олимпик парка" – горнолыжныго комплекса для взрослых и детей.

За активную жизненную позицию и общественную деятельность имеет множество наград.

Многодетный отец, тренер, меценат, социальный предприниматель Ильдар Хуснутдинов

выдвигаясь кандидатом на выборы в Совет городского округа г. Уфа по одномандатному избирательному округу №8 ставит такие приоритеты:

- развитие социальной инфраструктуры района;
- контроль справедливости тарифов ЖКХ;
- развитие детского спорта и активного отдыха для старших через создание сети доступных инновационных спортклубов;
- борьба с формальным подходом в решении вопросов ветхого жилья, необеспеченных семей, незащищенных пожилых людей.

Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№8 Хуснутдинову Ильдару Фанилевичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

КӘҢӘШ-ТӨҢӘШ

# ҠАРБУЗ ХАҠЫНДА НИ БЕЛӘҺЕҢ?

Бешкән ҡарбузға сиртkәндә, зыңҡылдаған тауыш сығара. Уның тышы шыма һәм тығыҙ була - тырнаҡ менән сыйып булмай, ә бер яҡ ҡабырғаһында ус аяһылай һары тап күрергә мөмкин. Ҡайһы берәүҙәр, бешкән татлыҡайҙың сонтор һабағы кипкән булырға тейеш, тип яңылыша, ә ул - йәшел төҫтә. Тәмлекәс шарҙың һабаҡҡа ҡаршы яҡ "ҡотоп" урынында уның сәскәһе лә була икән, ләкин ҡарбуз бешкәс, ул өҙөлөп төшә. Әгәр уның элекке урыны - эҙе киң икән, был, йәнәһе лә, инә ҡарбуз һәм ул татлыраҡ була, тиҙәр. Һәйбәт ҡарбуздың эсендәге йомшағындағы епсәләр аҙ һәм асыҡ төҫтә була. Емештең сифатын шулай тикшереп ҡарарға мөмкин: уның йомшаҡ киҫәксәһен бер стакан һыуға һалғас, һыу буйраҡланһа, тимәк, был яҡшы, ә ҡыҙыл төҫкә инһә, һеҙгә сифатһыҙ емеш эләккән.

Тағы ла. Күптәр, бешкән "шар"ҙы ике ҡуллап ҡыҫҡанда, шытырлаған тауыш сығара, тип тә яңылыша, ә ул бер тапҡыр ғына шытырлай. Тимәк, кемдер уны ҡыҫҡылап ҡарап та алмай китә икән, икенсе һатып алыусы өсөн был ысул эшләмәйәсәк.

Шуны ла белеп ҡуйығыҙ: ҡарбуздың ҡабығынан алып емеш төштәренә тиклем бик файҙалы: унда аскорбин кислотаһы менән магний башҡа төр ташҡабаҡлыларға ҡарағанда 20 тапҡырға күберәк, ҡарбуз шул төркөмгә ҡарағанлыҡтан, уны еләк (ягода) тип түгел, ә емеш (плод) тип атау дөрөҫ булыр. Шул уҡ ваҡытта ҡарбуз бик тәмле десерт ул, ләкин тәмлекәс һимертмәй, сөнки унда калория бик аҙ: 100 грамм емештә ни бары 25 ккал. Был витамин һәм минералдар тупланмаһында A, B1, B6, B9, C, E, H, PP витаминдары һәм калий, кальций, магний, тимер, фосфор, натрий күп. Ул бөйөр-бауырҙы таҙарта, бәүел һәм үт ҡыуҙыра, хатта ки бөйөрҙәге ҡом-ташты (ваҡтарын) сығара, ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә, матдәләр алышыныуын тиҙләтә, - бер һүҙ менән - организмды нығыта. Уны фәҡәт шәкәр һәм бөйөр сирлеләргә генә самалап ашарға ҡушалар. Файҙалы майҙарға бай булған ҡарбуз төштәренән әҙерләнгән ҡарбуз майын "кеҫәләге дауахана" тип йөрөтәләр икән. Өй шарттарында шундай уҡ файҙаға эйә эсемлек тә яһарға була, бының өсөн ҡарбуз төштәрен киптереп, ҡәһүә тартҡыста ваҡлағас, ошо онтаҡты ҡалаҡлап, һыуға ҡушып эсергә кәрәк.

Татлы емештән шундай ризыҡтар әҙерләргә мөмкин:

**Ҡарбуз балы:** бер нисә емештең йомшағын төштәренән таҙартып, иләк аша үткәрергә һәм әкрен утта 6-7 сәғәт талғын ғына ҡайнатҡас, шыйыҡса ҡуйыра һәм ҡара-көрән төҫкә инә. Уға шәкәр өҫтәргә кәрәкмәй, шуға ла бик файҙалы һәм организмды вирустан һаҡлаусы бал килеп сыға.

**Ҡарбуз кеүәҫе:** 1 кг ҡарбуз ҡабығына 100 г шәкәр һәм 1 ҡалаҡ ҡаймаҡ ҡушып, 3 литрлыҡ банкала һыуыҡ һыу һалып бутағас, банка ауыҙын марля менән ябып, ике аҙна ҡараңғы урында тотҡандан һуң эсергә.

Рустам Халиуллин
зарегистрирован кандидатом в депутаты Совета городского округа города Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу № 13
РОССИЯ • ТРУД • НАРОДОВЛАСТИЕ • СОЦИАЛИЗМ
КПРФ
Пора народу брать власть в свои руки!



Данный агитационный материал опубликован безвозмездно по результатам предоставления бесплатной печатной площади зарегистрированному кандидату в депутаты Совета городского округа город Уфа Республики Башкортостан пятого созыва по одномандатному избирательному округу **№13 Халиуллину Рустаму Дамировичу** согласно статье 65 Кодекса РБ "О выборах"

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

1443 һижри йыл.

| Сентябрь (Мөхәррәм - Сәфәр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалка | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (28) дүшәмбе | 5:04 | 6:34 | 13:30 | 18:23 | 19:53 | 21:23 |
| 7 (29) шишәмбе | 5:05 | 6:35 | 13:30 | 18:21 | 19:51 | 21:21 |
| 8 (1) шаршамбы | 5:07 | 6:37 | 13:30 | 18:18 | 19:48 | 21:18 |
| 9 (2) кесе йома | 5:09 | 6:39 | 13:30 | 18:16 | 19:46 | 21:16 |
| 10 (3) йома | 5:11 | 6:41 | 13:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |
| 11 (4) шәмбе | 5:13 | 6:43 | 13:30 | 18:11 | 19:41 | 21:11 |
| 12 (5) йәкшәмбе | 5:15 | 6:45 | 13:30 | 18:08 | 19:38 | 21:08 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**4-5 сентябрь Премьера! "Приключения доктора Айболита и его друзей"** (К. Чуковский). 11.00, 13.00, 16.00 0+

**9 сентябрь "Сказка о царе Салтане"** (А. Пушкин). 19.00 0+

**11 сентябрь "Буратино"** (А. Толстой). 11.00, 13.00, 16.00 0+

**12 сентябрь "Муха-цокотуха"** (И. Романов). 11.00, 13.00, 16.00 0+

СӘНҒӘТ ДОНЪЯҺЫНДА

# МИҘГЕЛДЕҢ БЕРЕНСЕ КӨНӨ

**Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры коллективы 102-се иждад миҙгеленең тәүге эш көнөн тәбрикләне. Артистарҙың олоһо ла, йәше лә, билдәлеһе лә, өйрәнсеге лә урғылып килеп тулды тамаша залына. Халыҡ һағынышҡан һәм артистәргә хас хисле лә - ҡосаҡлаштылар, үпәсләштеләр, хәл-әхүәл белештеләр. Һәм һөйләштеләр.**



Йыйылыштың инеш өлөшө бер аҙ баҫылғас, театр директоры Иршат Фәйзуллин һүҙ алды һәм барыһын да яңы миҙгелгә аяҡ баҫыу менән ҡотланы.

- Заманалар нисек кенә ҡатмарлы булмаһын, ниндәй генә ауырлыҡтар, һуғыш, афәттәр өҫтөндә лә халыҡтың мәҙәни үҫеше тотҡарланырға тейеш түгел. Һәм театр был тәңгәлдә алғы һыҙыҡта. Беҙ иһә ошо фронт һалдаттары. Бөгөнгә тиклем был бурысыбыҙҙы намыҫ менән атҡарып килдек һәм әлеге башланыр миҙгелде лә халыҡ менән, халыҡ алдында, халыҡ өсөн эшләп, иждат итеп үткәрербеҙ, тип ышанабыҙ, - тине етәксе.

Артабан һүҙҙе театрҙың баш режиссеры Айрат Абушахманов алды. Ул планлаштырылған спектаклдәр һәм ролдәр хаҡында һүҙ алып барҙы. Әлбиттә, уның һөйләгәндәре күберәк һөнәри үҙенсәлектәргә һәм нескәлектәргә ҡоролоп, ул профессия ғилемен белмәгәндәр өсөн аңлашылып та бөтмәне, әммә күп кенә фәлсәфәүи мәғәнәле фекерҙәре күңелгә инеп ултырҙы. Мәҫәлән, "Роль һорай белеүҙә тормай эш, ә һинең әлеге ролгә әҙер булыуыңда тора" йәки "Режиссер һөтлә һыйырҙы һайлай" тигәндәре бик үҙенсәлекле булды.

Артабан коллектив театрға килгән йәш артистар менән таныштьI, уларға нәсихәт һүҙҙәрен әйтте. Яңы миҙгелдә М.С.Щепкин исемендәге Юғары театр училищеһын тамамлаған Айнур Ғәбитов, Илүзә Итекәева, Сабина Кирәева, Лилиә Сәғитова, Таң Хәсәйенов, З.Исмәғилев исемендәге Өфө сәнғәт институтын тамамлап сыҡҡан Айым Сөләймәнова, Гүзәл Хәсәнова ошо коллективта эш башлаясаҡ. Башҡорт театр һәм кино актёры, режиссёр, РСФСР-ҙың атҡаҙанған, Башҡорт АССР-ының халыҡ артисы һәм Салауат Юлаев исемендәге премия лауреаты Олег Ханов йәштәргә былай тине:

- Театрҙа уйнамайҙар, театрҙа тамашасы күңелен әсир итеү өсөн тир түгәләр. Тән менән дә, йән менән дә, аҡыл, көс, рух, оҫталыҡ һәм һәләт менән егелеп хеҙмәт итәләр. Бына шуларға әҙер булһағыҙ - театр һеҙҙе ҡуш ҡуллап ҡабул итә һәм тәрбиәләй. Ә һеҙ халыҡты тәрбиәләйәсәкһегеҙ!

Йыйылыш барышында әске эштәргә ҡағылышлы төрлө һорауҙар, мәсьәләләр тураһында һөйләшелде, гастролдәр расписаниеһы тикшерелде, труппалар бүленеше тураһында һүҙ алып барылды. Билдәләнеүенсә, әле Александр Островскийҙың "Шаяндар" пьесаһын сәхнәләштереүгә әҙерлек бара. Фирғәт Ғарипов балалар өсөн "Серле гиппопотам" спектакле өҫтөндә эшләй.

Олег Ханов Алексей Дударевтың "Кис" әҫәре өҫтөндә эш башлай. Коллектив шулай уҡ татар яҙыусыһы Зифа Ҡадированың әҫәрен уҡыуҙы ойошторған. Шулай уҡ билдәле башҡорт яҙыусыһы Таңсулпан Ғарипованың "Бөйрәкәй" романы буйынса эш дауам итә.

Бер һүҙ менән әйткәндә, яңы миҙгелдең тәүге эш көнө бик эшлекле һәм әүҙем башланды. Беҙ, ошо сарала ҡатнашҡан журналистар, фекер алышыуҙарҙа сығыш яһағандарҙың да һүҙҙәрен ҡәләм осона элдек.

***РСФСР-ҙың, Башҡортостандың һәм Татарстандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Фидан Ғафаровтың һөйләгәне:*** Сираттағы иждат миҙгелен шулай тантаналы асып торабыҙ. Күрәһегеҙ, артистар күмәк булып килгәндәр, йәштәр ут сәсеп тора - бик матур, хатта ки ғорурланырлыҡ күренеш. Уларға шуны әйтке килә: бөгөнгө театрҙа эшләү - ул батырлыҡҡа тиң. Сөнки замана театр системаһы, республика ғына түгел, ил, донъя кимәленән ҡарағанда, бик ҙур талаптар ҡуя. Шундай яңылыҡтар, үҙгәрештәр артынан эйәреп кенә түгел, уларҙың алдынан барыу өсөн милли театр коллективына ниндәй көсөргәнештә йәшәргә кәрәк булғанын аңларға тырышығыҙ. Уңыштар, уңыштар һәм уңыштар ғына теләйем артистарға, театрҙарға.

***Театрҙың йәш артисы Зиләрә Юлтаева һөйләгәндәрҙән:*** Яңы көс, дәрт һәм илһам менән эшкә сыҡтыҡ быуна. Мин шундай теләк һәм маҡсат менән башлайым был миҙгелде - теләһә ниндәй ролдәрҙә лә, образдарға ла бер әҙермен. Пандемия сикләүҙәре, күптәрҙе юғалтыу һәм башҡа күренештәр, нисектер, үҙаңды үҙгәртеп ташланы кеүек. Бөгөн йәшәп ҡалғы, ярһып эшләгә һәм уйҙарҙы тормошҡа ашырғы килә. Шулай итергә булдым да...

***Башҡортостан Республикаһының халыҡ артисы Гүзәл Маликова шулай тине:*** Был таҗзәхмәт сикләүе беҙгә шул тиклем дә һабаҡ бирҙе: булғанды ҡәҙерләргә, дуҫ-туғанды баһалай белергә, бергә йәшәү һәм эшләү бәхетен аңларға өйрәтте. Коллегалар, сәхнә, тамашасы шул тиклем һағындырған. Бөтөн ошо булғандан яҙып, ҡулдан алып ярға ташланған балыҡ хәлендә ҡалдыҡ бит. Аллам һаҡлаһын! Иҫән-һау булып, залдар тултырып, тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә яҙһын артабан. Телевизор, интернет һәм башҡалар ғына тултыра, тулыландыра алмай был күңелде - әҙәм булмышын. Уға тере мәҙәниәт, тере әҙәбиәт һәм сәнғәт кәрәк.

***Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған артисы Хәким Мортазин һөйләгәндәрҙән:*** Коллегаларымды иҫән-һау күреүемә шатмын. Шул уҡ ваҡытта иждат багажыма тағы ла бер миҙгел емеше төшөп ята, был үткән ғүмер, йылдар һаны. Старт алдым - ең һыҙғандым. Ә йәштәргә теләгем шул: тамашасыға ҡыҙыҡлы булыу өсөн матур йөҙ-һын менән һөйкөмлө тауыш ҡына аҙ. Белем кәрәк. Халыҡты әсир итергә теләгән актермы, уҡытыусымы, депутатмы - ул белемле, аңлы, киң даирәле һәм фәлсәфәүи фекерле була белергә тейеш. Уңыш хеҙмәт менән һәләт емеше ул. Һәм шул уңышты теләйем барыбыҙға ла.

Әйткәндәй, М.Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры 8 сентябрҙә Новокуйбышевск ҡалаһында "Зөләйха күҙҙәрен аса" спектаклен күрһәтә. Сара "Алтын битлек" театр фестивале сиктәрендә ойоштора. Новокуйбышевск ҡалаһындағы фестиваль Рәсәйҙең Мәҙәниәт министрлығы, Президент гранттары фонды ярҙамында тормошҡа ашырыла һәм был ҡалала өсөнсө тапҡыр уҙғарыла. Фестивалдә беҙҙең театр менән бер рәттән, Мәскәү һәм Санкт-Петербург театрҙарының сығыштары көтөлә.

"Зөләйха күҙҙәрен аса" спектакле 2019 йылда "Алтын битлек" премияһының алты номинацияһына дәғүә итте һәм "Алтын битлек"тең драма һәм ҡурсаҡ театрҙары жюрийының Беренсе махсус призына лайыҡ булды.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЕРЕ БАРҘЫҢ ЕМЕ БАР,

## еме барҙың име бар

Көнсөллөктөң байрамы булмай.

**(Фрэнсис Бэкон).**

Кеше башҡалар уны күҙәтә икәнде белгәндә генә үҙен күҙәтә башлай.

**(Маркиз Галифакс).**

Еңел эшкә - ауыр эшкә тотонған кеүек, ауыр эшкә еңел эшкә тотонған кеүек тотонма. Тәүге осраҡта ышанысың - битарафлыҡҡа, икенсеһендә үҙ-үҙеңә ышанмауың ҡыйыуһыҙлыҡҡа әйләнмәһен өсөн.

**(Бальтасар Грасиан).**

Тормош тойғолар менән йәшәүсе өсөн - трагедия, аҡыл менән йәшәүсегә - комедия.

**(Жан Лабрюйер).**

Башҡаларҙың серен сисергә яратһаҡ та, үҙебеҙҙең серҙе белдерергә яратмайбыҙ.

**(Франсуа де Ларошфуко).**

Өйөңдә эт тотаһың икән, тимәк, эт һиңә түгел, һин эткә хеҙмәт итәһең.

**(Мишель Монтень).**

Кеше йышыраҡ аҙаҡ маҡтанып һөйләү өсөн белем алырға тырыша.

**(Блез Паскаль).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер мулла вәғәз уҡырға тип мәсеткә килгән. Ләкин мәсеттә бер йәш ат ҡараусынан башҡа берәү ҙә юҡ, ти. Мулла эстән генә уйлай икән: "Мин вәғәз уҡырға тейешменме, юҡмы?". Был хаҡта ул ат ҡараусынан һорарға булған: "Һинән башҡа бында берәү ҙә юҡ, мин вәғәз уҡырға тейешменме, юҡмы?" Ат ҡараусы былай яуап биргән: "Мин ябай кеше. Был мәсьәләлә бер ни ҙә аңламайым. Ә шулай ҙа мин үҙем ат һарайына килеп, бөтөн аттарҙың да ҡасып бөткәнен, әммә берәүһенең генә тороп ҡалғанын күрһәм дә уға барыбер ашарға бирәм".**

**Мулла был һүҙҙәрҙе күңеленә яҡын алып, үҙенең вәғәзен һөйләй башлаған. Ике сәғәт буйы туҡтамай һөйләгән ул. Күңелендә шундай еңеллек тойған. Үҙ сығышына ҡарата ниндәйҙер йылы һүҙ ишеткеһе килеп, ат ҡараусыһынан: "Вәғәзем оҡшанымы һиңә?" - тип һорай икән. Ат ҡараусы ул шулай тип яуап биргән: "Мин ябай кеше һәм быларҙың барыһын да аңлап етмәйем, тип әйттем инде. Ләкин ат һарайына килеп, бар аттарҙың да ҡасып бөткәнен, берәүһенең генә ҡалғанын күрһәм дә уға ашарға бирәм. Ләкин мин уға башҡа аттарға тәғәйенләнгән бар аҙыҡты ла биреп бөтөрмәйем..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 21036

Баш мөхәррир: Гөлфиә ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт: Сәриә ҒАРИПОВА, Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: 450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
БР «Республика Башкортостан» нәшриәт йорто ДУП филиалы - «Башҡортостан» республика нәшриәтендә баҫылды (450079, БР, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 сентябрь 17 сәғәт 30 мин. Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 3250
Заказ - 1022